**МӘҒАРИФ БУЙЫНСА ФЕДЕРАЛЬ АГЕНТЛЫҠ**
**БАШҠОРТ ДӘҮЛӘТ УНИВЕРСИТЕТЫ**

**Р.Д. МОСТАФИНА**

# ЕГЕРМЕНСЕ БЫУАТТЫҢ УТЫҘЫНСЫ ЙЫЛДАРЫНДА БАШҠОРТ ӘҘӘБИӘТЕ

(*төп үҫеш тенденциялары һәм герой проблемаһы*)

**Уҡыу әсбабы**

**ӨФӨ**
**БДУ нәшриәте**
**2010**



УДК 821.512.141. 09
ББК 83.3(2 Рос=Баш)

**Рецензенттары:**

**Бөрө дәүләт социаль педагогия академияһының башҡорт филологияһы кафедраһы (Бөрө)**
**М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының башҡорт әҙәбиәте һәм мәҙәниәте кафедраһы мөдире, филология фәндәре кандидаты Г.Г.Ғәлина (Өфө);**

**Мостафина Р.Д. Егерменсе быуаттың утыҙынсы йылдарында башҡорт әҙәбиәте (төп үҫеш тенденциялары һәм герой проблемаһы). Уҡыу әсбабы. -Өфө: БДУ нәшриәте, 2010. -130 бит.**

Әсбапта егерменсе быуаттың утыҙынсы йылдар башҡорт әҙәбиәте геройы проблемаһы совет осоро башҡорт әҙәбиәте үҫешенә яңы ҡараштар концепцияһынан өйрәнелә. Яңы герой характерында осор һыҙаттарының сағылыш аспекттары ҡарала. Яҙыусыларҙың замандаш образын һынландырыу оҫталығы, новаторлығы мәсьәләләренә лә баҫым яһала.

Уҡыу әсбабы студенттар, аспиранттар, әҙәбиәт белгестәре өсөн тәғәйенләнә.

УДК 821.512.141. 09
ББК 83.3(2 Рос=Баш)

©Мостафина Р.Д., 2010
©БашДУ, 2010

**ФЕДЕРАЛЬНОЕ АГЕНТСТВО ПО ОБРАЗОВАНИЮ
БАШКИРСКИЙ ГОСУДАРСТВЕННЫЙ
УНИВЕРСИТЕТ**

**Р.Д.Мустафина**

# БАШКИРСКАЯ ЛИТЕРАТУРА ТРИДЦАТЫХ ГОДОВ XX ВЕКА

*(ОСНОВНЫЕ ТЕНДЕНЦИИ РАЗВИТИЯ И ПРОБЛЕМА ГЕРОЯ)*

**Учебное пособие**

**Уфа
РИЦ БашГУ
2010**



УДК 821.512.141. 09
ББК 83.3(2 Рос=Баш)

**Рецензенты:**

**кафедра башкирской филологии Бирской социально-педагогической академии (Бирск)
кандидат филологических наук, зав.кафедрой башкирской литературы и культуры Башкирского государственного педагогического университета им. М.Акмуллы Г.Г.Галина (Уфа);**

**Мустафина Р.Д. Башкирская литература тридцатых годов XX века (*основные тенденции развития и проблема героя*). Учебное пособие. – Уфа: РИЦ БашГУ, 2010.- 130 стр.**

В учебном пособии исследуются основные тенденции развития и проблема героя башкирской литературы тридцатых годов XX века с современных концепций - новых взглядов на литературу советского периода. Анализируется процесс формирования героя в новую эпоху, изучаются аспекты отражения в характере героев особенностей, противоречий этого периода. Исследуются новаторство и мастерство писателей в создании образа современника этих лет.

Книга предназначается студентам, аспирантам, литературоведам.

УДК 821.512.141. 09
ББК 83.3(2 Рос=Баш)

©Мустафина Р.Д., 2010
©БашГУ, 2010

Йөкмәткеһе

Инеш……………………………………………………3

Беренсе бүлек.
Осорҙоң социаль-ижтимағи шарттары
һәм әҙәбиәттә яңы герой проблемаһы………………..15
Һорауҙар һәм эштәр……………………………………57

Икенсе бүлек.
Осор ҡаршылыҡтарының әҙәби типтарҙа
һынланыш концепцияһы………………………………58
Һорауҙар һәм эштәр……………………………………87

Өсөнсө бүлек.
Утыҙынсы йылдар геройы егерменсе быуат
башҡорт әҙәбиәте традициялары һәм новатор
лығы системаһында……………………………………..89
Һорауҙар һәм эштәр……………………………………108

Һығымта…………………………………………………109
Осор буйынса курс эше темалары……………………..117
Әҙәбиәт…………………………………………………..118



**И Н Е Ш**

Әҙәбиәттең яңылығы, үҫеше герой проблемаһын хәл итеү менән дә бәйле. “Ысын әҙәбиәт, иң беренсе сиратта, яңы характерҙы асыу менән билдәләнә”[1]. Ижад методының ниндәй геройҙы һайлауына һәм хәл итеүенә ҡарап, дәүер һыҙаттары хаҡында һүҙ йөрөтөргә мөмкин. Әҙип үҙ осороноң характерында донъяға, тирә-яҡ мөхиткә ҡараштарын, идея-художество концепцияһын, уҡыусыһына әйтергә теләгән фекерҙәрен һала. Яҙыусыны замандашының күңел донъяһы, теләк-ынтылыштары ҡыҙыҡһындыра. Шул уҡ ваҡытта әҙип замандаш образын һүрәтләп кенә ҡалмай, унда күрергә теләгән һыҙаттарҙы ла бирергә ынтыла, йәмғиәткә йоғонто яһау, уҡыусыһын тәрбиәләү маҡсатын да ҡуя, йәки, герой аша яҙыусының тормошҡа актив мөнәсәбәте сағыла.

Шулай итеп, әҙәбиәттең төп һүрәтләү объекты – кеше. Әҙип кешене өйрәнә — шуның аша тормошто өйрәнә. “Кешенең тормошто нәфис ҡабул итеүгә бөтмәҫ-төкәнмәҫ мохтажлығы - уны башҡа йәнле тәбиғәттән айырып тороусы һыҙаттарҙың береһе. Шуға күрә лә унын үҙе тураһында һөйләүенең сиге юҡ һәм булмаясаҡ, шуға күрә лә әҙәбиәттең проблемалары нигеҙендә кеше проблемаһы ята”[2], — ти Сыңғыҙ Айтматов.

“Бәхәстәр әҙәбиәттең ниндәй генә проблемаһына ҡағылмаһын, унда ниндәй генә ҡаршылыҡлы фекерҙәр әйтелмәһен, һүҙ, аҙаҡ килеп, әҙәбиәттәге герой проблемаһына килеп терәлә, төп иғтибарҙы барыбер заман геройы, замандаш образы, уның социаль һәм әхлаҡи йөҙө ынтылыштары тарта”[3],— тип билдәләй Р.Н.Байымов.

---

[1] Гранин Д. Речь на пятом съезде писателей РСФСР // Литературная газета, 1980, 12 декабря.
[2] Айтматов Ч. Ответственность перед будущим // Вопросы литературы. -1967. -№ 9. -С.75.
[3] Байымов Р.Н. Заман геройының заманса һыҙаттары // Ағиҙел. -1976. -№3. -12-се бит.

Әҙәбиәттә герой табыу һәр саҡ тура һыҙыҡ менән генә бармай. Заманы, йәмғиәт шарттары менән бәйле проблемалы, бәхәсле лә мәсьәләләрҙең береһе булып тора. Мәҫәлән: XX быуат башында Октябрь инҡилабы менән килеп ингән яңы ҡоролоштоң, яңы эпоханың әҙәбиәте алдында "революцион дәүерҙең геройы"[4] мәсьәләһе торҙо. Яңы ҡоролоштоң геройы ниндәй булырға тейешлеге хаҡында әҙәби тәнҡиттә төрлө-төрлө фекерҙәр булды. Тәнҡитсе Х.Наум: "Хәҙерге әҙип иң элек ижадының ижтимағи йөкмәткеһенә, унын социаль ҡиммәтенә нык әһәмиәт бирергә тейеш. Ана шунан һуң ул йөкмәткене, социаль ҡиммәтте яҡшы формаларға һалырға, көслө буяуҙарға буярға, "ебәк"кә урап массаларға йотторорға тейеш"[5], — тип билдәләне, әҙәби характерҙа ижтимағи факторҙарҙың, социаль ҡиммәттәрҙең алғы планда һүрәтләнеүенә саҡырҙы. Ғ.Ғөзәйеровтың: "Лирик шиғырҙар беҙҙең заманға ҙур ҡурҡыныс алып килә. Беҙҙең эпоха лирика өсөн түгел, сөнки лирика кешенең кәйефе, хәсрәттәре кеүек субъективлыҡты йырлай"[6],- тип белдереүе индивидтың рух диалектикаһы, хис-тойғолар аша асылыуын инҡар итте.

Һикһәненсе йылдар башында илдәге демократик үҙгәрештәр әҙәбиәттә лә ижад мәсьәләһенә баһа-критерийҙарҙы ҡарап сығыуға килтерҙе. Был герой мәсьәләһен дә урап үтмәне. "Ыңғай герой", "кире герой" тигән төшөнсәләр тирәһендә бәхәстәр ҡуйырҙы. "Бында герой хаҡында бәләкәй генә бәхәс ҡабынды. "Ыңғай" һәм "кире" тигән билдәләмәләр схематик икәне асыҡ. Минеңсә, персонажды баһалауҙа мөһим критерий булып уның уҡыусыны яулап алыуы, тормоштағыса ышандыра алыусанлығы булырға тейеш"[7], - тип билдәләне А.Якубан.

"Характерҙың үҫеш диалектикаһы - ошо иң мөһиме һәм ул бер ҡасан да юғалтылырға тейеш түгел һәм ул диалектика психологик ышандырырлыҡ, әҙәби дөрөҫлөгөндә бирелгән

[4] Горький А.М. Собр.соч. в 30-ти томах. Том. 30. -М.: Госполитиздат, 1955. – С.39.
[5] Наум Х. Марксизм һәм сәнғәт, әҙәбиәт мәсьәләләре // Октябрь. -1930. -№ 1- 4. - 75-се бит.
[6] Ғөзәйеров Ғ. Батыр шиғырҙары // Яңылыҡ. -1928. -№ 13-14. -16-сы бит.
[7] Литературная газета, 1980, 24 декабря.



диалектика булырға тейеш"[8] кеүек фекерҙәр геройҙы һынландырыу горизонттарының киңәйеүен, әҙәбиәттең элекке тар социалистик сикләүҙәрҙән ҡотолоп, эстетик асылына ҡайта башлауын аңлатты.

Һәр заман үҙенең геройын үҙе тыуҙыра. Һәр осор геройының характер һыҙаттары тирә-яҡ мөхит менән билдәләнә. Донъя әҙәбиәте, шул иҫәптән башҡорт әҙәбиәте геройы ла ҙур үҫеш юлы үтте. Фольклорҙағы, боронғо әҙәбиәттәрҙәге геройҙың батыр, ҡаһарман характеры халыҡтың яҡты идеалдары менән бәйле. Халыҡ үҙен бөтә төр ҡара көстәрҙән һаҡлаусы геройҙы батырҙар образында күргән.

Үткән быуаттарға күҙ һалайыҡ: XVIII быуатҡа тиклем дәүерҙә геройҙың юғары ҡатлам вәкиле булыуы, әҙиптәрҙең тарихтың кешеһен өҫкө ҡатлам араһынан эҙләүе - заманы менән бәйле. Шекспир, Фирҙәүси, классицизм вәкилдәре юғары ҡатламдарҙы, ҡулында власть булғандарҙы йәмғиәтте үҙгәртерҙәй көс итеп ҡараған. Фирҙәүсиҙең "Шахнамә"һендә Кей-Хөсрәү, Низамиҙың "Искәндәрнамә", Навоиҙың "Искәндәр валы" әҫәрҙәрендәге Искәндәр образы - аҡыллы, ғәҙел идара итеүсе идеалы. Шекспирҙың Король Лир, Гамлет образдарын ғына алайыҡ. Гамлет - юғары ҡатлам вәкиле, ул кешеләрҙең бөйөк аҡылына ышанған, йәмғиәтте аҡыл менән үҙгәртеүгә хыялланған принц. XVIII быуатта классицизм вәкилдәренең - Европа әҙәбиәтендә - Мольерҙың, рус әҙәбиәтендә - Кантемир, Фонвизиндарҙың әҫәрҙәренең үҙәгендә юғары синыф вәкилдәре хәрәкәт итә. "Шахнамә" дастанының исеме үк әйтеп тороуынса, автор иран батшаларын, Сасанидтар династияһы вәкилдәрен үҙәк геройҙар итеп ала.

Революцияға тиклем көнсығыш әҙәбиәте үҙәнендә үҫешкән төрки халыҡтары әҙәбиәтендә лә яҙыусыларҙың ҡарашы ҡулында власть, көслө хакимлығы булған геройға һалынған. Ҡол Ғәлиҙең "Йософ ҡиссаһы" әҫәренең төп геройы Йософ - тигеҙлекте, хаҡлыҡ, дөрөҫлөктө яратыусы ғәҙел батша идеалы.

Социаль-ижтимағи шарттар ҡатмарлаша, ябай халыҡ өҫтөнән капиталистик мөнәсәбәттәр эксплуатацияһы көсәйә барған һайын, герой концепцияһы ла үҙгәргән. Башта юғары синыф араһынан сыҡҡан геройҙарҙа йәмғиәттең төп көстәре итеп ҡаралған

[8] Шунда уҡ.

ҡатламдарҙың власть өсөн көрәштәре, үҙ мәнфәғәттәрен генә күҙәтеүҙәре һүрәтләнеп, уларҙың үҙҙәрен камиллаштырыу, халыҡ өсөн хеҙмәт итеү ҡарашы сағыла. Фирҙәүси “Шахнамә”лә үк геройҙарын идеаллаштырмай, шул осор феодаль йәмғиәттә власть өсөн барған көрәште һүрәтләп, уларҙың йәшәү асылын фаш итә. Сасанидтар араһынан сыҡҡан Мәхмүт Солтанға панегерика уға сатира менән тамамлана.

Артабанғы дәүерҙә камил аҡыл, ғәҙеллек менән йәмғиәтте үҙгәртергә теләгән шәхес үҙ синыфы араһында “артыҡ кеше” тибы булып килеп инә: Грибоедовтың Чацкийы (“Горе от ума”), Пушкиндың Евгений Онегины. Йә ул синыфтың артабан йәшәүгә хоҡуғын юғалта барыуы дөйөмләштерелә: Ф.Достоевскийҙың “Братья Карамазовы”, Салтыков-Щедриндың “Господа Головлевы”, Тургеневтың “Отцы и дети” һ.б. әҫәр геройҙары.

XIX быуат әҙәбиәтендә халыҡ мәнфәғәтен сағылдырыусы геройҙарҙың әҫәр үҙәгенә сыға барыуын күрергә мөмкин. Яҙыусыларҙы “кеше-йәмғиәт” мәсьәләләре нығыраҡ борсоған. Ябай халыҡ араһынан сыҡҡан йәки массалар яҙмышын яҡлаусы геройҙар рельефлырак була барған, улар тарихтың төп көстәре итеп бирелгән. Сөнки йәмғиәттә лә, көрәштә әле яңғыҙ булһалар ҙа, ундай геройҙар айырылып сыға башлаған. Бер нисә генә миҫал: Чернышевскийҙың “Ни эшләргә?” романында Рахметов — ябай кешеләрҙең тормошон еңеләйтергә теләгән революционер-демократтар тибы, Некрасов поэмаларының төп геройҙары — көслө рухлы ябай халыҡ вәкилдәре (Гриша Добросклонов, Яким Нагой, Дарья һ.б.).

Революцияға тиклемге башҡорт әҙәбиәтенең геройы — ябай халыҡ мәнфәғәттәрен сағылдырған, уның милли яҙмышы менән борсолған, социаль тигеҙһеҙлекте фашлаған герой характеры. Салауат Юлаев, М.Өмөтбаев, М.Аҡмулла шиғриәте геройҙары — халыҡтың ирекҡә ынтылышын сағылдырған образдар.

Милли ерлектә тыуған геройҙың ынтылыштарының дөйөм халыҡ культураһы, донъя әҙәбиәте геройы менән уртаҡ, дөйөм яҡтары ла бар. Ш.Зәки, Һ.Салихов кеүек суфый яҙыусылар ижадтарындағы герой урта быуат Көнсығыш аҡыл эйәләре Сәғҙи, Руми, Европа һәм рус әҙәбиәтендә реакцион романтизм вәкилдәре биргән әҙәби типтар менән бер. Башҡорт мәғрифәтсеһе геройы идеялары XVIII быуат Европа һәм рус мәғрифәтселек осоро



геройының ынтылыштары менән ауаздашлыҡ таба. Мәғрифәтселәр халыҡ тормошон еңеләйтеү юлдарын уҡыуҙа, камиллыҡҡа ынтылыуҙа күргәндәр. Ун туғыҙынсы быуат, егерменсе быуат башы башҡорт әҙәбиәтенең ыңғай герой концепцияһын белемгә, мәғрифәткә, камиллыҡҡа ынтылған характер билдәләй.

Шулай итеп, һәр заман шарттары үҙ дәүеренең геройын һайлауға үҙгәрештәр индергән.

Яҙыусы геройҙа дәүеренең типик һыҙаттарын дөйөмләштереү менән бергә, уның характерын төрлө яҡлап асыу маҡсаттарын да ҡуя.

Донъя әҙәбиәте ана шундай үҙҙәренә генә хас шәхсиәттәре менән айырылып торған характерҙарҙа тормошто күп яҡлы һынландырыуҙың классик өлгөләрен дә бирҙе.

Антик әҙәбиәт индивидты бөтә ҡатмарлығында, коллизияларында сағылдырыуы менән айырылып тора. “Антик әҙәбиәттең ҡаҙанышы — кешенең эске донъяһын күп яҡлы һынландырыу”[9],— ти С.М.Петров. Эсхил, Еврипид, Софокл, Аристофан кеүек антик әҙәбиәт трагиктары һәм комедиографтары - кеше хис-тойғоларының ҙур белгестәре.

Антик әҙәбиәттә аллалар образы яратыу, ғазапланыу, хәсрәтләнеү кеүек ер кешеләренә хас тойғолар аша бирелгән.

Софоклдың “Эдип батша” трагедияһында Эдип үҙ улын үлтергәненә аталарға хас тойғолар менән хәсрәтләнә. Еврипидтың Медеяһы (“Медея”) ҡатмарлы һөйөү хистәре менән яныуы аша иҫтә ҡала. Артабанғы дәүерҙәрҙә лә геройының психологик портретын ҡаршылыҡлы итеп биргән Шекспир, Пушкин, Достоевский кеүек хис - тойғолар “инженерҙары”н атарға мөмкин. Шекспир хаҡында Гете: “Шекспир әҫәрҙәренең бөйөк нигеҙе булып дөрөҫлөк һәм тормош үҙе хеҙмәт итә, шуға күрә ул яҙғандарҙың бөтәһе лә көслө һәм ышандырғыс”[10], - тигән. Шекспирҙың Король Лир, Гамлет, Отелло, Достоевскийҙың Раскольников, Пушкиндың хистәрҙең ҡатмарлыларын, ҡаршылыҡлыларын кисергән лирик геройҙары — реаль ысынбарлыҡтың күп яҡлы һыҙатланышы. Ул геройҙар

[9] Петров С.М. Реализм. -М.: Просвещение, 1964. -С.26.
[10] Гете. Избранные произведения. -М.: Госкомиздат, 1950. -С.116.

кисергән тойғолар - тормош шарттары менән, кешеләр араһындағы мөнәсәбәттәр бәрелеше менән билдәләнгән тойғолар.

Әҙип тирә-яҡ мөхитте һынландырғанда, геройының характерында теге йәки был һыҙаттарға өҫтөнлөк биреүе уның төрлө типтарын тыуҙыра, тормоштоң эмоциональ яғының төрлөлөгөн билдәләй. Мәҫәлән, әҙәби образдың романтик һыҙаттары аша бирелеүе. Көнсығыш әҙәбиәте геройҙарына хас һыҙаттарҙың береһе. Навоиҙың "Фәрхәт һәм Ширин", төрки халыҡтарында Ҡотобтың уға эйәреп яҙған "Хөсрәү һәм Ширин" әҫәрҙәренең төп геройҙары. Европа әҙәбиәтендә лә бар миҫалдар: шул уҡ Шекспирҙың Отелло, Ромео һәм Джульетта, рус әҙәбиәтендә Лермонтовтың "Мцыри", Пушкиндың "Кавказ тотҡоно" поэмаларының төп геройҙары. Геройҙарҙың романтик һыҙаттары ябай хис-тойғолар күренеше генә түгел, ә заман сағылышы. Шекспирҙың Ромео һәм Джульетта мөхәббәте — урта быуат дини фанатизмынан, кешеләрҙе ерҙәге реаль хистәрҙән ситләштерергә ынтылған схоластиканан тантанаһы, Виктор Гюгоның "Собор Парижской богоматери" романынан матурлыҡ, гүзәллек, һөйөү кеүек хистәрҙе үҙендә йөрөткән Эсмеральда — дин әһеле Клод Фролдың күктәге тормошҡа ғына табыныу идеяларын юҡҡа сығарыусы. Лермонтовтың "Мцыри" әҫәренең төп геройының матурлыҡҡа, мөхәббәткә ынтылышы, монастырҙан ҡасыуы — монастырь стеналарынан ғына түгел, рухи ҡоллоҡтан ҡотолоп, ирекҡә, азатлыҡҡа ла ынтылышы.

Бер яҙыусының ғына түгел, теге йәки был ижад методының, бер осор әҙәбиәтенең герой, характер тибын айырып күрһәтергә мөмкин. XV быуат — Ренессанс осоро — психологик тип, сентименталистар йәки романтизм методы вәкилдәре геройҙары — романтик, XVIII-XIX быуат тәнҡитле һәм мәғрифәтселек реализмы осоро — социаль-ижтимағи тип.

Әҙип замандашы образында үҙенең дәүеренең проблемаларын хәл итергә ынтылышы менән бергә дөйөм кешелекте ҡыҙыҡһындырған мәсьәләләргә лә мөрәжәғәт итә.

"Тормошта һәм әҙәбиәттә дөйөм халыҡ өсөн, дөйөм кешелек өсөн характерлы типтар булыуы мөмкин"[11] - ти А.И. Ревякин.

[11] Ревякин А.И. Проблема типичности в художественной литературе. -М.: Издательство Академии пед.наук. РСФСР, 1959. -С.32 .



Яҙыусының ошо милли характерында һәр халыҡ үҙенең әйләнә-тирәһендәге күренештәрҙе лә таныһа, әҙип үҙ заманынан юғары күтәрелеп, дөйөм кешелекте ҡыҙыҡһындырған һорауҙарға үҙ геройы аша яуап бирә икән - ул характер - бөтә халыҡтар өсөн дә "уртаҡ" образ. Ундай геройҙар халыҡлашып китә, быуаттар буйына бөтә башҡа әҙәбиәттәрҙе, халыҡтар зауығын "һуғарып тора". Грек мифологияһы геройы Прометейға XIX быуатта Шеллиҙың, XX быуатта Мостай Кәримдең мөрәжәғәт итеүе быға асыҡ миҫал. Дөйөм кешелек өсөн ҡиммәтле булған әҫәрҙәр геройҙары дөйөм халыҡтар культураһы ҡаҙанышына әүерелә. Фирҙәүсиҙең шул уҡ "Шахнамә"һен генә алайыҡ. Донъя халыҡтары мәҙәниәтендә уның ҡаҙанышы — кеше концепцияһын хәл итеүҙә гуманизмды раҫлауы, мәңгелек ҡиммәттәр хаҡында идеяһы. Фирҙәүси үҙ заманынан юғары күтәрелеп, ғөмүмән камил шәхес идеяһын раҫлай. Әҙип иран батшалары, Сасанидтар династияһын, феодаль йәмғиәттә барған ваҡиғаларҙы һүрәтләй, әммә уның гуманизмы шунда – ул батшаларҙы ла, батырҙарын да ҡатламдарға ҡарап түгел, ә кешелек сифаттарына ҡарап бүлә. Баҡый донья алдында бөтә кеше лә бер тигеҙ тигән фекерҙе үткәрә. "Кей-Хөсрәү ни тиклем ҡулында көслө власть тотмаһын, үлем кеүек "яуыз йылан"дан ул да ҡотола алмай"[12],- ти Фирҙәүси.

Ғүмәр Хәйәмдең мәжлестәрҙә әйтелер һүҙ булып, йәиһә теге йәки был осраҡ менән генә тыуған робағиҙары фани донъя мәшәкәттәренән ваз кисеп, рәхәт йәшәргә саҡырыуға ғына ҡоролған кеүек, сөнки баҡый донья ғына мәңгелек, баҡый донъяға киткәс, фани донъяла ғазапланыуҙарыңдың бер кәрәге лә юҡ идеяһын раҫлай кеүек. Ғ.Хәйәм үҙ осороноң йәмғиәте шарттарына ҡаршы сығыусы бунтарь лирик геройын бирә, ә ошо уйҙар, фәлсәфә артында — гуманизм. Ирекле рухлы, азат кеше гуманизмын раҫлау - бөтә халыҡтарҙы ла ҡыҙыҡһындырырлыҡ рухи ҡиммәттәр. Был осраҡта геройҙың тәрән дөйөмләштереү ҡеүәһенә эйә булыуы тураһында, типиклаштырыуҙың юғары өлгөһө хаҡында һүҙ бара. Гоголдең Плюшкин ("Үлек йәндәр") образын ғына алайыҡ. Автор үҙ осороноң бер помещигы тибын һүрәтләй, әҙип уның характерын шундай

[12] Фирдауси. Шахнаме: Т.2. -М., 1960. –С.356-357.

буяуҙарҙа бирә - ул ғөмүмән һаранлыҡ сифатын дөйөмләштергән тип булып күҙ алдына баҫа.

Шулай итеп, герой концепцияһында, төрлө яҡлы һүрәтләнгән герой характерында әҙип дәүергә эстетик ҡараштарын һала. Геройҙың теге йәки был характер һыҙаты, хәрәкәте, эш-ҡылыҡтары һәр береһе айырым йәшәмәй, авторҙың билдәле бер ҡараштарынан сығып һүрәтләнә, бер фокусҡа туплана. Л.Гинзбург билдәләүенсә: "Әҙәби герой - уны ойоштороусы доминанталар суммаһы түгел, ә системаһы. Уларҙы бәйләп тороусы принцип — автор ҡарашының фокусы булмаһа, әҙәби герой һыҙаттар йыйылмаһы булыр ине"[13].

Совет осоронда ла әҙәбиәт этаптар үтте. Совет әҙәбиәтенең геройы М.Горькийҙың "Әсә" романының Павел Власовынан уҡ башлана. Совет осоро әҙәбиәте лә буш ерлектә барлыҡҡа килмәне. Революцияға тиклемге әҙәбиәт, бигерәк тә тәнҡитле реализм әҙәбиәте геройы яңы йәмғиәттең яңы кешеһенә ерлек, нигеҙ әҙерләне. Шәхес-масса бәйләнештәре проблемаһында яңы әҙәбиәт ябай халыҡ массаһы араһынан күтәрелгән индивидты күрһәтте.

Башҡорт әҙәбиәтенең совет осоро геройы М.Ғафуриҙың "Ҡыҙыл байраҡ" шиғырынан ҡулына революция символы - ҡыҙыл әләмде тотҡан эшсе образынан башлана тип әйтергә мөмкин. Шулай уҡ ул геройға нигеҙҙе шағир революцияға тиклем яҙған "Үҙем һәм халҡым" шиғырындағы ярлылар менән уртаҡ уйлы булған образда һалған ине.

Егерменсе йылдар әҙәбиәте Октябрь инҡилабын тормошҡа ашырған, яңы йәмғиәт төҙөүгә тотонған яңы кеше образының тәүге үрнәктәрен бирҙе.

Утыҙынсы йылдарҙа яңы социалистик ҡоролоштоң яңы кешеһен, дәүерҙең типик характерын һынландырыуҙа ныҡышмалы эҙләнеүҙәр барҙы.

Һуғыш осоро геройы — һалдат-яугир, патриот, азатлыҡ һаҡсыһы. "Башҡорт яҙыусылары Бөйөк Ватан һуғышының тәүге айҙарынан уҡ совет кешеһенең яуҙағы батырлығын күрһәтеүгә, совет һалдатының героик образын тыуҙырыуға бик ҙур әһәмиәт

[13] Гинзбург Л.Я. О литературном герое. -Л.: Советский писатель, Ленинградское отделение, 1979. -С.90.



бирҙеләр"[14]. Фронтҡа киткән ирҙәрҙе алмаштырған, характерҙары фиҙаҡәр хеҙмәттә асылған ҡатын-ҡыҙҙар, ҡарттар, балалар, йәш үҫмер ҡыҙҙар был осор әҙәбиәттең төп геройҙары булдылар. Уларҙы берҙәм көс итеп туплаған тойғо — Тыуған илгә мөхәббәт, дошманға нәфрәт тойғоһо.

Һуғыштан һуңғы әҙәбиәттә яуҙан еңеп ҡайтып, илде яңынан аяҡҡа баҫтырыуғаең һыҙғанып тотонған "погонһыҙ һалдаттар", ауыл хеҙмәтсәндәре, девон ҡатламындағы нефть өсөн көрәшеүселәр, ауыл менән һаман да иҫкесә етәкселек итеүгә ҡаршы сыҡҡан новатор-геройҙар һәм башҡа образдарҙа актив герой концепцияһы асылды. Яҙыусылар ауыр һәм оҙайлы һуғышты еңеп сыҡҡан, бөтә ер йөҙөндә тыныслыҡ булһын өсөн һәр ваҡыт уяу булған, интернациональ дуҫлыҡ тойғоларына тоғро совет кешеһе образын кәүҙәләндерҙе.

60-70-се йылдар геройы — фәнни-техник революция осоро, коммунистик йәмғиәт кешеһе. "Ул башлыса халыҡ уй-ынтылыштарын, уның борсолоуҙарын дөйөмләштергән, граждanлыҡ йәһәтенән өлгөргән, ижтимағи теремек шәхес"[15]. Был осор замандаш образы шуныһы менән айырылып торҙо: яҙыусылар геройҙы фәлсәфәүи планда бирергә тырыштылар. Әйтәйек, М.Кәрим, Ә.Бикчәнтәев, Ғ.Рамазанов, Х.Ғиләжев, рус әҙәбиәтендә В.Шукшин, В.Распутин, В.Астафьев, С.Айтматов әҫәрҙәре геройҙары.

80-90-сы йылдарҙа йәмғиәткә килгән демократик үҙгәртеп ҡороуҙар шәхестең дә активлашыуына килтерҙе. "Ул — бөгөнгөһө, киләсәге, үткәне, тыуған еренең экологик хәле, туған халҡының яҙмышы, милли теленең киләсәге өсөн борсолоп набат һуҡҡан шәхес булды"[16]. XX быуат аҙағы XXI быуат башы геройы әҙәбиәтселәрҙең дә, бөтә йәмәғәтселектең дә иғтибар үҙәгендә торған, борсолдорған мәсьәләһе булды. Матбуғат биттәрендә "ижтимағи активлыҡ, ынтылыштар хас түгел бөгөнгө хикәйә геройына"[17] тигән ҡәтғилекте лә, "әҙәбиәттәге яңы герой заман кешеһенең типик характерын, халыҡтың юғары рухи-эстетик зауығын, уй-фекерҙәрен, йәшәйешен сағылдырыр бер образ булырға тейештер, замандың алдынғы идеяларын, яңы ҡараштарын, демократик принциптарын алға һөргән,

[14] Башҡорт әҙәбиәте тарихы: 6 томда: 4- се том. -Өфө: Китап, 1993. -55-се бит.
[15] Башҡорт әҙәбиәте тарихы: 6 томда: 6-сы том. -Өфө: Китап, 1996. -6-сы бит.
[16] Шунда уҡ.
[17] Даянова Г. Заман күҙенә ҡарап //Ағиҙел. -1992. -№ 10. -133-сө бит.

күптәргә үрнәк булып торған юғары интеллектлы һәм культуралы шәхестер ул”[18] тигән яңы герой тураһында уйланыуҙарҙы ла күрергә мөмкин ине.

Ысынлап та, XX быуаттың һуңғы йылдарында әҙәбиәттә герой юҡ, геройһыҙ әҙәбиәт тигән фекерҙәр йыш ишетелде. Ике быуат алмашыныуы менән билдәләнгән эпохала йәмғиәт тә күсеү осоронда булды, әҙәбиәт тә ижади эҙләнеү осорон кисерҙе.

Хәҙер егермense быуат аҙағы егерме беренсе быуат башы геройы характеры һыҙаттары ниндәйҙер кимәлдә әҙәбиәттә билдәләнде лә кеүек. Хәҙерге әҙәбиәттә илдең социаль-ижтимағи һәм башҡа проблемалары менән янған актив герой һыҙаттары күҙ алдына баҫа.

Һуңғы бер нисә тиҫтә йылдар йәмғиәтебеҙ, мәҙәниәтебеҙ өлкәһендә яңырыу осоро булды. Был яңырыу һәр халыктың үҙ милли рухи мираҫтарына иғтибарының, тарихҡа ҡыҙыҡһыныуының артыуы менән дә билдәләнә. Һәр халыҡ үҙенең милли культураһын өйрәнеү, милли ҡиммәттәргә әйләнеп ҡайтыуы менән бөгөнгө рухын байыта.

Бөгөнгө көндә совет осоро әҙәбиәтен, шул иҫәптән утыҙынсы йылдар әҙәбиәтен дә төрлө яҡлы өйрәнеү, шул осор әҙәби күренештәрҙе әҙәби оҫталыҡ, эстетик законлылыҡ планында ҡарау бурысы тора. Һуңғы осорҙа күп яҡлап үткәндәрҙе баһалау критерийҙары үҙгәрҙе, шул йәһәттән әҙәбиәттә лә. Был бурыс герой мәсьәләһенә туранан-тура ҡағылышлы.

Егерменсе быуаттың утыҙынсы йылдар осоро бөтә яҡлап — идеологияла ла, әҙәбиәттә лә яңырыу дәүере, үҙенсәлекле этап. Герой үҙгәреүендә лә бер звено. 20-се йылдарҙан айырмалы, тап 30-сы йылдар тормош ысынбарлығын күп яҡлы солғап алыуҙың тәүге нигеҙ үрнәктәрен бирҙе. XX быуат геройы эволюцияһында ла был дәүер характеры айырым урын алып тора.

Утыҙынсы йылдар әҙәбиәте проблемалары, үҫеше әҙәбиәтебеҙ ғилемендә ярайһы уҡ киң өйрәнелгән, төрлө аспектта яҡтыртылған. Әле шул осорҙа уҡ яҙыусыларҙың яңы әҙәбиәттең үҫеш йүнәлештәре хаҡында, шул иҫәптән заман геройы тураһында бәхәстәр, фекер алышыуҙар планындағы мәҡәләләре матбуғат

[18] Латипова Ф. Ҡайҙа һуң бөгөнгө герой? // Ватандаш. -2000. -№ 9. -111-112-се биттәр.



биттәрендә баҫылған.[19] Ошо осорға ғына хас ижади үҙенсәлектәрҙе, әҙәби процесс үҫешен яҡтыртҡан махсус монографиялар ҙа бар: Р.Н.Байымовтың “Шаг в зрелость” (1975) хеҙмәте 20-30-сы йылдар әҙәбиәтендә тарихилыҡ принцибын өйрәнеүгә бағышланһа, З.Нурғәлиндың “Билдәлелек яҡтыһында” (1992) исемендәге әҙәби-тәнҡит мәҡәләләрҙән, публицистик яҙмаларҙан торған китабы ошо осор сәйәсәткә, ижтимағи ваҡиғаларға бөгөнгө көн күҙлегенән баһа бирә. Был хеҙмәттәрҙә лә дәүер геройы хаҡында күҙәтеүҙәр бар. Р.Байымов тарихилыҡ принцибын герой формалашыуы менән бәйлелектә өйрәнә. З.Нурғәлин хеҙмәтендә, башлыса, заманында дөрөҫ баһа алмаған аҡ таптарға авторҙың объектив бөгөнгө ҡарашы һалынған. Башҡорт әҙәбиәте тарихы буйынса төрлө йылдарҙа сыҡҡан хеҙмәттәрҙә[20] лә утыҙынсы йылдарға арналған бүлектәр бар. Ошо дәүерҙә ижад иткән яҙыусылар хаҡында монографиялар байтаҡ.[21]

Жанрҙарға, стиль мәсьәләләренә арналған хеҙмәттәрҙең, совет осоро башҡорт драматургияһының, шиғриәтенең үҫеше хаҡында монографияларҙың айырым бүлектәре, Ғ.Рамазановтың башҡорт шиғриәтендә герой эволюцияһын байҡаған хеҙмәте

утыҙынсы йылдар әҙәби геройы хаҡында ла күп мәғлүмәттәр бирә.[22]

[19] Октябрь. -1930. -№ 1-7; -1931. -№ 1-9; -1932. -№ 1-8; -1936. - № 2- 8; -1935. - № 3-4; № 9-10; -1936. -№ 1-4; -1940. -№3-8.

[20] История башкирской советской литературы. Очерки. ч.1. 1963; ч. II, 1966; Башҡорт әҙәбиәте тарихы. -Өфө: ТТӘИ, 1967; История башкирской советской литературы. -М.: Наука, 1977; Башҡорт әҙәбиәте тарихы: 6 томда: 3-сө том. -Өфө: Китап, 1991 һ.б.

[21] Вахитов Ә. Әҙәбиәт шоңҡары. -Өфө, 1986; Хөсәйенов Ғ. Д.Юлтый. Тормошо һәм ижады. -Өфө, 1963; Халыҡ шағиры Ниғмәти. -Өфө, 1960; Сәйфи Ҡудаш ижады. -Өфө, 1959; Зарипов Н. И.Насыри. Тормошо һәм ижады. -Өфө, 1983; Минһажетдинов М. Ҡәләмендә ҡөҙрәт бар. -Өфө, 1995; Сафуанов С. А.Карнай. Тормошо һәм ижады. -Өфө, 1960; Гайнуллин М. Драматургия С.Мифтахова. -Уфа:, 1959; Рамазанов Ғ. М.Ғафури ижады. -Өфө, 1965. һ.б.;

[22] Хөсәйенов Ғ.Б. Башҡорт совет поэзияһының үҫеү юлдары. -Өфө, 1968. -402 бит; Шағирҙар. -Өфө, 1981. -240 бит; Башкирская советская поэзия. -М, 1983. -304 с. Баимов Р.Н. Башкирский историко-революционный роман. -Уфа: БГУ, 1980; Судьба жанра. -Уфа, 1984; Вахитов А. Башкирский советский роман. -М.:

Ғ.Рамазанов үҙенең хеҙмәтендә революцияның тәүге көндәренән алып, 50-се йылдарҙың икенсе яртыһына тиклемге осор шиғриәттә лирик герой эволюцияһын ҡарай. 30-сы йылдар лирик һәм эпик өлгөләрҙәге замандаштар характерҙарына айырым бүлек бағышлаған. Был осорҙа ижад ителгән шиғри үрнәктәрҙе тематик төркөмләп күҙәтеү үткәрә.

Шулай ҙа айырым очерктарҙан торған әҙәбиәт тарихтары әҙәби күренештәрҙе дөйөмләштереп өйрәнеү барышында герой мәсьәләһенә әллә ни ҙур урын бирмәй. Яҙыусыларҙың тормош юлы һәм ижады хронологик өйрәнелгән монографик хеҙмәттәрҙә лә теге йәки был әҫәр башлыса идея-тематик йәһәттән тикшерелә.

Шуны ла билдәләргә кәрәк: был хеҙмәттәрҙә башлыса “ыңғай образдар” эволюцияһы хаҡында картина күҙ алдына баҫа, башҡа тип геройҙар йыш ҡына ситтә ҡала, шул арҡала ундай образдарға һалынған концепция ла асыҡланмай ҡала; икенсенән, ул тикшеренеүҙәр махсус герой мәсьәләһен ҡарауҙы маҡсат итмәй, шуға күрә, әҙәби образды күп яҡлы өйрәнеү бурысы ла ҡуйылмай. Был хеҙмәт утыҙынсы йылдар башҡорт әҙәбиәте геройы концепцияһын яңы, бөгөнгө ҡараштарҙан һәм тәрәнерәк өйрәнеү маҡсатын ҡуйҙы. Әсбап башҡорт әҙәбиәте тарихын өйрәнгәндә, махсус курс дәрестәрендә өҫтәмә материал булараҡ ҡулланылыуы мөмкин.

## БЕРЕНСЕ БҮЛЕК

### Осорҙоң социаль-ижтимағи шарттары һәм әҙәбиәттә яңы герой проблемаһы

Наука, 1978. Вахитов А. Жанр и стиль в башкирской прозе. -Уфа, 1982; Ғәйнуллин М.Ф. Башҡорт драматургияһының үҫеү юлдары. -Өфө, 1985. Рамазанов Ғ. Башҡорт поэзияһында совет кешеһе образы. -Өфө: Башҡортостан китап издательствоһы, 1956.



Утыҙынсы йылдар XX быуат тарихында төрлө социаль ваҡиғаларға бай булыуы менән айырылып тора. Социаль-тарихи шарттарҙың, сәйәсәттең, идеологияның яңы үҙгәрештәр кисергән осоро. Ошо һынылышлы, боролошло мәлдәрҙең төп һыҙаттары, үҙәк тенденциялары, ысынбарлыҡтың күп яҡлы үҙгәрештәре нәфис ижадта ла сағылышын тапты. Төрлө йүнәлештәге әҙәби әҫәрҙәр барлыҡҡа килде: Р.Ниғмәтиҙең “Баҫыу хөкөмө”, “Йәмле Ағиҙел буйҙары”, С.Кудаштың “Хат”, “Ҡушҡайын”, Б.Ишемғолдоң “Тракторсы Айһылыу”, Д.Юлтыйҙың “Айһылыу”, “Шеф-паровоз”, А.Таһировтың “Үрнәк”, “Машиналар ҡаны”, С.Мифтаховтың “Һакмар”, “Ялан ҡыҙы”, Н.Кәриптең “Алма”, “Сәлим ҡарт”, А.Карнайҙың “Ишембай”, “Далалағы уттар”, С.Агиштың “Егеттәр”, И.Насыриҙың “Сибай” һ.б. бик күп ижад өлгөләре ауылдың, Башҡортостандың яңы үҙгәрештәренә, производство темаларына арналды. Уларҙа заман төрлө яҫылыҡта, төрлө аспектта анализланды.

Б.Бикбайҙың “Урман артында” поэмаһында яңы тормош өсөн көрәш трагик яҡтары менән бирелһә, Ғ.Сәләмдең “Ғүмер”, Д.Юлтыйҙың “Мәйсәрә” әҫәрҙәрендә героик-романтик яғы менән килеп баҫты.

Осорҙоң әхлаҡи проблемаларын күтәргән “Бала” (Ғ.Сәләм), “Дуҫлыҡ һәм мөхәббәт”(С.Мифтахов), тарихи-социаль үҙгәрештәр һәм шәхес мәсьәләләренә арналған “Шоңҡар” (Ғ.Сәләм), “Еңелгән ятыу” (И.Насыри) кеүек әҫәрҙәр ижад ителде.

Халыҡ тарихының төрлө этаптарын юллаған тәүге башҡорт романдары, повестары ижад ителде. А.Таһировтың “Һалдаттар”, “Ҡыҙылгвардеецтар”, “Ҡыҙылармеецтар”, Д.Юлтыйҙың “Ҡан”, И.Насыриҙың “Күҙәй”, М.Ғафуриҙың “Тормош баҫҡыстары”, “Шағирҙың алтын приискыһында”, А.Карнайҙың “Беҙ ҡайтырбыҙ” әҫәрҙәре революцияға тиклем һәм унан һуңғы йылдарҙа ҙур үҙгәрештәр кисергән халыҡ тормошон эпик солғанышында биреүҙең тәүге ынтылыштары булды. М.Буранғоловтың “Башҡорт туйы”, “Ҡараһаҡал”, Б.Бикбайҙың “Ҡарлуғас”, А.Хайбуллиндың “Сурағол”, Ҡ.Даяндың “Таңсулпан”, Д.Юлтыйҙың “Маҡтымһылыу” һ.б. әҫәрҙәр халыҡтың тарих төпкөлөндәге милли азатлыҡ өсөн көрәш этаптарын

бирҙе.

Әлбиттә, һәр әҫәрҙең үҙегендә осорҙоң күп төрлө тенденцияларын дөйөмләштереүсе геройҙарҙы биреүгә ынтылыш яһала.

Октябрь инҡилабы менән үҙгәргән яңы йәмғиәттең формалаша башлаған яңы әҙәбиәтенең үҙегендә торған мәсьәләләрҙең береһе - көн геройын дөрөҫ һәм тулы һынландырыу, дәүерҙең типик характерҙарын биреү. “Яңы, актив, маҡсатына ынтылышлы, донъяны бөтөнләй яңы нигеҙҙә үҙгәртеп ҡороуға һәләтле яңы кеше проблемаһын тарих үҙе ҡуйҙы”[23],- тип билдәләне Ә.Вахитов.

Кем һуң ул яңы кеше? Ул яңы кеше характерын әҙиптәр ҡайһы характерҙарҙа күрҙе һәм ниндәй һыҙаттарына өҫтөнлөк бирҙе?

Утыҙынсы йылдар ысынбарлығы ваҡиғаларға бай булған кеүек, әҙәбиәт тә күп геройлылығы, әҙәби типтарҙың төрлөлөгө менән айырылып тора. Яҙыусылар ысынбарлыҡтың мөмкин тиклем киңерәк сағылышын, масштаблылығын солғап алырға ынтылды. Тормош ни тиклем сыбар булһа, әҙәби типтар ҙа күп төрлө. “Тәбиғәт донъяһында нисә төрлө йән эйәһе бар, йәмғиәт тә кешенән, ул хәрәкәт иткән мөхиткә ярашлы, шунса затты барлыҡҡа килтерә. Кешелек йәмғиәтендә төрҙәр бар һәм һәр ваҡыт буласаҡ”[24],- ти О.Бальзак.

Осор башында ил тормошона килеп ингән яңы социаль үҙгәрештәрҙе сағылдырыу, заман һулышын йәнле образдарға һалыу тирәһендәге эҙләнеүҙәр тура һыҙыҡ буйынса ғына бармауы күренә. Дәүер пафосына ярашлы яңы төҙөлөштәр менән рухланыу әле тормоштоң дөйөмөрәк күренештәрен һүрәтләүгә генә алып килеүе күҙәтелә. Әҙәби герой булып күп кенә әҫәрҙәргә йәнһеҙ предметтар килеп инә. Был күренеш хатта тәжрибәле шағирҙар ижадын да урап үтмәне. Мәҫәлән, Д.Юлтыйҙың “Мәйсәрә” поэмаһынан өҙөк:

*Боҙҙай һалҡын суйын, тимерҙәр,*
*Ҡыҙыл утлы ҡамыр булалар.*
*Ялҡындарын бөркөп торба буйлап*

[23] Вахитов Ә. Таланттың асылы. -Өфө: Башҡ. китап нәшриәте, 1972. -44-се бит.
[24] Бальзак О. Об искусстве. -М.-Л.: Искусство, 1941. –С. 17.



*Төрлө моделдәргә тулалар.*

Поэмала Д.Юлтый завод күренештәрен һүрәтләүгә күберәк урын бирә: “…завод шаулай, уйлай шул көйгә”, “Ағиҙелдә ташҡан боҙҙар кеүек завод таша, завод – энтузиаст”кеүек юлдарҙа поэманың төп геройҙары Мәйсәрә, Сәлмән ағай характерҙарына ҡарағанда, завод хаҡындағы тасуирҙарҙың ҡалҡыуыраҡ бирелеүе, кешенең хистәрен дөйөм завод образының эшмәкәрлеге, “уй-тойғолары” алыштырыуы асыҡ күренә. Икенсе бер поэмаһында ла әҙип:

*Бөгөн поэманың геройы –*
*Шундай заттар, шундай кешеләр:*
*Металл,*
*мазут,*
*күмер,*
*азот,*
*Гигант завод, удар эшселәр,* -

тип билдәләй. Авторҙың әҙәби геройҙы һайлауҙағы ҡараштарының тормоштоң социаль әһәмиәтенә йүнәлтелеүе кеше шәхесен артҡы планға ҡалдырған.

Кешеләргә хас ҡылыҡтарҙы йәнһеҙ предметтарға күсереү ҙә әле уңышлы образ булып китә алмай. Р.Ниғмәтиҙең поэмаһындағы:

*Молотилка*
*Һағыныу, ҡайғыларын*
*Көлтә менән һелкеп һалды ла,*

кеүек юлдарҙа ла тормоштоң яланғас социаль яҡтары сағылыш таба, “бетон тәнле, металл йөрәкле”[25] трактор, комбайн образдарының эш еңеүҙәре һүрәтләнә.

Шулай итеп, әлегә заман һәм герой концепцияһы тирәһендәге эҙләнеүҙәрҙә герой — ваҡиғалар һәм ваҡыт. Сюжетты индивидуаль характерлы шәхес йөрөтмәй, ә ваҡиғалар һәм ваҡыт йөрөтә. Ваҡиғалар геройҙы формалаштырыусы ерлек түгел, ә әҫәрҙә уның үҙенең һүрәтләнеше урын ала. Йә төп герой - массалар.

[25] Ниғмәти Р. Әҫәрҙәр: 2 томда: 1-се том. -Өфө: Башҡ. к. н., 1982.- 33-сө бит.

Ғ.Рамазанов: “Башҡорт совет поэзияһының тәүге дәүерҙәге төп ыңғай геройы булып айырым шәхес түгел, ә революцион халыҡ массаһы, азат ителгән хеҙмәтсәндәр коллективы кәүҙәләндерелде”[26], - тип билдәләй. Әҫәрҙәрҙә шуға күрә индивидты йә баталь күренештәр, йә массалар ҡаплап китә. Бәшәр Хәсәндең “Перекоп” очеркы, “Сурхандарья буйында” хикәйәһе документаль факттарға нигеҙләнгән. Үҙәктә - граждандар һуғышы мәлендә халыҡты талап, бала-сағаны, ҡарттарҙы йырткыстарса үлтереп йөрөгән Ибраһимбәк бандаһын ҡыйратыу ваҡиғалары, баталь күренештәр. Индивидуаль герой характерын тотоп алыуы ҡыйын. Һалдат массалары, отрядтар тормошо, геройҙың дөйөм йөҙө тасуирлана.

Осор башындағы быңдай ижади эҙләнеүҙәрҙең ижтимағи ваҡиғаларҙың дөйөм пафосын ғына сағылдырыуға алып килеүе барлыҡ совет әҙәбиәтенә хас. Тәнҡитселәр әҙиптәрҙең дөйөм образды һүрәтләүе, уның индивидуаль йөҙөн асмауҙары “характерҙы исемһеҙ -типик һынландырыуға” (“безымянно-типовое изображение характера”)[27] алып килеүен билдәләй. Быңың сәбәптәре, әлбиттә, аңлашыла ла. Монументаль үҙгәрештәр кисергән халыҡ яҙмышын эпик, киң солғап алырға ынтылыш массалар хәрәкәтенә, уның үҙәгендә халыҡтың дөйөм образы һүрәтләнеүгә алып килә лә инде. Авзал Таһировтың “Һалдаттар”, Д.Юлтыйҙың “Ҡан” романдарында һәм башҡа шул осор күп кенә әҫәрҙәрҙә әлегә окоп тормошо, һалдаттар яҙмышы, массаларҙы һүрәтләү өҫтөнлөк итә. Массаларҙан айырылып сыҡҡан индивидтың йөҙөн асыу, булып ятҡан ваҡиғалар араһынан индивидуаль характерҙы айырып алыу - оҙайлы тәжрибә юлы.

Күп кенә әҫәрҙәргә беренсе заттан һөйләүсе образын индереү, ваҡиғаларҙы уның күңеле аша биреү хас. Д.Юлтыйҙың “Ҡан” романы, А.Таһировтың “Һалдаттар”, М.Ғафуриҙың “Шағирҙың алтын приискыһында” һәм башҡа бик күп кенә әҫәрҙәрҙә күренә был. Ошо “һөйләүсе” образында шул осор геройҙы һайлап алыуҙағы тәжрибәләр хаҡында фекер йөрөтөргә була. «Мин»

[26]Рамазанов Ғ. Башҡорт поэзияһында совет кешеһе образы. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1956. - 25-се бит.
[27] История русской советской литературы: 1-й том. -М.-Л.:Издательство АН СССР, 1958. - С.97.



исеменән һөйләүсе геройҙың аңы, ҡарашының үҙгәреүе асыҡтан-асыҡ, ваҡиғаларға ҡарашы, мөнәсәбәттәре уның рухи үҫеш юлын, характер формалашыуын сағылдыра. Был образда әле геройҙың автор субьектынан айырылып бөтмәүе лә күренә. Герой менән автор бер бөтөн булып хәрәкәт итә. Был, яҙыусыларҙың сюжетты хәрәкәт иттереүсе төрлө яҡлы типиклаштырылған геройҙы ойоштороу тәжрибәләренең етмәүенән дә киләлер. Һөйләүсе образы ул әле ваҡиғалар шаһиты ғына, шуға күрә лә төп герой – хәл-күренештәр, ваҡиғалар.

Ғ.Сәләм утыҙынсы йылдар башында “Йыр, йыр кәрәк герой тураһында” тигән саҡырыу ташлай. Шағир: “Кеше хаҡындағы йырҙар цех тышында бик оҙаҡ прогуллап йөрөнө, беҙҙең һәр беребеҙ һәр геройҙы тейеш белергә, беҙгә доктор булып улар еңеүенең сирен табырға кәрәк”,- тип, һәр индивидуаль шәхестең күңел торошон белергә, өйрәнергә, әҫәрҙәрҙә яҡтыртырға саҡырҙы.

*Беҙҙең йырҙар һаман, һаман әле*
*Бүлмәләрҙә генә быҫҡыны.*
*Йырламаныҡ унда металсының*
*Йөрәк тибешен,*
*Көслө мускулын*[28], -.

ти шағир.

Әҙиптәр тормошто өйрәнергә, “…теге йәки был ваҡиғаны ғына түгел, ә бөтәһенән элек кешене, уның уй-кисерештәрен һәм ынтылыштарын иғтибар үҙәгендә тоторға, индивидуаль характерҙар күренешен кәүҙәләндереү аша айырым синыфтарҙың һәм тотош халыҡтың яҙмышын сағылдырырға тейеш инеләр”.[29]

Яңы осорҙоң яңы кешеһе образына нигеҙ, әлбиттә, егерменсе йылдарҙа уҡ һалынған ине. Ҡулына ҡорал тотоп инҡилапты тормошҡа ашырған большевик-революционер образын, хеҙмәт кешеһен һынландыра был осор әҙәбиәте. М.Ғафури “...дошмандарҙың бейек ҡәлғәләрен тар-мар итеп ватҡан, һөйәлләнеп

[28] Сәләм Ғ. Һайланма әҫәрҙәр. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1962. -192-193-сө биттәр.
[29] Зарипов Н.Т. И.Насыри. Тормошо һәм ижады. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1983. -134-се бит.

ҡатҡан ҡуллы"[30] хеҙмәт кешеһен йырлаһа, А.Таһиров "Алатау" пьесаһында быуат башы революцион ваҡиғалар мәлендә интеллигенция яҙмышын бирһә, Ғ.Хәйри "Кооператорҙар", И.Насыри "Һөжүм", Ғ.Дәүләтшин "Зильский", А.Таһиров "Ташҡын дарья тармаҡтарында", "Беренсе көндәр" повестарында ауылда барған яңы үҙгәрештәрҙе, яңы тормош төҙөү өсөн көрәште һүрәтләне һ.б.

Утыҙынсы йылдарҙың яңы ваҡиғалары, яңы үҙгәрештәре ошо нигеҙ геройға, әлбиттә, яңы һыҙаттар өҫтәй. Яҙыусылар ана шул тирә-яҡ мөхит тәьҫирендә үҙгәргән геройҙы үҙәккә ҡуйыу, уны рельефлыраҡ күрһәтеү мәсьәләһен ҡуҙғата. И.Насыри үҙенең бер мәҡәләһендә: "Элекке ауылдар урынына эре машиналы колхоздар төҙөлә. Эре совет хужалыҡтары ҡалҡып сығалар. МТС-тар ойошторола. Яландарҙы машина ҡаплай. Бына шуларҙың барыһында ла кешеләр эшләйҙәр. Кешеләр тәбиғәтте көрәшеп еңәләр. Уны үҙгәртәләр. Шуның менән бергә үҙҙәрен дә үҫтерәләр. Улар һиҙелеп үҙгәрәләр. Ләкин был үҙгәрештәрҙең береһе лә тигеҙ генә бармай. Ҙур синфи ҡаршылыҡтарға осрай. Бына былар беҙҙең әҙәбиәтебеҙ өсөн бөтмәҫ-төкәнмәҫ база булып тора. Художество ҡалыбына һала белергә генә кәрәк. Уны ябай белеү генә етмәй. Бөтә ҡаршылыҡтары менән белергә кәрәк"[31],- тип төп иғтибарҙы кеше факторына йүнәлтә.

Әҙиптәрҙең осорҙо тәрәнерәк өйрәнә барыуы геройҙарҙың төрлө типтарын бирҙе. Бөгөнгө көн ваҡиғалары уртаһында булған замандаштың характеры актив көрәш эсендә асыла. Дәүеренә хас булғанса, тәүге йылдарҙа заман геройы характерын сәйәсәтләштереү, идеологиялаштырыу хас. Сөнки осор идеологияһы яҙыусыларҙан әҫәрҙә идеяның ярылып ятыуын талап итә. Х.Наум "Тәнҡит һәм әҙәбиәт мәсьәләләре" тигән мәҡәләһендә: "Беҙҙең заман үткен сәйәсәт заманы, беҙҙең заман киҫкен синфи көрәш, социализм төҙөү заманы, беҙҙең заман иҫкене емереү һәм яңыны тыуҙырыу заманы, беҙҙең заман донъяны тамырынан үҙгәртеү, тәбиғәткә һөжүм итеү һәм кешеләрҙе социализм нигеҙендә тәрбиәләү заманы. Ана шуның өсөн дә әҙәби әҫәрҙең иң элек идеологияһын асып һалырға кәрәк"[32],- тип сығыш яһай. Тимәк, яҙыусы геройының һәр бер ҡылығын, һәр күренеште, һәр ваҡиғаны ижтимағи идеялар күҙлегенән сағылдырырға тейеш була. Тәнҡитсе эстетик ҡанундарҙы артҡы планға ҡалдырып, тормош күренештәрен туранан-тура әҙәби әҫәргә күсереү фекерен үткәрә. "...художество әҫәре үҙенең эстәлеге аша хәрәкәт итә түгел, бәлки реаль тормош тәһиәтенең эсендәге хәрәкәт, әҙәби әҫәрҙең мөндәрижәһендә сағыла ғына. Әҫәрҙең мөндәрижәһе үҙ алдына хәрәкәт итә алмай, бәлки уны тормош диалектикаһы хәрәкәт иттерә"[33].,- ти тәнҡитсе. Тормош диалектикаһын әҫәргә күсереү социаль-ижтимағи идеялар өсөн көрәшкән социаль характерҙарҙың дәүерҙең төп ыңғай геройҙары булыуына алып килде. Ғәлләм, Шакир (Һ.Дәүләтшина "Башаҡтар тулҡыны"), Ибрай, Ғилман (А.Таһиров "Машиналар ҡаны", "Себерәк Ғилман"), Юлай (С.Мифтахов "Һаҡмар"), А.Бикташев (С.Ҡудаш "Ҡушҡайын") һәм башҡа бик күп коммунист-ойоштороусылар типтарында авторҙар ижтимағи геройҙарҙы актив хәрәкәткә килтергән сәбәптәрҙе юллай: Ғилман (А.Таһиров "Себерәк Ғилман") 1905 йылғы революцияла ҡатнашҡаны өсөн һөргөнгә ебәрелгән, Октябрь революцияһы һөҙөмтәһендә иреккә сыҡҡан ҡарт большевик егерменсе йылдарҙың икенсе яртыһында уҡ ауыл хужалығын коммуналарға ойоштороуҙа тәжрибә туплаған һәм колхоз ойоштороуҙа ла алдынғы коммунистарҙың береһе. Ибрай (А.Таһиров "Машиналар ҡаны") – империалистик һуғыш уттарын кискән фронтовик, революционер, ҡыҙылгвардеец, коллективлаштырыуҙа, артабан ауылды социалистик рельстарға күсереүҙә, ауыл халҡының тормошон яҡшыртыуҙа иң һыҙғанып эшләгән кеше. Ғәлләм (Һ.Дәүләтшина "Башаҡтар тулҡыны") – граждандар һуғышы йылдарында аҡтарға ҡаршы һуғышып йөрөгән ҡыҙылгвардеец. «Ул ваҡытта мылтыҡ менән һуғышһам, хәҙер телем менән, эшем менән һуғышып торам»,- ти ул. Уларҙы "яңы тарихи шарттарҙа синфи көрәштең характерын һәм методтарын тәрән аңлау, һәр бер мәсьәләне төптән уйлап хәл ҡылыу, кәрәк саҡта үҙ фекерен ҡыйыу, ышандырырлыҡ итеп әйтә белеү халыҡҡа яҡын итә"[34].

[30] Дүрт моң. Башҡортостан халыҡ шағирҙары. -Өфө:Башҡортостан китап нәшриәте, 1976. -92-се бит.
[31] Насыри И. Әҫәрҙәр: 3-сө, өҫтәлмә том. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1968. -297-се бит.
[32]Наум Х. Тәнҡит һәм әҙәбиәт мәсьәләләре // Октябрь. -1931. -№1. -3-сө бит.



[33] Шунда уҡ. -22-се бит.
[34] Минһажетдинов М. Ҡәләмендә ҡөҙрәт бар. -Өфө: Китап, 1995. -29-сы бит.

Шулай итеп, заман геройы – көрәштә сыныҡҡан, тәжрибәле кисәге һалдат. Ғәлләм, Шакир (Һ.Дәүләтшина “Башаҡтар тулҡыны”), Ибрай (А.Таһиров “Машиналар ҡаны”), Ғилман (А.Таһиров “Себерәк Ғилман”) күп һанлы коммунист, ойоштороусы-инициаторҙарҙың милли башҡорт ерлегендә сағылдырылған вәкилдәре.

Юлай (С.Мифтахов “Һаҡмар”), Авзал Бикташев (С.Ҡудаш “Ҡушҡайын”) кеүектәрҙе яңы йәмғиәт коммунист-инициатор итеп формалаштырған. Уларҙың сәйәси, синфи аң формалашыу мәктәбе - Ҡыҙыл Армияла хеҙмәт итеү йылдары. Улар ҙа Ғилман, Ғәлләм кеүек ижтимағи геройҙар. Коммунист-инициатор итеп бирелгән дөйөм һыҙаттары менән бергә һәр геройҙың индивидуаль үҙенсәлектәре был типтарҙың теге йәки был яғын характерлай: А.Таһировтың “Үрнәк” драмаһында колхоз председателе, яңылыҡты башлап йөрөүсе коммун Сәләх Исхаҡовта ижтимағи геройҙың декларативыраҡ, дөйөмөрәк һыҙаттары асыла, индивидуаль образы әллә ни күҙ алдына баҫмай. Уларҙан айырмалы, Юлай – индивидуаль һыҙаттары менән иҫтә ҡалырлыҡ герой.

“Һаҡмар” драмаһында уҡыусы әле Юлайҙың армияла хеҙмәт иткәндә үк башҡа урындарҙа ябай халыҡ коллектив хужалыҡтарға ойоша башлауы, уның ауылдаштарына ла шул хаҡта уйлана башлар кәрәк тигән фекерҙәр менән ауылға хаттар яҙып ебәреүендә үк инициативлыҡ күрһәтеүе күренә һәм ул ҡайтҡас та шул эштәрҙе ойоштороп ебәрә. “Һаҡмар” колхозын төҙөү өсөн көрәш ваҡиғалары кулактарҙың синфи ҡаршылығына осрай.

Быйндай геройҙарҙың инициатор булып хәрәкәт итеүҙәрендә икенсе сәбәп – уларҙың сығышы ярлы, ябай халыҡ араһынан булыуы. Мәҫәлән, Юлайҙың көрәшсе сифаттары, ҡыйыулығы атаһы Мөхәмәтшанан күскән.

Өсөнсө сәбәптәрҙең береһе – ябай халыҡ үҙе лә яңылыҡтарҙың башында йөрөр етәксе көтә, шундай етәкселәрҙе үҙе күтәрә. Улар колхоздар ойоштороуҙың башланғысында ла йөрөй, артабан да халыҡтың тормошон яҡшыртыу өсөн алға табан хәрәкәтте етәкләй. Мәҫәлән: Сәйфи Ҡудаштың “Ҡушҡайын” романында “Ҡушҡайын” колхозы күптән инде ойошһа ла, бер ҙә мандый алмай, өҙөклөктән сыға алмай. Шул мәлдә Авзал, армия сафтарынан ҡайтҡан йәш коммунист, колхозды яйға һалып ебәреүҙе етәкләүсе һәм ҡаршылыҡтар менән көрәш юлында ойоштороусы булып килеп



баҫа. Алда әйтеп үтелгән геройҙарҙың синфи, сәйәси аңы, тәжрибәһе “ҡайҙалыр ситтә” формалашыуы, йәғни революцион үҙгәрештәрҙең барып сығасағына ныҡлы ышанғанлыҡ һыҙаттарының Октябрь инҡилабы осоронан уҡ килеүе бирелә. Шуға күрә улар әҫәрҙәргә “әҙер” геройҙар булып килеп инәләр. Характерҙары алдан уҡ формалашҡан, уларҙың үҫеү һәм формалашыу йылдарына экскурс ҡына яһала.

Тормошҡа коммунистик идея күҙлегенән ҡараш әҙәбиәттең төп геройҙары итеп, шулай уҡ характерҙары социаль-ижтимағи булған комсомолецтарҙы дәүер геройы итеп һүрәтләүгә килтерҙе. Яңы замандың яңы кешеһе концепцияһын яҙыусылар йәш быуында – комсомолецтарҙа, артабан совет йәштәре булып формалашасаҡ яңы быуында бирә. Сөнки тап ошо йәштәр социалистик йәмғиәт төҙөүҙә төп көстәр булырға тейешле. Утыҙынсы йылдарҙа “... әҙиптәрҙе тотош бер быуын, беренсе сиратта йәш быуын яҙмышы ҡыҙыҡһындырҙы, сөнки бишектән үк революцияға килеп кергән һәм яңы быуын тигән төшөнсәне тулыһы менән күҙ алдына баҫтырған”[35] геройҙар Н.Островскийҙың “Корос нисек сыныҡты” романында шул быуындарҙың береһе Павел Корчагинда сағылыш тапһа, беҙҙең милли әҙәбиәтебеҙҙә һәр бер әҫәрҙә тиерлек коммунистар менән бер рәттән комсомолецтар тормоштоң актив төҙөүселәре итеп һүрәтләнә. Был тарихи яҡтан яҙыусылар тарафынан замандың дөрөҫ тотоп алынған көн геройҙары. Сөнки тап йәш быуын – бөтә яңылыҡты тиҙ аңлап алырға һәм шул яңылыҡ ыңғайына тиҙ үҙгәрергә, үҙе өлгөһөндә башҡаларҙы эйәртергә, киләсәктә яңы ҡоролоштоң хужалары буласағын аңлап эш итергә һәләтле көс. Н.Ҡәриптең “Алма” пьесаһында Алма, Әхтәм, А.Таһировтың “Үрнәк” пьесаһында Ҡәюм, Осҡон, Әптерәй, Алма, С.Мифтаховтың “Һаҡмар” драмаһында Айһылыу, С.Агиштың “Егеттәр” повесында Тимербай, Бикмәт, Көнбикә - башҡорт ауылдарын коллектив хужалыҡтарға ойоштороу һәм артабан халыҡтың социаль хәлен яҡшыртыу өсөн актив көрәшеүселәр.

Заман геройының бөгөнгөһө концепцияһы алда әйтеп

[35]Проблема характера в современной советской литературе /Под ред. Н.И.Пруцкого. -М.-Л.: Изд-во АН., 1962. -С.30-31.

үтелгән характерҙарҙа ла төрлө яҡлы сағылышы менән айырылып тора. А.Таһировтың “Үрнәк” пьесаһынан Ҡәюм, Осҡон, Әптерәй – шул осор кешеләренә хас совет власы һәм партия идеяларына тулыһынса үҙҙәрен бағышлаған комсомолецтар, колхоз председателе коммунар Сәләх Исхаковтың уң ҡулдары, “Үрнәк” коммунаһын киңәйтеп, колхоз итеп үҫтереү өсөн халыҡтың активлығын ойоштороп йөрөүселәр. Уларҙың характеры юғары ашлыҡ алыу өсөн ярыштарҙа, игенде тарттырыу өсөн яңы тирмән төҙөүҙә һәм уның эшен яйға һалып ебәреүҙә ҡаршылыҡ күрһәткән кулактар менән көрәштә бирелә. Улар дөйөм хәрәкәттә актив эшмәкәрлектәре бирелгән, әммә характеры индивидуаллеге менән һыҙатланып етмәгән социаль-ижтимағи геройҙар. Ҡәюм, Осҡон, Әптерәй кеүек яңы йәмғиәттең яңы быуынының эшләгән эштәрендә һәм телмәрҙәрендә тормоштоң риторик яҡтары сағылыш алған. Мәҫәлән:

***Ҡәюм***. *Беҙҙең колхоз ударный.*

***Барыһы ла***. *Иҫкелеккә ударник.*

***Сәлихә***. *Уңға бер.*

***Алма.*** *Һулға бер.*

***Барыһы ла***. *Ярыш менән алға бар*

юлдарында геройҙарҙың телмәрендә, сәхнәгә марш менән атлап килеп инеүҙәрендә замандың революцион рухы бирелеү менән бергә, яланғас социологияның сағылышын да күрергә мөмкин ине.

Был осорҙа әҫәрҙәрҙең конфликтын синфи-социаль ҡаршылыҡҡа ҡороу геройҙың да синфи-социаль характерлы булыуына килтерә. Нигеҙҙә геройҙар ике ҡаршы яҡ социаль төркөмдәргә бүленде.Әҙиптәрҙең герой характерының синфи-социаль һыҙаттарына өҫтөнлөк биреүсе художество-эстетик концепцияһы – заман тыуҙырған күренеш. Октябрь инҡилабы менән килеп ингән тормоштағы икегә бүленеү – дуализмды әҫәр конфликты нигеҙенә һалыу утыҙынсы йылдарҙа ла өҫтөнлөк ала. Геройҙың яңылыҡты төҙөүе иҫкелекте инҡар итеүе менән бергә барыуы сағылдырыла.

Әҫәрҙә геройҙың социаль-ижтимағи мөнәсәбәттәр менән бәрелеше аҡ буяуҙарҙа һүрәтләнеп, уның гел еңеп сығыуы йәки ҡаршылыҡтар шымартылып бирелеүе уның статиклығына, шаблонлығына алып килә. Уҡыусыға ул әллә ни тәьҫир яһамай. Характерҙарҙың үҙенең алдына ҡуйған маҡсаттары өсөн көрәшен



ҡатмарлы, ҡаршылыҡлы, хатта фажиғәле яҡтары менән биреү әҙәбиәтте уҡыусыға яҡынайта ғына. Әле фольклорҙа уҡ халыҡ үҙенең геройы ни тиклем көслө, ҡыйыу, батыр, ҡаһарман булмаһын, көрәш юлында дөйөм мәнфәғәттәр өсөн ҡорбандарҙың да мөмкин булыуына ишара яһай: Мәҫәлән, “Урал батыр” эпосында Урал батыр Йәншишмәне үҙе эсмәй, тирә-яҡҡа бөркә, дөйөм мәнфәғәттәр өсөн үҙен ҡорбан итә. Халыҡтың эстетик ҡараштарында тормош ҡанундары нәфис һынланышын тапҡан.

Утыҙынсы йылдарҙа ла яҙыусылар яңылыҡ өсөн көрәш геройҙарын төрлө яҡлы биреү юлдарын эҙләне.

1933 йылда Луначарский яҙыусылар алдында сығыш яһап, ысынбарлыҡты драматик яҡтары менән һүрәтләүҙең әҙәбиәттең мотлаҡ элементы булыуына баҫым яһай. “Социалистик трагедия булыуы мөмкинме? Мөмкин генә түгел, булырға тейеш. Маркс: “Үткән быуаттың бөйөк трагиктары үлемгә йөҙ тотоусы синыфтың ғазаптарын һүрәтләнеләр,- ти, ә яңы дәүер трагиктары яңы донъя тыуыуының ғазаптарын бирәсәк. Беҙҙең заманда ла трагиклыҡ элементтары юйылмаған, сөнки ҡорбандар булыуы мөмкин генә түгел, ә мотлаҡ кәрәк”[36],- ти тәнҡитсе.

Совет идеяларына һәм эшенә фанаттарса бирелгән, ижтимағи маҡсаттар өсөн ғүмерен ҡорбан итеүгә лә әҙер трагик геройҙар яҙмышында яңылыҡ өсөн көрәштең ҡорбандарһыҙ ҙа булмауы күҙ алдына баҫтырыла. Б.Бикбайҙың “Урман артында”, Д.Юлтыйҙың “Мәйсәрә” поэмаларынан Йомағол һәм Мәйсәрә, А.Карнайҙың “Беҙ ҡайтырбыҙ”, И.Насыриҙың “Еңелгән ятыу” повестарынан Ғинди Сәғиҙуллин, Камалов, һәм Фәтхи кеүек образдарҙа тормоштоң драматик яҡтары сағылыш таба. Рус әҙәбиәтендә А.Фадеевтың “Ҡыйралыш” романындағы Левинсон образы типтары улар. Фадеев быға тиклем бер яҡлыраҡ һыҙатланған коммунистарға оҡшамаған драматик яҙмышлы геройҙы – отряд командирын бирә. Левинсон засадаға эләккән отрядын ҡамауҙан сығарыу кеүек кульминацион моментта оҫта тактикалы, тәжрибәле командир булараҡ та, ҡамауҙан алып сыҡҡанда отрядын мөмкин

[36] Луначарский А.В. Статьи о литературе. –М.: Художественная литература, 1988. -С. 394.

тиклем әҙерәк юғалтыу өсөн күңел уйланыуҙарында, кешелеклек һыҙаттарында ла, драматик һәләк булыуында ла – күп яҡлы асылышында шул осорҙоң ни тиклем киҫкен, ҡатмарлы булыуын дөйөмләштергән.

Йомағолдоң бер генә көнө һүрәтләнә. Ул колхоз мөлкәтен һаҡлау өсөн төнгө ҡарауылға китеп бара. Герой кулактар ҡулынан үлтерелә. Уның үлеме – яңы тормоштоң дауам ителеүе өсөн ҡорбан. Шуға күрә лә күп кенә әҫәрҙәрҙә яҙыусылар бындай типтарҙа трагизмдың оптимистик һыҙатлыһын бирҙе.

Был йылдарҙа әҙиптәр геройҙарҙың күңел донъяһын, тормоштоң эмоциональ йәки романтик яҡтарын сағылдырыуҙы ла урап үтмәне

"Романтизм – йәмғиәттең бигерәк тә күсеү дәүерҙәрендә киң тарала торған әҙәби күренеш",- ти Р.Бикбаев. Революцияға тиклем, мәҫәлән, Ш.Бабич шиғырҙарында тормоштоң эмоциональ-романтик яғы геройының күңел әҙләнеүҙәре, бәргеләнеүҙәре булып характерланды. 1905 йылғы революция еңелгәс, халыҡтың артабан яҡшыраҡ йәшәү хаҡындағы иллюзияларының емерелеүен, ул осор замандаштың күңел бәргеләнеүҙәрен Ш.Бабич шиғырҙарында әйтеп бирҙе. Уның "Бер минут", "Тарҡау уйҙар", "Аптыраған минуттарҙа", "Әйҙә, күңелем" шиғырҙарында ер тормошонан күккә талпыныуының сәбәптәре юҡҡа түгел: "Әйҙә, күңелем, бында торма, күккә, күккә, күккә ос, бында һуғыш, бында ҡылыс"[37],- ти шағир. Шиғырҙарҙың исемдәрендә үк лирик геройҙың күңел ғазаптары, уйҙар төрлөлөгө сағылған.

Егерменсе йылдарҙа М.Ғафуриҙың "Ярлылар, йәки өйҙәш ҡатын", "Ҡара йөҙҙәр" әҫәрҙәрендә геройҙарҙың тәрән рухи кисерештәре һүрәтләнеше характерға ижтимағи ваҡиғалар йоғонтоһон, патриархаль тәртиптәрҙең кешене иҙеүсе тәртиптәр булыуын асып биреү ҡоралы булды.

Утыҙынсы йылдар геройының характерындағы романтик һыҙат социаль-тарихи атмосфера менән бәйле һыҙатланыш алды.

Революциянан һуңғы әҙәбиәт төп ыңғай геройҙар

[37] Бабич Ш. Шиғырҙар, поэмалар. - Өфө: Башҡ. китап нәшриәте, 1983. - 16-сы бит.



характерында М.Горькийҙың "Дауыл ҡошо тураһында йыр", "Ыласын тураһында йыр" әҫәрҙәрендәге геройҙар традицияларын дауам итеп, романтиканың революцион характерҙағыһын үҙ итте. Геройҙарының эш-ҡылыҡтарында осорҙоң революцион-оптимистик пафосын һүрәтләне.Ғ.Сәләмдең "Ғүмер" поэмаһының лирик геройы, Д.Юлтыйҙың "Мәйсәрә" поэмаһының төп героиняһы Мәйсәрә романтик характерлы.

Ғ.Сәләм геройының ("Ғүмер") тиҙҙән поезд үтәсәк тимер юлының шартлатылыуын күреп, ғүмерен ҡорбан итеүендә юғары граждандыҡ һыҙаттары, ябай эштәрендә бөйөклөк, батырлығының, фронтта һәм хәл иткес ситуацияларҙағы ҡаһарманлыктарға тиңлеге аша замандың героик-романтик һыҙаттары сағыла. Бындай тип геройҙарға кешенең кешелек сифаттарының көтөлмәгән хәл-ситуацияла билдәләнеүе кеүек фәлсәфәүи концепция һалынған. Ю.Фучик: "Герой – хәл иткес моментта кешелек йәмғиәте мәнфәғәттәрендә эшләргә кәрәк булған эште башҡарған кеше ул",- ти. Шул фекерҙе Ғ.Сәләм үҙ замандашының тормошондағы бер генә эпизод аша бирә. Оригиналь, тапҡыр буяуҙар менән эш итеп, характерҙың героик сифаттарын аса. Бер ҡараһаң, авторҙың "кем булғандыр егет, шахтананмы, колхозданмылыр, ул ҡайҙандыр" тип егеттең кем һәм ҡайҙан икәнен дә "белмәүендә" ниндәйҙер тик дөйөмлөк аша ғына бирелгән тоноҡ характер тураһында һүҙ бара кеүек. Ә шул дөйөмлөктә – тәрән индивидуаллек. Ғәҙәти замандаштың юғары әхлаҡлы шәхес булыу индивидуаллеге. Героиканың ҡоралды көрәштәрҙә генә түгел, хәл иткес ситуацияла ла һыҙатланышы. Төп иғтибарҙы романтиканың революцион яғына йүнәлтеү геройҙың эшләгән эштәрен үҙ мөмкинселектәренән ҡабартыңҡырап, арттырып һүрәтләүгә килтерә. Мәйсәрә (Д.Юлтый "Мәйсәрә"), Ғинди Сәғиҙуллин (А.Карнай "Беҙ ҡайтырбыҙ") кеүек типтар ниндәйҙер кимәлдә баш етмәҫлек эштәр эшләгән эпос ҡаһармандарын хәтерләтеп ҡуя.

Биографияһы ябай ғына "етемлек", "көрәш", "рабфак", "завод", "ячейка" кеүек штрихтарҙан торған Мәйсәрәнең заводтың һыу аҫтында ҡаласағына хәүефләнеп, яҙғы ташҡын һыуҙы кәмәлә йөҙөп сығырға ниәтләнеп, шул стихияла һәләк булыуында яңы геройҙың юғары рухлы, камил шәхес булыуы сағылыш тапҡан. Д.Юлтый үҙенең төп героиняһы хаҡында: "Уның тураһында

тасуирҙарым әкиәт геройындай булмаһын" тиеүендә ике параллель мәғәнә ана шул шәхесте раҫлай. Беренсеһе – әкиәт геройҙары ла халыҡтың яҡты хыялдары, идеялары нигеҙендә тыуған геройҙар, икенсеһе – Мәйсәрә кеүектәр әкиәттәге кеүек хыялда түгел, ә ысынбарлыҡта, күптәр араһында бар, йәшәй. Ул үҙенең ябай эше менән үҙен бөйөклөк, камиллыҡҡа күтәрә алырға һәләтле.

Утыҙынсы йылдар яңы кеше характеры ижади хеҙмәткә мөнәсәбәт яҫылығында ла асылды. Социаль-синфи көрәш героикаһы ижади хеҙмәттә тыуған героика менән алышынды. Яңы йәмғиәттә яңы геройҙарҙа хеҙмәткә яңы мөнәсәбәт йәки хеҙмәткә кешене эксплуатациялаусы көс итеп түгел, ә үҫтереүсе көс итеп ҡарау формалаша. Геройҙар хеҙмәт процесында коллектив менән, бер-береһенә ярҙам итеп йәшәргә өйрәнәләр, уларҙа үҙ эштәренә ҡарата яуаплылыҡ тойғоһо, ижади ҡарау һыҙаттары барлыҡҡа килә. А.Карнайҙың "Ишембай", "Далалағы уттар", С.Мифтаховтың "Ялан ҡыҙы" әҫәрҙәренең геройҙары хеҙмәт процесында асыла. А.Карнайҙың "Ишембай" очеркында Әхмәтгәрәй Йәнбулатов, Бәҙретдинов, Варвара Носаль образдарында яңы йәмғиәттә хеҙмәт йәшәү йәме, яңы тормош үҫеше булып һүрәтләнә, шәхестең эше - халыҡҡа хеҙмәт итеү, ә элекке йәмғиәттәгесә ҡул көсөн һатыу түгел. Әхмәтгәрәйгә, мәҫәлән, революцияға тиклем дә Ишембай ауылы эргәһендә ер байлыҡтарын эҙләүселәр менән бергә эшләп, уларҙың үҙҙәренең кеҫәләрен байытып ҡайтып китеүенә шаһит булырға тура килгән. Ә хәҙер яңы йәмғиәттә нефтселәрҙең эше – халыҡ тормошон яҡшыртыу өсөн фиҙаҡәрлеге.

Яйыҡ йылғаһы буйындағы "Урал" совхозына яңы ғына эшкә килгән тракторист Хәсән Нәғимовтың, балта оҫталары бригадаһы бригадиры Ғәлиә Усмановаларҙың ("Далалағы уттар") алдында план үтәү генә түгел, халыҡтың культуралы ялын ойоштороу, шул планды үтәү өсөн кешеләрҙең хеҙмәткә ыңғай ҡарашын, һөйөүен тәрбиәләү бурысы ла тора. Әҫәр башында юҡҡа ғына автор совхоз эшселәренең тормошон деталле һүрәтләүҙән башламай: казармаларҙа йәшәгән эшселәрҙең ғаиләләре лә, буйҙаҡтары ла бергә йәшәй. Казармала бысраҡ, тәртипһеҙлек, эскелек, эшселәр мунсала йыуыныу өсөн ун биш-егерме саҡрымдағы ауылға йөрөргә мәжбүр. Балта оҫталары бригадаһы ойоштороп Ғәлиә Усманова, Ғәлимйән ҡарт эшселәргә мунса



төҙөтөп ҡуя, улар алдында клуб һалыу мәсьәләһе лә тора. Совхозда Апуш кеүек эшенә һалҡын ҡарау һөҙөмтәһендә үҙ тракторын һәләк иткән тракторсылар ҙа, Ғәйнанов һәм Потапов кеүек совхоз эшенә аяҡ салырға тырышҡандарҙың йоғонтоһонда булған Сафин, Тугушевтар ҙа, Никифоров һымаҡ үҙ эшен яҡшы белгән, дөйөм эш өсөн көсөн ҡыҙғанмаған, әммә буш ваҡытын эсеп үткәреүгә күнегеп, тирә-яғында барған күренештәргә битараф эшселәр ҙә бар.

Эшселәр ҡатмарлы ошондай шарттарҙы еңеп сығалар, уларҙа үҙ эшенә яуаплы ҡараш, производстволағы ла, көнкүрештәге лә тормошоңа битараф булмау кеүек сифаттар формалаша. Геройҙарҙа коллектив хеҙмәткә ылығыу, күмәк хужалыҡты үҙ йортоң итеп тойоу тойғолары тәрбиәләнә. Быға тиклем эскесе ҡушаматы менән йөрөгән Иван Никифоров Тугушевтар электр станцияһына ут төрткәс, дөйөм милеккә килгән афәтте үҙенә килгән бәлә тип аңлай. Уның тормошҡа ҡарашы һәм характеры ла үҙгәрә.

А.Таһиров "Машиналар ҡаны" повесында Кинйәғол Уралбаев образында индустриализация һәм нефть ваҡиғалары менән килеп ингән цивилизация, машиналар дәүере эшсеһенең формалашыуында ла ижади хеҙмәт кешеһе тыуыуын бирә. Нефтсе Никифор Кандалов менән осрашҡанға тиклем ул һалсы, һал ағыҙыусы булып эшләгән. Эшендә алдынғы, ударник. Һал ағыҙыу эше унан артыҡ белем талап итмәһә, башта ҡыҙыҡ тойолған нефть быраулау эштәрендә Кинйәғол белеме етеңкерәмәүен төшөнә. Ул ҡул һелтәп ҡуймай, Кандаловтың нефть техникаһын өйрәткән түңәрәгенә йөрөй, китапхананан китап алып, нефть серҙәренә төшөнөү өсөн көндәр буйы уҡыуға бирелеп китә. Ударник-нефтсе дәрәжәһенә барып етә. Кинйәғол Уралбаев образында милли нефтсе-эшсе кадрҙарының формалашыуы мәсьәләһе менән бергә, уға оҡшаш башҡа көн геройҙарында "күңеле саф, юғары әхлаҡлы, шатлыҡты аҡса һәм байлыҡ йыйыуҙа түгел, ә мөғжизәле көс йәшеренгән ижади хеҙмәттә, эшен оҫта башҡарыуҙа тапҡан хеҙмәт кешеһе"[38] тыуыуы күренә.

С.Мифтаховтың "Ялан ҡыҙы" драмаһында Ярулла, Гөлшат

---

[38] История русской советской литературы: 1-й том. Введение. –М.:Издательство АН СССР, 1958. –С.101.

образдарында азат хеҙмәт мәсьәләләре ҡуйыла. Ярулла көтөүсе хеҙмәтендә революцияға тиклем дә йөрөгән. Әммә ул байҙарға мал көтөүҙә йөрөп, ғаиләһен аҫырау өсөн яллаһа, хәҙер яланда малдар ҡарау - уның күңел ләззәте. Сөнки совет йәмғиәтендә хеҙмәте тейешле баһа алыуына ышана. Уларҙа хеҙмәт кешеһенең үҙ эшенә ҙур яуаплылыҡ менән ҡарау, юғары граждандлыҡ, эште намыҫ менән башҡарыу кеүек һыҙаттары инде күптән формалашҡан. Ярулла менән Гөлшат совхоз малдарын көтөүҙе ғәҙәти эш тип кенә ҡарамай, ә бөтә күңелдәрен һалып эшләйҙәр. Гөлшаттың, мәҫәлән, көслө яҙғы буранда малдарын ҡола яланда ҡалдырып китмәй, улар менән бергә тороп ҡалыуында яңы йәмғиәт кешеһенең үҙ-үҙенә талапсанлығы, дөйөм мәнфәғәттәрҙе шәхси яҙмышынан өҫтөн ҡуйыуы, эшкә яуаплы ҡарауы кеүек һыҙаттары асыла.

С.Агиш "Эш самауырҙа түгел" хикәйәһендә Хөршиҙә образында ҡара эш күңел талабына әүерелгән ижтимағи герой характерын психологик планда аса. Ғүмере буйы коллектив тормош, ҡара ер эшенә күнеккән ауыл әбейенең ҡалала, улының йортонда эшһеҙ ултырыуҙан күңел тынғыһыҙлығы кисереүен автор еңел юмор аша һүрәтләп, замандаштың бөгөнгө әхлаҡи камил характерын бирә. Героиня әллә ни киҫкен ҡатмарлы ситуацияларға ҡуйылмай, киреһенсә, уның ғәҙәти көнкүреше генә һүрәтләнә. Шул ҡәҙимғе көндәлек тормошо аша ғына С.Агиш Хөршиҙәлә тыуған йортто яратыу һәм эштән ләззәт табыу кеүек һыҙаттарҙың ни тиклем көслө булыуын сағылдыра.

Билдәле бер ижтимағи осорҙа әҙәбиәттең теге йәки был образды үҙәк герой итеп алыуы аныҡ идея-эстетик концепцияға ҡоролоуынан: әҙипте халыҡ тормошоноң ҡайһы яҫылығы башҡаларына ҡарағанда күберәк ҡыҙыҡһындыра. Ҡатын-ҡыҙ образдары һәм уларҙың типтары утыҙынсы йылдарҙа бер нисә яҙыусы әҫәренең генә түгел, тотош әҙәбиәттең үҙәк геройы булып хәрәкәт итә. Был, әлбиттә, яҙыусыларҙың заман геройын һынландырыуға тарихилыҡ принцибы ҡараштары менән бәйле. Әҙиптәрҙе революцияға тиклем хоҡуҡһыҙ ҡатлам булған ҡатын-ҡыҙҙың бөгөнгө хәле, үткәне, киләсәге ҡыҙыҡһындыра.

Егерменсе йылдар әҙәбиәте үк бындай герой типтарын үҙәккә сығарҙы. Улар, С.Агиш билдәләүенсә, "тормош күтәргән һәм әҙәбиәт өсөн яңы образдар"[39] булды. Ғ.Хәйриҙең "Кооператорҙар", Д.Юлтыйҙың "Әлимә йәки Мырҙаш ҡарт туйы" повестарынан Зөһрә менән Әлимә, А.Карнайҙың "Тирмәнсе ҡыҙы" хикәйәһенән Сәғиҙә, А.Таһировтың "Алатау" пьесаһынан Зөһрә образы һ.б. бик күп характерҙарҙы килтерергә мөмкин.

Әммә егерменсе йылдарҙа был типтарҙы ике планда ғына һүрәтләү өҫтөнлөк итте: беренселәре – геройҙың бөгөнгө хәлен сағылдырған образдар. Улар инде формалашҡан, өлгөргән ижтимағи тип булып бер яҡлы ғына асыла, икенселәре – М.Ғафуриҙың "Ҡара йөҙҙәр" повесындағы Ғәлимә кеүек иҫке тәртиптәр ҡорбандары планында бирелгәндәре. Ғәлимә кеүек характерҙар, әлбиттә, сағыу образдар булдылар. Уларҙың күңел донъяһына психологик анализ етерлек дәлилле бирелде, әҫәрҙәргә әҙер килеп ингән заман героиняларына ҡарағанда характерҙары баҙыҡ эшләнде.

Егерменсе йылдарҙа ла заман героиняларын ике типта ғына биреүҙән ҡасырға, тормошто күп яҡлы бирергә ынтылыштар булды. Мәҫәлән, Ғ.Хәйриҙең "Боролош" романында Сәхибә, Ғариф байҙың ҡатыны Йыһан һ.б. образдарҙа тормош төрлө яҡлы сағыла, әлбиттә. Әммә егерменсе йылдар уҡыусыһына әҫәр таныш түгел ине.

Утыҙынсы йылдарҙа ҡатын-ҡыҙ образдарында ла яңы заман тәрәнерәк, тулыраҡ асыла бара: Фатима, Мәхфүзә (Ғ.Хәйри "Ҡатын", "Өсәүҙең тарихы"), Зифа апай (К.Мәргәндең шул исемдәге хикәйәһе) ҡатын-ҡыҙҙың бөгөнгөһөн сағылдыра. Улар - яңы тарихи шарттар актив тормошҡа күтәргән ижтимағи типтарының төрлө яҡлы асылғандары. Мәхфүзә шәхси тормошон инҡар иткән, дөйөм эш өсөн янып йөрөгән, ижтимағи эштәрҙә асылған, күңелендә хис-тойғолар коллизияһына урын ҡалдырмаған фанат-героиня. Фатима – ижтимағи геройҙың көнкүреш картиналарында асылғаны. Урта хәлле крәҫтиән, колхоз эшенә әллә ни ҡатышып бармаған ҡайныһы Сөләймән кеүектәрҙе коллектив хужалыҡтарға ойошоуға ышандырыу өсөн алып барған эштәрендә күрһәтелә. Ҡәйнәһе Гөлбиназ һәм ҡайныһы Сөләймән менән мөнәсәбәттәр тирәһендә үҫтерелгән күренештәрҙә Фатиманың ойошторооусы, яңылыҡтарҙы ауылға башлап индереүсе, заманының алдынғы ҡарашлы кешеһе

[39] Агиш С. Әҫәрҙәр: 4 томда: 4-се том, 1980. -338-339-сы биттәр.

булыуы бирелә. Мәйсәрә (Д.Юлтый “Мәйсәрә”) - романтик-героик планда тасуирланғаны.

Фатима, Зифа апай типтарында ҡатын-ҡыҙҙың бөгөнгөһө тулы бирелһә лә, яңы кеше булып формалашыу, характерҙарҙың яңынан тыуыу һәм сынығыу этаптары күрһәтелмәй. Улар әҫәргә тормоштан әҙер алынған геройҙар булып килеп инә, үткәндәре концепцияһына урын бирелмәй, характерҙы актив иткән сәбәптәр юлланмай.

С.Мифтаховтың “Һаҡмар» драмаһында Айһылыу, Һ.Дәүләтшинаның “Айбикә” повесында Айбикә, Д.Юлтыйҙың “Тракторсы Айһылыу” поэмаһында Айһылыу, Н.Ҡәриптең “Алма” пьесаһында Алма типтарында ҡатын-ҡыҙ яҙмыштарының үткәне һәм бөгөнгөһө бер образда бирелә. Был әҫәрҙәрҙә ҡатын-ҡыҙҙар үҙҙәренең үҫешен тотҡарлап килгән тәртиптәрҙе аша атлап сыға. Уларҙың был аҙымдары замандың яңы тарихи шарттарына, боролошло мәлдәргә тура килеүе лә мөһим булыуы сағыла. Айбикә, Айһылыу кеүектәрҙең үткән тормошоноң әһәмиәтле яҡтарына деталле тукталыу һәм яңы заман кешеһе характеры һыҙаттарын да биреү төрлө-төрлө образдарҙы концентрациялап, бер кешелә күрһәтеү яғынан отошло типтарҙы бирә. Уларҙың киҫкен ҡарарға килеүе нигеҙле, дәлилле булып күҙ алдына баҫа. Айһылыуҙың (С.Мифтахов “Һаҡмар”) тарихи шарттарға яҙмышы бәйле булыуы үгәй әсә Үлмәҫбикә йорто, йоғонтоһо аша бирелһә, “Айбикә”лә иҫке йәмғиәт тәртиптәре “тамырҙары тупраҡҡа ныҡлы береккән” Ҡотлояр бай аша асыла. Айһылыуҙың яҙмышын С.Мифтахов “ҡапылыраҡ” хәл итһә, Һ.Дәүләтшина Айбикәнең яңы тормошҡа ояныуы оҙайлы, ҡатмарлы процесс булыуын бирә, яҙмышы революция, граждандар һуғышы кеүек ваҡиғаларға тура килеүен һүрәтләй. Айһылыуҙың тормошондағы был мөһим этаптарҙың асыҡ күрһәтелмәүе, әлбиттә, образдың эҙмә-эҙлеклеген йомшарта. Һ.Дәүләтшина Айбикәнең һәр ваҡиғаға мөнәсәбәтен күңел торошо, психологик дәлил аша бирә. Мәҫәлән, яңы тормош тыуғас та әле уның Ҡотлояр йортон ҡапыл ғына ташлап сығып китергә баҙнат итмәүе һәм йылдар буйына һеңгән рухи барьерҙы аша атлап сыға алмауы күренә. Комсомолдар клубҡа йыйылышҡа саҡырғас, күңеле ҡанатланып ҡуйһа ла, унда барырға оҙаҡ ҡарар итә алмай, ҡурҡа. Унын күңеленә коллектив тормош менән йәшәгән замандаштары



тәкдиме тынғыһыҙлыҡ алып килә. Ҡотлояр өйөнән беренсе тапҡыр комсомолдарҙың дөйөм йыйылышына барыуы – унын рухи барьерҙы еңеүендәге бер аҙым да. Һ.Дәүләтшина героиняһында тарихи шарттар бер образ тирәһендә тупланыуы менән дә отошло. Ҡотлояр бай йортонда өй мәшәҡәттәренән бушамаған, үҙен яҡлап һүҙ әйтә алмаған Айбикәнең рухи үҫеш баҫҡыстары бирелә. Унын коллективҡа ҡушылып алдынғы колхозсы дәрәжәһенә үҫеүе генә түгел, рух ныҡлығының да үҫеше тракторислыҡҡа уҡып сығыуында, партия сафына алыныуында ла, колхозсылар алдында яһаған телмәрендә лә сағыла.

Утыҙынсы йылдарҙа яҙыусылар үҙҙәренең геройҙары характерында милли һыҙаттарҙы һүрәтләүгә әллә ни иғтибар бирмәһәләр, уларҙың интернациональ һыҙатлы булыуына баҫым яһалар, Һ.Дәүләтшинаның Айбикәһе – милли характер. Башҡорт халҡы яҙмышының милли үҙенсәлектәре героиняның һәр бер портрет штрихы, әҫәрҙәге милли тарихи шарттар менән бәйләнеше аша туплана килә.

Шулай итеп, башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары яңы тормошҡа һәм яңы йәмғиәткә актив ҡушылып киткән халыҡтың бер ҡатламын сағылдырҙы. Утыҙынсы йылдар өсөн типик күренештәрҙе дөйөмләштереп бирҙе. Элек патриархаль ҡанундар рухи үҫешен тотҡарлап килгән ҡатын-ҡыҙ актив төҙөүсе, яңылыҡты яҡлаусы, ойоштороусы, алдынғы ҡарашлы заман кешеһе, шәхси һәм ижтимағи эштәрҙе бер кимәлдә параллель алып барыу дәрәжәһенә үҫеп еткән героиня булды.

Был осорҙа башҡа әҙәбиәттәрҙә лә заман геройы проблемаһын ҡатын-ҡыҙҙар образдарында юллау күренеше хас. Ғөмүмән, башҡа халыҡтар әҙәбиәтенең дә бындай типтарға мөрәжәғәт итеүе уртаҡ концепциялар хаҡында һөйләй. Ғәлимйән Ибраһимовтың 1926-1927 йылдарҙа яҙылған “Тәрән тамырҙар” романында Гөлйөҙөм, Шәриф Камалдың “Ауыл матур уйлай” (1926) хикәйәһендә делегатка ҡатын образы, “Матур тыуғанда” (1937) романында “совет власы өсөн йәнен ҡыҙғанмаясағы өсөн һүҙ биргән коммунистка Мәҙинә, Ғәҙел Ҡотойҙоң “Тапшырылмаған хаттар” (1935) пьесаһында юғары әхлаҡлығы саф мөхәббәт менән һөйә белеүендә, ижади хеҙмәттә, ауыл халҡының хөрмәтен, һөйөүен яулауында сағылған Ғәлиә.

Тимәк, “белем һәм политик аң яғынан күптәргә үрнәк булырлыҡ актив ҡатын-ҡыҙ образы аша бирелгән яңы геройҙар тарихи дөрөҫ, хаҡ күренеш”[40]. Уларҙа революцияға тиклем иҙелгән халыҡтың яҙмышы асыҡ сағыла. Бөтә мосолман ҡатын-ҡыҙҙарының яҙмышын дөйөмләштергән типик геройҙар. “1921 йылғы ҡараңғы татар ауылында Мәҙинә (Ш.Камал “Матур тыуғанда”) дәрәжәһенә күтәрелгән ҡатындар, булған тәҡдирҙә лә, һирәк осраған, билдәле. Һуңынаныраҡ улар, әлбиттә, күбәйҙеләр. Ш.Камал ана шул күренештең яралғыһын тотоп алған да тулы ҡанлы образ итеп типиклаштырып биргән”,[41]- тип билдәләне татар әҙәби тәнҡите.

Ҡатын-ҡыҙҙарҙы бөгөнгө тормоштоң актив геройҙары иткән сәбәптәрҙе юллау уларҙы тарихи әҫәрҙәрҙең үҙәк образдары итеп һүрәтләүгә килтерҙе. Айбикә, Айһылыу образдарында ҡалҡыу ғына бирелгән яңы осор героиняһының үткәне концепцияһы Ҡ.Даяндың “Таңсулпан”, Д.Юлтыйҙың “Маҡтымһылыу”, Б.Бикбайҙың “Ҡарлуғас”, С.Мифтаховтың “Зимагорҙар” әҫәрҙәрендәге образдар менән тулылана бара. Күп әҫәрҙәр төп героиняларҙың исемдәре менән аталыуында уҡ яҙыусыларҙың ҡатын-ҡыҙҙар темаһын үҙәккә ҡуйыуҙары хаҡында һөйләй.

Ҡарлуғас (Б.Бикбай “Ҡарлуғас”), Таңсулпан (Ҡ.Даян “Таңсулпан”), Маҡтымһылыу (Д.Юлтый “Маҡтымһылыу”), Фәрхиямал, Һандуғас (С.Мифтахов “Зимагорҙар”) – М.Ғафуриҙың “Ҡара йөҙҙәр” повесынан Ғәлимә һымаҡ уҡ социаль тәртиптәр ҡорбаны. Уларҙа башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының хоҡуҡһыҙ яҙмышы һынлана. Ғафури героиняһынан айырмалы, уларҙа халыҡтың, башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының борондан килгән героик һыҙаттары ла сағыла. Үҙ яҙмыштарын саҡ ҡына үҙгәртеү өсөн булһа ла, уларҙың ҡыйыу аҙымы, активлығы һыҙатланыш ала. Таңсулпандың (Ҡ.Даян “Таңсулпан”), Фәрхиямал (С.Мифтахов “Зимагорҙар”) мөхәббәттә фажиғәгә осрауҙары менән М.Ғафури героиняһына оҡшаһалар, Ҡарлуғастың Шатморатҡа булған саф мөхәббәте өсөн көрәше – тигеҙһеҙлеккә ҡаршы көрәш, актив протест саҡҡыһы. С.Мифтахов бер әҫәр эсендә бер нисә типты биреп, тормоштоң эпик солғанышын

[40]Баимов Р. Шаг в зрелость. -Уфа: Башк. книжное издательство, 1975. –Стр 81.

[41]Татар совет әҙәбиәте. //Авторҙары: Г.М.Хәлитов, И.З.Нуруллин, Х.Ф.Хәйруллин, Н.Г. Юзеев һ.б. -Ҡазан: Тат. к. н., 1981. -25-се бит.



тығыҙ биреүгә ирешә. Һандуғастың яҙмышы ла Фәрхиямалдыҡы, Ҡарлуғастарҙыҡы кеүек “көсләләр” ҡулында. Лавка тотҡан, халыҡты алдап байыған, бөтә нәмәне лә аҡсаға әйләндерергә тырышҡан Шәғәли үҙенә туған тейешле Һандуғасты ҙур ғына ҡалымға һатып ебәрергә ниәтләнгән. Һандуғас шул патриархаль тәртиптәргә ҡаршы сығыуы, Фәсхигә булған мөхәббәте өсөн көрәшеүе менән Ҡарлуғас характерына оҡшаш. Һандуғас һәм Ҡарлуғас кеүек типтарҙа башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының иҫке патриархаль тәртиптәргә буйһоноп бармаған, халыҡтың героик рухын туплаған ҡатламы сағыла.

Яҙыусылар Октябрь инҡилабы осоронда яҙмышы революцион идеяларға мөнәсәбәте менән билдәләнгән һәм хәҙер яңы йәмғиәт төҙөүгә ҡушылып киткән герой проблемаһын интеллигенция типтары аша хәл итте. Уларҙың да халыҡтың башҡа ҡатламдары һымаҡ уҡ революция осоронда сынығып яңы ҡоролошҡа килеп инеүе һүрәтләнә. Был осорҙа, заман шарттарына бәйле, сәнғәттең үҫеше революцияға мөнәсәбәте менән билдәләнеүе күп әҫәрҙәрҙең конфликт үҙенсәлеген, характерҙар бәрелешен билдәләне. “Башҡорт һәм татар яҙыусыларының яңы әҙәбиәттә үҙҙәренә урын таба алмауы шағирҙың талантлы булыу-булмауы йәки талантының һүнеү-һүнмәүе менән түгел, ә ижадының заман ихтыяждарына яуап бирә, яңы тормош ҡороуға күтәрелгән эшсе һәм крәҫтиән массаларының зауығына ауаздаш була алмауы революцияға мөнәсәбәте”[42] ҡарашы геройҙарҙы ла шул позициянан сығып һүрәтләүгә алып килгән ине. А.Таһировтың “Алатау” пьесаһы геройҙары, А.Карнайҙың “Беҙ ҡайтырбыҙ” повесынан художник Верхов, музыкант Вольф, А.Таһировтың “Ҡыҙылгвардеецтар”, “Ҡыҙылармеецтар” дилогияһынан Нурый Саҡай кеүектәрҙең яҙмышы революцияға мөнәсәбәттәре яҫылығында һүрәтләнә.

А.Таһиров тәүҙә ҡандан, ҡоралдан ҡурҡҡан Нурый Саҡайҙың әкренләп ҡыҙылгвардеецтарға ылығып китеүен бирһә, Али Карнай үҙенең картиналарын, һәләтен үҫтереү өсөн юл таба алмаған, шәхес булараҡ та иҙелгән художник Верхов, оло оркестр

[42] Нурғәлин З. Идея берҙәмлеге юлында. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1979. -70-71-се биттәр.

ойоштороу хыялы менән йәшәгән музыкант Исаак Вольфтарҙың коммунистар менән осрашҡас ҡына маҡсаттары тормошҡа ашасаҡтарына инаныуҙарын һүрәтләй.

А.Таһиров “Алатау” пьесаһында ла төрлө интеллигент типтарында яңы кешенең формалашыуы ҡатмарлы осорға тура килеүе моментын үҙәккә ҡуйған. Икеһе бер үк гимназия бөтөргән Зөһрә менән Ғәлим икеһе ике юлдан китә. Зөһрә ҡыҙылгвардеецтарға, большевик, коммунистарға ылыҡһа, Ғәлим тәүҙә ҡайһы юлды һайларға белмәй, ҡораллы бәрелештәрҙә ҡатнашмауын ҡандан ҡурҡыуы менән аңлатып, һуңынан аҡтар яғын һайлай, Ғази шағир революция йырын йырламағаны өсөн буржуаз милләтсе шағир тип атала, Ғисмәт уҡытыусы аҡтар ҙа, ҡыҙылдар ҙа яғын һайламай, Зәки Вәлиди хәрәкәтенә ҡушыла, ҡарт врач Малахов оло йәштәрҙә булыуына ҡарамаҫтан, ҡоралды бәрелештәрҙә яраланған ҡыҙылгвардеец һалдаттарға ҡулынан килгәнсә ярҙам итергә ашыға.

Ғәзиз Ғимранов (Р.Ниғмәти “Врач Ғимранов”) - яҙмышы революция осорона тура килгән алда әйтеп үткән геройҙарҙы ла, артабан, “тыныс шарттарҙа” үҙен хеҙмәттә раҫлаған герой-новаторҙар образдарын да бер кешелә күрергә мөмкин булған шул осор замандаш тибы. Революцион көрәшкә ун өс йәшенән үк ҡушылып киткән Ғәзиз “социалистик тормош шарттарында уҡып, һәләтле врач дәрәжәһенә күтәрелгән”[43]. Ғәзиздең новатор идеялары ҡытыршы юлдар менән медицина фәне ҡаҙанышы булып китә. Ғәзиздең атаһын үҙ ҡулдары менән атып үлтергән аҡ офицер Гвоздев шулай уҡ совет осоронда юғары белем алып, врач булып үҫкән. Ул Ғәзиздең уйлап тапҡан фән ҡаҙанышын ҡулына төшөрөү маҡсатында тәжрибә мәлендә препаратҡа ағыу ҡуша. Дөрөҫлөк асылғанға тиклем Ғәзиз партиянан сығарыла, эшендә лә уға шикләнеп ҡарай башлайҙар. Ғәзиз образында хеҙмәткә һәм эшкә новаторҙарса ҡарашлы, эҙләнеүсән характерлы яңы геройҙың ҡаршылыҡтарҙы еңеп сығыу аша формалашыуы күренә. Ул геройҙа ла һәр саҡ рухи үҫеүгә, юғары максаттарға, үҙен һәм халыҡты

[43]Ғәйнуллин М.Ф. Башҡорт драматургияһының үҫеү юлдары. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1985. -80-се бит.



үҙгәртергә ынтылып тороусы шәхес һыҙатланды.

Техникум студенты Сәлих Мәхмүтов (С.Агиш “Мәхмүтов”) яңы йәмғиәттә йылы урынға оялаған бюрократтар Сыртланов, Әмирхановтар, материаль байлыҡ йыйып, күңелдәре ярлыланған Урманцевтар менән көрәштә асылды.

Шулай итеп, әҙәбиәт төрлө ҡатлам һәм төрлө тип әҙәби характерҙарҙа утыҙынсы йылдар алып килгән ваҡиғалар барышында яңы тип кешенең формалашыуын күҙ алдына баҫтырҙы. Заман геройы - үҙ маҡсаттарына һәм идеяларына бирелгән фиҙаҡәр көрәш һәм хеҙмәт кешеһе. Яңы тормош өсөн көрәш процесында уның коллектив хеҙмәт, берҙәмлек, социалистик боролоштарҙың барып сығасағына инанғанлыҡ һыҙаттары тәрбиәләнеүе сағыла.

Геройҙың бөгөнгөһө, уның актив эшмәкәрлеге алда ҡарап үткән социаль-ижтимағи типтар аша асылһа, уның үткәндәре, сынығыу этаптары, тарихилығы тарихи әҫәрҙәрҙәге әҙәби типтарҙа төрлө яҡлы сағылышын таба:

Тарихи геройҙарҙы шартлы рәүештә ошолай төркөмләп бүлергә мөмкин:

– беренсеһе – социаль ваҡиғалар тәьҫирендә характеры, аңы үҙгәреп, һуңынан яңы тормош төҙөүҙең активистары булып киткән геройҙар: Булат, Байғужа, Индриль (Д.Юлтый “Ҡан”), Бәкер Бакиров (А.Таһиров “Һалдаттар”), Вәхит Йәғфәров, йәш шәкерт (М.Ғафури “Тормош баҫҡыстары”, “Шағирҙың алтын приискыһында”), Күдрәш (С.Мифтахов “Зимагорҙар”), Сәлих (Х.Мохтар “Дауыл алдынан”) һ.б.

Был геройҙарҙың үҙҙәрен ике бәләкәй төркөмгә бүлеп ҡарарға мөмкин: Д.Юлтыйҙың “Ҡан” романының төп геройҙары кеүек һалдат массалары, икенсеһе – Күдрәш кеүек “урындағы ерлеккә” бәйләп һүрәтләнгәндәре.

Тәүҙә “Беҙҙә үҙ башыбыҙ, үҙ уйыбыҙ, үҙ аҡылыбыҙ юҡ”, тип ихтыяр көсө булмаған, үҙҙәрен “әллә ниндәй упҡын ихтыярына бирелгән йәнле ҡурсаҡтар”, “йәшендән өрккән һарыҡтар кеүек”, “ваҡ, бик ваҡ юныҫҡылар, көслө дауылдарҙа осҡан ҡамғаҡ[44] кеүек һиҙгән Булат, “беҙ һуғышабыҙ икән дин өсөн һуғышабыҙ, үлһәк,

[44] Юлтый Д. Ҡан. -Өфө: Башкортостан китап нәшриәте, 1977. -32-се бит.

шаһит булып, һорауһыҙ ниһеҙ ожмахҡа китәбеҙ”[45],- тигән Вәхит Йәғфәров та (М.Ғафури “Тормош баҫҡыстары”), Бәкер Бакиров та (А.Таһиров “Һалдаттар”) пассивтар. Улар характерын формалаштырған ваҡиғалар, бер һүҙ менән әйткәндә, һуғыш ғәрәсәттәре. “Ҡан” романында, мәҫәлән, һуғышты, ике яҡ ғәскәр ҡара-ҡаршы тороп, команда буйынса атышып үлеү һәм яраланыу, ҡайһы яҡ ғәскәр күп ҡырыла, шул еңелә, еңгән яҡ “ура” ҡысҡырып ерҙәрен ала, тип уйлаған, уларҙың ярлы ғына ғаиләһенән ни өсөн өс малайы ла һуғышҡа алынып, мулланың улы тороп ҡалыуын да аңламаған Булаттың да, һуғыш – ул “алла тәҡдире”, кафырҙар һәм мосолмандар һуғышы, тип уйлаған, дини легендаларҙа кире образ Салсалға ташланған дөлдөл атлы, ҡылыслы Ғәли батыр кеүектәргә һоҡланған, уларға оҡшап, батырлыҡтар эшләргә ашҡынып торған Вәхиттең дә, тормошта тәжрибәһеҙ Бәкерҙең дә иллюзияларынан арынып, сәйәси аңы үҫеп, революционерҙар дәрәжәһенә үҫеп етеүе сағыла. Геройҙарҙың күҙ алдынан үткән, үҙҙәре кисергән һуғыш касафаттары әкренләп тормошҡа күҙҙәрен аса.

Булат әле фронтҡа инмәҫ элек үк офицерҙар йөҙөндә хакимлыҡ органдарының кешеләр ғүмере менән иҫәпләшмәүҙәре, тупаҫлығы менән осраша. Фронтҡа килеп ингәс, окоптарҙағы тормош һалдаттың һуғышҡа, офицерҙарға булған ҡарашын ыңғай яҡҡа үҙгәртмәй. Немец һалдаттарының да үҙҙәре кеүек үк һуғышырға теләмәүҙәрен төшөнөп, “братание” ойоштороу, һуғыштың тик ҡалын кеҫәләр өсөн генә икәнен аңлауға килеү, армия тәртиптәренең һалдатҡа кеше итеп түгел, ә һуғыш ҡоралы итеп ҡарау, бысраҡ, һыуыҡ һауа шарттарында еүеш, тубыҡтан һыу окоптарҙа ас көйөнсә ултырыуҙарын һүрәтләүендә авторҙарҙың дөйөмөрәк, оҡшаш ваҡиғаларҙы – “окоп тормошон” биреүен күрергә мөмкин. Шуға күрә быңдай әҫәрҙәрҙә алғы планда күберәк масса хәрәкәте күренә. Характерҙарҙы башҡалар араһынан “таныуы” ҡыйын. А.Таһировтан айырмалы, Д.Юлтый шул социаль-тарихи шарттарҙы кеше яҙмыштары, фажиғәле эпизодтар аша конкретыраҡ биреүгә ирешә. Мәҫәлән: рус-япон һуғышы яугиры күҙһеҙ гармунсы ҡарт, Булат йәрәхәтләнеп Мәскәү лазаретына эләккәс танышҡан

[45] Ғафури М. Тормош баҫҡыстары. -Өфө: Башҡ. к. н., 1955. -122-се бит.



һуҡыр Фәтхулла Басиров, фронтта яраланып үлгән Буранбай кеүек һуғыш ҡорбандары аша революцияға тиклемге тарихи атмосфера күҙ алдына баҫа. Геройҙарҙы уратып алған тирә-яҡ мөхит ошо образдарҙа ла һынлана. Фәтхулла Басиров һуғышҡа тиклем байҙарға ҡаракүлдән кейем теккән, оҫта тегенсе булған. Уның оҫталығын үҙләштереп алғандар ҙа, үҙен йәмғиәттән сығарып ташлағандар.

Бәкер Бакировтың да (А.Таһиров “Һалдаттар”) синфи аңы формалашыу шарттары милли мөхит түгел, ә армия тәртиптәре, шул тәртиптәргә буйһонмаған өсөн сыбыҡ менән һуҡтырылыуҙар. Һалдаттарҙа Тыуған илде һаҡлау, патриотлыҡ кеүек тойғолар ҙа бөтөнләй юҡ. Улар ”ура” ҡысҡырғанда ла “еңеү өсөн тантана итеп түгел, ә “әле генә күкрәгеңде ҡыҫып торған бөтә нәмәнән, бөтә тойғонан тиҙерәк арынып өсөн һөрәнләү уйынан башҡалар артынан әйәрә”[46].

Д.Юлтый романында А.Таһиров әҫәренән айырмалы, геройҙарының милли һыҙаттарына баҫым яһап, уларҙы милли мөхит менән бәйләргә тырышыу, революцион юлға баҫыуының тарихи сәбәптәрен юлларға ынтылыш та бар. Мәҫәлән, Булат “Буранбайҙы” йырларға ярата, бәйеттәр сығарып, көндәлегенә яҙып бара, йыш ҡына уйҙары менән тыуған яҡтарына әйләнеп ҡайта. Был шундай эпизодта ла күренә: бала сағында Булат ауылдың Ғаяз байының арғымағында һабантуйҙа беренселекте ала. Бай уға аҡса бирә. Әммә атаһының был ваҡиғаға ни өсөн ныҡ асыуланыуын Булат аңламай. Булаттың ауылдашы Байғужала автор башҡорт халҡына хас бунтарлыҡ һыҙаттарының булыуын бирә. Шулай итеп, автор башҡа әҫәрҙәрҙән айырмалы, геройҙарын социаль тип булараҡ ҡына түгел, милли характер итеп, иҫтә ҡалырлыҡ һыҙаттары менән дә бирергә тырыша.

Индриль образында һалдаттарҙың ирекккә, тыныс тормошҡа ынтылышы фәлсәфәүи планда асыла. Индрилдең тәү ҡарашҡа тормош хаҡында әһәмиәтһеҙ, маҡсатһыҙ булып күренгән фәлсәфәләрендә, баһаһында ошо тәртиптәрҙе үҙгәртеү, азат йәшәү ынтылышы ята: Индриль М.Горькийҙың Ыласын, Дауыл ҡошо тураһындағы йырҙарын яттан һөйләргә ярата, бигерәк тә һуңғы ике юлын ҡысҡырып һөйләп бөтөрөп ҡуя, “кешеләр поезды, ҡоралды

[46] Юлтый Д. Ҡан. Роман. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1977. -278-се бит.

уйлап тапҡандар ҙа, ни өсөн үҙҙәренең файҙаһына эшләүгә түгел, ә бер-береһен үлтереүгә борғандар" кеүек һорауҙарға яуап эҙләй. Тәжрибәһеҙ рекруттың һалдаттан революционерға тиклем үҫеп етеү юлы күрһәтелә. Уларҙа яңы кешенең тыуыу һәм формалашыу баҫҡыстары асыҡ сағыла. Уларҙың һалдаттан – ҡыҙылгвардеецҡа, ҡыҙылгвардеецтан - ҡыҙылармеецҡа әйләнеүе - башҡорт халҡының да типик үткән юлы булып күҙ алдына баҫа. Булат кеүек образдар үткән юл Ғимай Басыров (И.Насыри "Күҙәй"), Билал Ҡадыров (А.Таһиров дилогияһы) һ.б. кеүек яңы типтағы кешеләрҙең үткән юлы булып һыҙатлана. Булат һымаҡ геройҙар тирә-яҡтағы үҙгәрештәрҙең кешенең күңел донъяһына, психологияһына тәьҫиренең отошло бирелеүе менән дә әһәмиәтле.

Д.Юлтыйҙың "Ҡан" романында Булат, Байғужа, Буранбай, Новиков, Индриль образдарында, А.Таһировтың "Һалдаттар" әҫәрендә Бәкер Бакиров характерында, М.Ғафуриҙың "Тормош баҫҡыстары" повесында Вәхит Йәғфәровтарҙа яҙыусыларҙың башҡорт халҡының революцияға килеү юлын күрһәтеүҙәге ҡараштары бер социаль ҡатламға - һалдат массаларына йүнәлтелгән. Яҙыусылар геройҙы формалаштырыусы социаль-тарихи шарттарҙы, социаль фонды империалистик һуғышта күрә. Ә.Вахитов: "Яҙыусыларға социаль аңы юғарыраҡ, тормошҡа, тарихи процесҡа активыраҡ мөнәсәбәтле геройҙы крәҫтиән массаларынан торған "урындағы" кешеләр араһынан ғына алыу бик үк типик булмаҫ кеүек тойола,- ти. Шуға күрә улар үҙҙәренең геройҙарын "ситкә – синфи аңы формалашыуы өсөн ерлек "өлгөргәнерәк" урынға – "типик шарттарға" алып китә"[47].

Башҡорт халҡының революцияға тиклемге яҙмышын һынландырыуҙа һалдаттар араһынан айырылып сыҡҡан геройҙар типтары – тормоштоң бер яғы ғына. Сөнки "урындағы" ауылдарҙағы хәрәкәтте улар солғап ала алмай. Һалдаттарҙы ауылда булып ятҡан ваҡиғалар менән бәйләнештә һүрәтләү юҡ.

Йәш шәкерт (М.Ғафури "Шағирҙың алтын приискыһында"), Сәлих (Х.Мохтар "Дауыл алдынан"), Күдрәш (С.Мифтахов "Зимагорҙар") образдары "кайҙалыр ситтә" түгел, ә урындағы милли социаль-тарихи шарттарға бәйле формалашыуы

[47] Вахитов Ә. Таланттың асылы. -Өфө: Башҡ. к. н., 1972. -39-40-сы биттәр.



менән халыҡҡа яҡыныраҡ. Халыҡ яҙмышы һәм милли ерлек менән бәйле һүрәтләнеүе был геройҙарҙы отошло итә. Һ.Дәүләтшинаның "Ырғыҙ" романындағы халыҡ яҙмыштарын конкрет образдарҙа сағылдырыуға халыҡ менән көслө булыуы монументаль, эпик иткән Айбулат кеүек характерҙарҙы биреүгә әҙәби ориентир улар. Уларҙа төп ыңғай геройҙың конкрет һыҙаттары күҙ алдына баҫа. Революцияға килеүҙәренең сәбәптәре көнкүреш аша ла, социаль ваҡиғалар менән бәйле лә бирелә.

М.Ғафуриҙың "Шағирҙың алтын приискыһында" повесы менән С.Мифтаховтың "Зимагорҙар" драмаһы ваҡиғаларҙы бер урында – оҡшашыраҡ ситуациялар – алтын сығарыу эше, шахта эшселәре яҙмышын биреүе менән бер-береһенә яҡыныраҡ. М.Ғафуриҙың "Шағирҙың алтын приискыһында" повесында мәҙрәсәлә уҡыу барышында йыл буйына шәкерттәргә аш бешереп үҙҙәренең тамағын үҙҙәре ҡайғыртып йәшәгән, йәй етеп, уҡыуҙар тамамланғас, эшһеҙ ҡалған ярлы шәкерттәр - Зиннәт һәм төп геройҙың яҙмышы үҙәктә тора. Бирелгән ваҡиғаларҙың әһәмиәтлелегенә баҫым яһалһа ла, уларҙы геройҙы хәрәкәткә килтереүсе сәбәптәр итеп дәлилләү етеңкерәмәй. Мәҫәлән, "Шағирҙың алтын приискыһында" повесында йәш шәкерт ундай күренештәр менән приискыға китеп барған юлында уҡ осраша: төп герой байға көтөү көтөргә ялланған ҡаҙаҡ егеттәре менән таныша. Ҡаҙаҡ егеттәренең береһенең моңло-зарлы тормошон оҙон көйлө өләңгә, икенсеһенең думбыра сыңына һалып йырлауында, өсөнсөһөнөң уйға талып, йөҙөнә борсоулы яҙмыштан төңөлгән кеше сырайын хәтерләтеп ултырыуында төп герой тормоштоң ҡайҙа ла бер икәнен күрә. Думбыраның йырында ҡыҫынҡы тормоштан ялығыу, икенсе бер тормошҡа талпыныу, үҙенең башҡалар менән тигеҙһеҙлегенән ризаһыҙлыҡ, ләкин күкрәгендә был тигеҙһеҙлектән сығырлыҡ көс барлығын тойоуы сағыла. Геройҙар артабанғы ауылдың сикһеҙ ҡомһоҙ, ярлыларҙы ҡурҡытып эшләткән бай исеме менән Яманчал тип аталыуын беләләр. Ярлы ҡаҙаҡ өйөндә тормош ауырлыҡтарынан миктәгән, көндән-көн хәйерселеккә, бөлгөнлөккә тәгәрәгән ярлы ҡаҙаҡ ғаиләһе менән танышалар. Приискыға килгәс тә, эшселәрҙең ауыр тормоштары, эштә төрлө имгәнеүҙәр, бер эшсенең "ат башындай алтын табып та" йөҙ һум ғына аҡса алыуы, шахтер Сәлим бабайҙың йәрәхәтләнеүе, байҙарҙың эшләмәһәләр ҙә

көндән-көн байығыуы кеүек күренештәр менән герой аҙым һайын осраша. Яҙыусы ваҡиғаларҙың киң эпиклығына өлгәшә, шахтер – эшселәр тормошонда ғына түгел, ауылдарҙа ла шундай уҡ тигеҙһеҙлек. Әммә яҙыусы әле шул милли социаль фонды ғына бирә. Йәш шәкерт күҙ алдына баҫырлыҡ бер асыҡ характеры менән дә айырылып тормай. Төп геройҙың халыҡтың социаль хәленә битараф булмауы күренә, һәр бер деталь халыҡ яҙмышының сағылышы булып күҙ алдына баҫа. Әммә ваҡиғалар теҙмәлелеге бар, герой хәрәкәте юҡ. Шуға күрә Булат, Бәкер Бакиров кеүек геройҙарҙағы һымаҡ уҡ күңелендәге эске пассив протесы ғына бар.

С.Мифтаховтың “Зимагорҙар” драмаһындағы образдарҙа М.Ғафури повесындағы геройҙарға оҡшаш, дөйөм һыҙаттары ла бар. С.Мифтахов дөйөм халыҡ яҙмышын, эшселәр тормошон геройының ҡараштары үҙгәреү ерлеге итеп күрһәтеүе менән герой һәм масса берлеген бирә. Автор ҙур ғына алтын табып аҡса йыйып алғас, тормошо яҡшырып китер тип, приискыға килгән Күдрәш образында, конкрет яҙмыштың үсешендә улар кеүектәрҙең киләсәге үҙҙәренең ҡулында булыуын бирә. Күдрәштең Фәрхиямалға булған мөхәббәтенең прииск хужаларынан тапалыуын, алтын табып та уның өсөн шул уҡ хужалар 50 һум ғына биреүен, ябай халыҡҡа ҡарата ғәҙелһеҙлекте күргәс, революцион ҡуҙғалыштарға ҡушылып китеүенә шик юҡ.

Х.Мохтарҙың “Дауыл алдынан” әҫәре геройы Сәлих та революцияға тиклемге халыҡ яҙмышын сағылдыра. Сәлих кеүек геройҙарҙа ҡала шарттарында формалашҡан революционерҙар, революцион юлға баҫыусы эшсе образдары бирелә.

Х.Мохтар геройы үҫмерҙәргә хас тынғыһыҙ характерында, ситуацияларҙан сығыу юлын үҙе эҙләргә тырышыуында активлығы менән айырылып тора. Яҙыусы уның тормошон ҡалала күрһәтеүе менән дә икенсерәк юлды һайлаған. Алдағы геройҙар һымаҡ уҡ, Х.Мохтар эшселәр араһынан күтәрелгән геройҙы күрһәтеүҙе маҡсат итеп ҡуя.

Автор повесын бәләкәй генә тәҙрәле, ер иҙәнле өйҙә йәшәгән, тамаҡтары ашҡа, өҫтәре кейемгә туйынмаған Сәлихтәр ғаиләһен һүрәтләүҙән башлай. Атаһы һуғышҡа алынғанға тиклем бала саҡтары әллә ни ауырлыҡта үткән кеүек тойолмаһа ла, атаһы фронтҡа китеп, әсәһе ауырып, үлем түшәгенә ятҡас, үҫмер Сәлихты



ғаилә тотҡаһы булып ҡалыу иртә өлгөртә. Әсәһе үлгәс, һеңлеһе Рәшиҙә менән кеше тупһаһында йөрөп, теләнселәргә мәжбүр Сәлихтең эшкә урынлашып аҡса табырға ҡарар итеүенән яҙмышының икенсе этабы башлана тип әйтергә мөмкин. Тәмәке фабрикаһында эшләй башлағас, революцион эшкә ылығып китеүе, “тимер кешеләр” менән осрашып, көрәшсе булып үҫеп етеүе, үҫмер саҡтары үткән тормош шарттары ғәҙәттәге көнкүреш ваҡиғалары ғына түгел, ә Сәлихты революцион юлға илтеүсе сәбәптәр, тәүшарттар.

Сәлих, Күдрәш, М.Ғафуриҙың “Шағирҙың алтын приискыһында” повесынан төп геройҙа “Октябрҙы атҡарған быуындың типик пролетар вәкилдәре”[48]нең формалашыуы сағыла.

Һығымта яһап, шуны әйтергә мөмкин: әгәр Булат, Бәкер, Вәхит кеүек һалдат массалары араһынан, Күдрәш, Сәлих, йәш шәкерт кеүек “урындағы” халыҡ араһынан алынған геройҙарҙың “революция булған өсөн революционерҙар”[49] булып китеүҙәре сағылһа, боролошло ваҡиғалар геройҙарҙы “революционлаштырыуы”[50] күренһә, революцияға тиклем халыҡ яҙмышының “баҫҡыстарын” бирһәләр,

– икенселәре – шул социаль ваҡиғаларҙы үҙҙәре тиҙләтеүсе, үҙҙәре тарихтың актив ижадсылары: Шатморат (Б.Бикбай “Ҡарлуғас”), Айсыуаҡ (Ҡ.Даян “Таңсулпан”), Ҡараһаҡал, Юлдыбай (М.Буранғолов “Ҡараһаҡал”, “Башҡорт туйы”), Сурағол (А.Хайбуллин “Сурағол”), Ғайса, Фәсхи (С.Мифтахов “Зимагорҙар”). Был типтар шулай уҡ яҙмыштары революцион, социаль тетрәүҙәргә тиклемге осорға тура килеүе, халыҡ араһынан күтәрелеп сыҡҡан геройҙар булыуы менән уларға оҡшаш. Тап шул образдар яңы заман кешеһен биреүгә нигеҙ, ориентир булды. Улар төрлөһө төрлө кимәлдә тарихи үткәндәрҙе тулыландырып килә: А.Хайбуллиндың “Сурағол” тарихи хикәйәһенән Сурағол, М.Буранғоловтың “Башҡорт туйы” (икенсе варианты “Гөлсәсәк”)

[48] Вахитов Ә. Таланттың асылы. -Өфө: Башҡ. китап нәшриәте, 1972. -44-се бит.
[49]Баимов Р. Башкирский историко-революционный роман: Учебное пособие. -Уфа: Издательство БГУ, 1980. -С.25-26.
[50] Вахитов Ә. Таланттың асылы. -Өфө: Башҡ. китап нәшриәте, 1972. -40-сы бит.

драмаһынан Юлдыбай – стихиялы бунтарь типтары. Юлдыбай башта көрәштә яңғыҙ, бер үҙе. Һуңынан Үтәғол, Гөлбикә кеүек оло быуын аҡһаҡалдарының уны көрәштең башына етәксе итеп тәғәйенләүен күрәбеҙ. Автор характерҙы динамик үҫештә бирергә ынтыла: Юлдыбайҙың маҡсаттары башта бәләкәй ҙә, тар ҙа – ул атаһы ғаиләһен йәберләүселәрҙән шәхси үс алыуҙы ғына ҡайғырта, ҡон ҡайтарыу уйы менән генә яна. Шуға ла ул әле стихиялы бунтарь, ә азатлыҡ көрәшсеһе түгел. Бер-береһен яҡлаусы байҙар, ҡорал һәм власть көсөнә таянған түрәләр менән яңғыҙы ғына бәрелешкәндә уңышһыҙлыҡҡа осрай. Күмәк халыҡ ҡуҙғалышын әҙерләп йөрөгән кешеләр менән аралаша башлағас ҡына, ул ғәҙелһеҙлекте тик күмәк көс менән еңеп буласағын аңлай. Шунан һуң ғына ырыуҙар араһында дау сығарған түрә-байҙарға ҡаршы күтәрелгән Ҡатай ырыуы халҡы уны яу башлығы итеп ҡуя. М.Буранғоловтың әҫәрҙәрендә “күп осраҡта әҫәр нигеҙенә һалынған риүәйәт, йә йола, йә тарихи факттарҙан “ситләшергә теләмәүе” геройҙарын осраҡлы хәл-шарттар яйына йөрөтә, баштараҡ төҫмөрләнеп ҡалған социаль конфликт киҫкен бәрелеш кимәленә еткерелмәй”[51].

А.Хайбуллиндың тарихи хикәйәһендәге Сурағол образы башта уҡ актив хәрәкәт итә башлауы менән иҫтә ҡала. Сурағолда автор халыҡтың үҙ байҙарына һәм колонизаторҙарына ҡаршы көрәшен етәкләй алырлыҡ геройҙың бар сифаттарын да асып бирә кеүек. Әҫәрҙең башында уҡ Сурағолдоң Хәби байҙа ялсылыҡта эшләп тә эш хаҡын ала алмауы, үҙ яҙмышының бәхетһеҙлегенең сәбәбе Хәби байҙар ишенән икәнен аңлап, байҙың яңағына һуғып, өйөн ташлап сығып китеүендә бунтарь характерлы булыуы күренә. Артабанғы яҙмышын Сурағол эшселәр тормошо менән бәйләй, һигеҙ йыл ағас заводында эшләй, үҙе кеүектәрҙең яҙмышын күрә. Былар герой характерына йоғонтоһоҙ үтмәй. “Донъяны күргән, әҙерлекле”[52] Сурағол сходта ваҡытында байҙарҙың ысын йөҙөн асып һала, әммә “күмәкләшергә, байҙарҙы үҙ елкәһенән һелкеп төшөрөргә тәүәкәлләгән, сөңгөм-сөңгөм хәбәрҙәр”[53] йөрөткән актив халыҡтың

[51]Сказительское и литературное творчество М.Бурангулова: Сборник статей /БНЦ УрО РАН. -Уфа, 1992. –С. 56.

[52] Вахитов Ә. Таланттың. асылы. -Өфө: Башҡ. китап нәшриәте, 1972. -80-се бит.

[53] Хайбуллин А. Сурағол. Тарихи хикәйә. -Өфө: Башҡортостан дәүләт нәшриәте, 1935. -142-се бит.



көрәшен ойошторооуы күренмәй. Байҙар, старшиналар Сурағолдоң башҡаларға ҡарағанда аңы юғарыраҡ һәм бунтарь булыуынан ҡуркып төрмәгә ябыр өсөн әҙәрлекләй. Урманда ҡасҡын булып йөрөүе менән ул Шатморат, тарихи йырҙарҙағы ҡасҡындар образына оҡшай. Әммә авторҙың шул бунтарь, стихиялы көрәшсе кимәлендә геройын хәрәкәт итергә “мәжбүр итеүе” характерҙың үҫешен күрһәтмәй. Сурағол эшселәр араһынан ауылға ҡайтҡас та, йәшерен стихиялы көрәштәрҙе тоҡандырыусы ғына булып иҫтә ҡала. Ауыл ярлыһы Түрәбайға волость писарен үлтерергә ҡушыуында ла көрәш тактикаһының тарҡау булыуы күренә.

Әҫәрҙең финалы отошло һәм характерҙар бик оҫта ғына ҡылыҡһырлана. Урманда ҡасҡын булып йөрөгән Сурағолға көтмәгәндә Ҡолморҙа старшина осрай. Йөҙгә-йөҙ, икәүҙән-икәү генә осрашыуҙа Ҡолморҙаның Сурағолдо күреп, ҡапыл һиҫкәнеп китеп, ҡурҡыуы йөҙөнә сығыуында, ә Сурағолдоң, киреһенсә, үҙен батырҙарса тотоуында геройҙың өҫтөн булыуы күренә. Ҡолморҙаның старшинаны үлтермәй, һаҡалын ҡырҡып, кире ебәреүендә лә ҙур мәғәнә ята: әҫәр тамамланмаған, “беренсе китап бөттө”, тип билдәләнгән. Тимәк, финалдағы эпизод көрәштең киҫкен буласағына ишара. Сурағол, Юлдыбай кеүек образдарға, фольклор геройҙарына Айсыуаҡ (Ҡ.Даян “Таңсулпан”) әле шәхси көрәшен халыҡтың милли-азатлыҡ хәрәкәтен етәкләүгә ҡушып ебәрә алмауы менән яҡыныраҡ. Был геройҙарҙа башҡорт халҡының революцияға тиклем үҙ яҙмышы өсөн милли-азатлыҡ көрәше концепцияһы һалынған.

Улар араһында Шатморат (Б.Бикбай “Ҡарлуғас”) - уңышлы дөйөмләштерелеп, ҡалҡыу итеп бирелгән көрәшсе-геройҙар араһында сағыу образдарҙың береһе. Шатморат та яҙмышы урманда ҡасҡын булып йөрөүенән һүрәтләнә башлауы менән Сурағолдарҙы хәтерләтә. Шатморат – “фольклорға, конкрет алғанда, “Йүркә Юныс”, “Шаһибәрәк”, “Бейеш” кеүек тарихи йырҙарҙағы ҡасҡындар - социаль тигеҙһеҙлеккә ҡаршы көрәшеүсе батырҙар образына барып тоташа”[54] - тип билдәләй М.Хәмиҙуллина. Яҙыусының ижади хыялы

[54] Хәмиҙуллина М. Б.Бикбай ижады. -Өфө: Башҡ. к. н., 1987. -72-се бит.

менән тыуҙырылған геройының, тимәк, тарихи ерлеге бар. Фольклорҙан үҫеп сыҡҡан Шатморатты тормоштоң революцион үҫешенең төп хәрәкәт иттереүсе көсө, ваҡиғаларҙың ойоштороусыһы итеп биреү уңышлы итә. Б.Бикбайҙың геройында ла, С.Мифтаховтың “Зимагорҙар” пьесаһындағы Ғайса образында ла беҙ халыҡҡа бәхет, азатлыҡ яулап алып бирмәйенсә, шәхси бәхеткә ирешеп булмаясағына инанып көрәшкә күтәрелгән милли-социаль типтарҙы күрәбеҙ.

Әҫәр башында төп герой Шатмораттың хәрәкәтен Б.Бикбай һөйгәне Ҡарлуғасҡа булған мөхәббәте аша һүрәтләй башлай. Халыҡ яҙмышының шул моменттағы хәлен яйлап әҫәр туҡымаһына герой яҙмышы менән параллель индерә барыуы ла характерҙы көрәшкә күтәргән сәбәптәр булып аңлашыла. Әҫәр башында, мәҫәлән, ҡыҙҙарҙың ēләк йыйыу эпизоды, лирик пландағы башланыш, социаль яңғыраш ала. Халыҡтың был ерҙәре алпауыттарға һатылғанлыҡтан, ул территорияға инеү, ēләк йыйыу тыйыла. Артабан Рыҫҡол ғаиләһен һүрәтләү, уның түләмәгән яһаҡтары өсөн өйҙәренән әйберҙәрен алып сығыу, ғаилә башлығы Рыҫҡолдо, Ҡарлуғастың атаһын, төрмәгә алып китеү, бер-береһенә бәйләнешле, бер-береһен тулыландырып килгән ваҡиғалар үҫтерелеше – конкрет тарихи шарттар ул. Был күренештәр барыһы ла Шатмораттан тыш бара кеүек. Әммә урманда ҡасҡын булып йөрөһә лә, геройҙың әленән-әле алғы планға сығып, ситуациялар менән хәбәрҙар булып тороуы Шатморатты пассив герой итмәй. Автор параллель сюжеттарҙы ана шулай яйлап-яйлап кульминацияһына еткерә. Ул кульминация – характерҙың үҫешенең дә юғары нөктәһе.

С.Мифтаховтың “Зимагорҙар” драмаһында ла конкрет бер урындағы ваҡиғаларҙы тығыҙ итеп һүрәтләүе - Ғайса, Фәсхи кеүек Шатморат типтарының формалашыуын күрһәтеүҙең отошло ысулы. Башҡорт сезонлы эшселәренең шахталағы эш, йәшәү шарттарын бирә автор. Эшселәрҙең үҙен уратып алған мөхиткә битарафлығы, йәшәүҙәренең маҡсаты булмауы, социаль инертлыҡҡа бирелеүе күренә. Шулар араһында Ғайсаға эшселәр айырым бер хөрмәт менән ҡарай. Ул башҡалар һымаҡ буш ваҡыттарын кәрт уйнап үткәргән, эш хаҡын һуңғы тиненә тиклем эсеүгә һалған зимагор түгел. Тормошҡа ҡараштары аныҡ булыуы менән айырылып тора. Һөйгәне Маруся, бәхет эҙләп, башҡа яҡтарға сығып китергә тәҡдим иткәс, “кояш бөтә ерҙә лә бер төрлө яҡтырта”,- тип яуап бирә. Ҡотолғоһоҙ булып күренгән ситуацияны С.Мифтахов Ғайсаның һәм уның кеүектәрҙең күтәрелеп сығыу сәбәптәре итеп бирә.

Шулай итеп, актив герой милли мөхит менән тығыҙ бәйләнештә бирелә. Былдай характерҙарҙың үҫешендә, хәрәкәтендә халыҡтың героик көрәш тарихы сағыла. Шундай образдар үҙҙәре тормошто үҙгәртә алыусы, тарихты яһаусылар, Октябрь революцияһы дауылы алды кешеләре. Д.Юлтыйҙың “Ҡан” романындағы Булат кеүек геройҙарҙа халыҡтың азатлыҡ яулау өсөн көрәшкә Октябрь кеүек дауыл һөҙөмтәһендә күтәрелеүе бирелһә, тарихи әҫәрҙәр геройҙарында был көрәштең героик тарихы асылды. Былдай характерҙарҙа авторҙар кешене прогрессив күренештәрҙең, “бөтә ваҡиғаларҙың үҙеге һәм тәүсәбәпсеһе”[55] итеп раҫланы.

Кеше – тарих хәрәкәтен тиҙләтеүсе, үҙгәртеүсе икәне тарихи әҫәрҙәрҙә һүрәтләнгән реаль шәхестәр типтарында ла күренә. Яҙыусыларҙың тарихи шәхестәр образына мөрәжәғәт итеүе уларҙың биографияһын һөйләү түгел, ә халыҡтың уй-теләктәрен сағылдырыу, ваҡиғаларҙың әһәмиәтлелеген, типиклығын биреү, заманға бәйле актуаль яҡтарын күтәреү. Шатморат, Айсыуаҡ кеүек образдар менән бер үк кимәлдә “тарихи шәхестәрҙең индивидуаль йөҙөндә дәүеренең типик һыҙаттарын туплаған ысын реалистик характерҙар”[56] асыла.

М.Буранғоловтың “Ҡараһаҡал” драмаһында Ҡараһаҡал образында милли-азатлыҡ көрәшсеһе һынлана, Ҡараһаҡалды башта актив хәрәкәткә килтергән сәбәптәр социаль сығышы һәм “урындағы шарттар” икәнлеге дәлилләнә: “Атай, урманда ҡасҡы булып тыуып үҫтем, ҡасҡы булып үлеп булмаҫ. Урманда булмаһа, ҡайҙа булһа ла ошо ил талаусы баяр, тархандарға ҡаршы уҡ атыусы барҙыр, ул минең дуҫым”[57],-ти. Әҫәрҙең башында үҙен ҡаҙаҡ ханы Зүнгерҙең улы Солтанморат тип таныштырып, ҡаҙаҡ ханы Әбелхәйерҙән өҫтәмә көс-ғәскәр һорарға барып шул рәүешле көс туплап йөрөүендә актив хәрәкәте менән инеп китһә лә, һуңынан

[55] Баимов Р. Башкирский историко-революционый роман: Учебное пособие. -Уфа: Издательство Башгосуниверситета, 1980. -С.23.
[56] История русской советской литературы. 2-й том. 1930-1941. -М.: Наука, 1979. -С.141.
[57] Буранғолов М. Таштуғай. -Өфө: Китап, 1993. -74-се бит.

сюжет ҡоролошо барышында образ бөтөнләй үҫтерелмәй. Актив халыҡ массаһы алғы планға сыға, характер асылыу логикаһының әҙмә-эҙлеклеге һүлпәнәйә. Мәҫәлән, бер бәрелештән һуң, халыҡ еңелә, шулай ҙа актив, бунтарь масса ҡабат күтәрелеү өсөн Ҡараһаҡал кеүек етәксе көтә, әммә төп геройҙың көрәш тактикаһы күрһәтелмәй. Шуға күрә характер һыҙаттары тулыһынса асылып етмәй.

Халыҡтың революциянан һуңғы яңы осор тормошонда ҙур роль уйнаған М.Ғафури (С. Ҡудаш "М.Ғафури"), Ленин, Чапаев һ.б. кеүек шәхестәр – конкрет бер кеше образы ғына булмайынса, үҙ эҙмыш-ынтылыштарында, уйҙарында, хәрәкәттәрендә халыҡ яҙмышы менән булыуҙарында дәүерҙәренең һыҙаттарын дөйөмләштергән характерҙар. Ҡараһаҡалда халыҡтың көрәшсе рухы һынланһа, М.Ғафури образында халыҡтың интеллектуаль йөҙө, рух үҫеше һыҙатлана.

Тарихи әҫәрҙәрҙәге геройҙарҙың көрәшендә быуындарҙан-быуынға килгән күсәгилешле героик традицияларҙың дауам ителеше сағыла. Был геройҙы милли ерлек менән тағы ла нығыраҡ бәйләй. Сөнки ана шул традицияларҙы йөрөтөүсе "элекке ҡарт боласылар" типтары күп әҫәрҙәрҙә хәрәкәт итә. Шуға күрә уларҙың бер типик күренеш булыуын инҡар итеп булмай. Яҙыусыларҙың һәр ошондай образы үҙ яҡтары менән асыла, Ҡормой ҡарт (Б.Бикбай "Ҡарлуғас"), Сағанбай (Ҡ.Даян "Таңсулпан"), Көнбикә (М.Буранғолов "Ҡараһаҡал"). А.С.Пушкин "Капитан ҡыҙы" әҫәренә индереп ебәргән ҡарт боласы телһеҙ башҡорт образын башҡорт яҙыусылары өр-яңы юҫыҡта хәл итә. А.С.Пушкин үҙенең был геройында күп тапҡыр баш күтәргән, имгәтелгән башҡорт халҡын дөйөмләштерһә, башҡорт әҙиптәре ул геройҙарҙа бунтарлыҡ рухының һынмауын, көрәштең эстафетаһын йәштәргә еткереүен күрһәтә. Йәш сағында байҙа көтөү көткән, Салауат яуында ҡатнашҡаны өсөн ҡулдары, ҡабырғаһы һындырылып имгәтелгән Сағанбай (Ҡ.Даян "Таңсулпан") Айсыуаҡҡа унын сығышын, ҡарт фетнәсе Ҡолбай улы булыуын, уның атаһының көрәштә һәләк булыуын еткерә. М.Буранғоловтың "Башҡорт туйы" драмаһында Юлдыбайға ҡарағанда ла көслөрәк рухлы итеп бирелгән оло быуын вәкилдәре Гөлбикә, Үтәғол халыҡтың актив, бунтарь рухын дөйөмләштереп киләләр. Әҫәр башында уҡ йәшәп ятҡан тәртиптәр менән



килешмәүҙәре, Әлекәй кеүек йомшаҡ характерлы, байҙар тәрилкәһен ялап йөрөүсе аумаҡайҙарҙың күҙен асырға тырышыуҙары, халыҡтың стихиялы сығыштарын дөйөм халыҡ көрәшенә әйләндереп ебәреүгә кәрәклеген төшөнгән, тәжрибәле булыуҙары менән айырылып торалар. Б.Бикбайҙың "Ҡарлуғас" драмаһындағы "халыҡты ҡотортҡаны өсөн"[58] биш йыл һөргөндә йөрөгән, "яуҙар күргән"[59], тәүәккәл, көрәшкә һәр саҡ әҙер тороусы Ҡормой кеүектәр тибында йәш батырҙарҙың кәңәшсеһе, көрәшкә дәртләндереүсеһе, көрәш тактикаһына өйрәтеүсе, үҙ эштәренең дауам иттереүселәрен күтәреүселәр дөйөмләштерелә.

Ошо уҡ драмала тағы ла бер шундай образ бар. Ул Көнбикә. Көнбикәнең башҡорт егеттәренә мөрәжәғәт иткән: "Ирҙәр, ниңә үҙ һүҙегеҙҙе әйтмәйһегеҙ? Әллә һеҙҙә намыҫ үлгәнме? Әллә һеҙ бисәләрегеҙҙең яуға башлап сығыуҙарын көтәһегеҙме? Нимә кәрәк, ни етмәй? Күпме әсәләр бөгөн ҡан-йәш түгә, ҡаты хурлыҡ күтәрәләр. Беҙ ни өсөн улдар үҫтерҙек, ни өсөн күкрәк һөтөбөҙҙө бирҙек? Беҙ бит уларға бер нимәбеҙҙе лә аяманыҡ, ниңә улар үҙ йәндәрен аяйҙар, яҡлап сыҡмайҙар беҙҙе? тигән һүҙҙәрендә героик рухты һаҡлаған ҡатын һәм күп яуҙар күргән Ватан-әсә образы дөйөмләштерелә кеүек:

Көрәшсе-етәксе өсөн тарихи шарттар өлгөргән һәм уларҙы халыҡ үҙенең активлығы менән билдәләй, шәхескә ышаныс менән үҙенең яҙмышын тапшыра. Ул көрәштәрҙең диалектик күсәгилешлегенең сағылышы геройҙы милли мөхит менән тығыҙ берлектә биреүгә алып килә. Б.Ҡадыров (А.Таһиров "Ҡыҙылгвардеецтар", "Ҡыҙылармеецтар"), Ғимай Басыров (И.Насыри "Күҙәй"), Ғинди Сәғиҙуллин (А.Карнай "Беҙ ҡайтырбыҙ"), Һөйөнөс, Зәлифә, Арыҫланғәле (Ғ.Дәүләтшин "Коммуна"), Ә.Вәлиҙең "Нам" хикәйәһе, Б.Хәсәндең "Перекоп" циклынан очерк һәм хикәйәләренең төп геройҙары кеүек яңы типтарҙа халыҡ яҙмышы өсөн көрәштең яңы этабы сағыла. Шатморат кеүек тарих төпкөлөндәге ваҡиғалар геройҙары менән яңы тип большевик-революционерҙарҙы һүрәтләүҙә шундай

---

[58] Бикбай Б. Һайланма әҫәрҙәр: 5 томда: 4-се том: Пьесалар. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1972. - 13-сө бит.
[59] Шунда уҡ. -21-се бит.

уртаҡлык, дөйөмлөк бар. Характерҙары көрәштә асылған Билал Ҡадыров, Ғинди Сәғиҙуллин, Ғимай Басыров кеүек геройҙарҙың тарихи үткәне Шатморат кеүек типтарҙа һынланыш ала. Замандың героик рухы үткәндәрҙең дә героик сағылышын талап итте. Һәм, киреһенсә, тарих төпкөлөндәге ваҡиғалар геройҙарында Билал Ҡадыров кеүектәрҙе көрәшсе итеп күтәргән сәбәптәрҙең милли тамырҙары, характерҙарҙың милли һыҙаттары юлланды. Уларҙы үҙ синыфының ынтылыштары менән йәшәү, "көрәш һәм ирек идеалы"[60] берләштерә.

Замандың көрәшсе геройҙарын асыу оҫталығы төрлө яҙыусыла төрлө булды. Улар бер-береһен тулыландырып киләләр. Ҡайһылыр характерҙар фронт һәм яу юлында ғына асылһа, ҡайһыларын шәхси планда ла бирергә ынтылыш бар. Мәҫәлән, Билал Ҡадыров, Ғинди Сәғиҙуллин кеүек геройҙарҙы асыу юлдары төрлө.

А.Таһиров төп геройы Билал Ҡадыровтың характерын Ҡыҙыл гвардия ойоштороп йөрөүендә, күберәк фронт юлдары менән бәйле һүрәтләй. Билал ваҡиғалар артынан "эйәреп" йөрөүсе герой булараҡ иҫтә ҡала. Әле Стәрлетамаҡ, әле Ырымбур яҡтарында төрлө бәрелештәрҙә ҡатнашып йөрөүендә асыла.

И.Насыри һәм А.Карнай геройҙарының эшмәкәрлеген, ваҡиғалар ағышын бер урынға бәйләп бирергә тырыша. Тотош Башҡортостанда барған ваҡиғаларҙы Күҙәй кантоны һәм Күлбай волосы кеүек конкрет бер төбәк хәлдәре аша биреүендә геройҙарҙың хәрәкәте конкрет төҫ ала барыуы күренә, милли ерлеккә нығыраҡ бәйле булыуҙары асыҡ һыҙатлана бара. И.Насыриҙың "Күҙәй" романында Ғимай Басыровтың, А.Карнайҙың "Беҙ ҡайтырбыҙ" повесында Ғинди Сәғиҙуллиндың эш-хәрәкәтен бер төбәк менән бәйле ваҡиғаларҙа биреү образдарҙың характер һыҙаттарына ла конкретлыҡ. бирә. Был әҫәрҙәргә герой хәрәкәт иткән шарттарҙы конкрет образдарҙа, характерҙарҙа биреү, сюжетты эҙмә-эҙлекле, киҫкен итеп үҫтереү хас. Ғимай Басыровтың, Ғинди Сәғиҙуллиндың үҙ эштәренә фанаттарса бирелгән коммунистарҙың эшмәкәрлектәре совет власына ҡаршы көстәр менән көрәшенең кульминацияһына -

[60] Минһажетдинов М. Ҡәләмендә ҡөҙрәт бар. -Өфө: Китап, 1995. -53-54 се биттәр.



ҡоралы бәрелештәргә барып етеүе сағылдырыла.

А.Таһиров, И.Насыри романдарының конфликтын характерҙар бәрелешенән бигерәк, ҡапма-ҡаршы идеологиялар көрәше барлыҡҡа килтерә. Билал Ҡадыров Ҡыҙыл гвардия отряды ойоштороп, чех мятежниктары, Дутов, Колчак һөжүмдәрен кире ҡағыуҙа асыла. Ғимай Басыров Күҙәй төбәгенә хәрби комиссар итеп ебәрелгән һәм Ҡарабаш, Зәки Вәлиди етәкселегендәге милли идеологтар ҡаршылығы менән осраша.

А.Карнай үҙенең повесында синфи-социаль конфликтты характерҙар бәрелеше итеп биреү оҫталығына ирешә. Был бәрелеш киҫкен һәм трагик яҡтары менән асыла. Автор әҫәрҙә Ғинди Сәғиҙуллин һәм Камалов кеүек ике тип коммунистың характерын индереп быға тиклем ҡалыплашҡан идеологик төркөмдәр көрәшен генә биреүҙән ҡотолорға ынтыла. Ғинди Сәғиҙуллин – ҡыҙыу характерлы, совет власы дошмандарына киҫкен ҡарашлы, һиҙгер күңелле, кәрәкһә, наган менән дә ҡурҡытып алыу тактикаһы менән дә эш итеүсе. Камалов – тыныс холоҡло, әкренерәк, йайлап, уйлап эшләргә яраҡлан коммунист-етәксе тибы.

А.Карнай үҙенең геройҙарында шул осор боролошло ваҡиғаларҙы ҡараштар бәрелеше итеп тә бирә. Ғинди Сәғиҙуллиндың атаһы Нәрттин ҡарт менән мөнәсәбәттәре аша күренә ул. Нәрттин ҡарт улы Ғиндиҙы ҡалала муллалыҡҡа уҡытып, ауылдың уҡымышлы кешеһе итеп күрергә теләгән. Ғинди большевик-революционер булып ҡайтҡас, атаһы уға һәр ваҡыт асыулы ҡарашлы, ата менән ул араһында киҫкен мөнәсәбәттәр урынлаша.

Совет власына ҡаршы Әхмәҙулла кеүектәр менән большевиктарҙың бәрелешендә Ғинди Сәғиҙуллиндың һәләкәтен биреүендә лә автор элекке традицион концепцияларҙан тайпылып, шул дәүерҙең трагик яҡтарын бирә. Ғимай Басыров кеүек геройҙарҙа ваҡиғаларҙы күңел донъяһы менән бәйләү бөтөнләй юҡ тиерлек, А.Карнай йыш ҡына геройының күңел торошона ла мөрәжәғәт итә. Повеста Ғинди Сәғиҙуллинды Галинаға булған мөхәббәте аша ла һүрәтләүгә ынтылыш бар. Шулай ҙа был типтарҙа геройҙың социаль характер һыҙаттары ҡалҡыуыраҡ бирелә, яңы заман кешеһен урындағы тарихи шарттар социаль тип итеп кенә формалаштырыуы күренә, милли мөхит, милли тамырҙарҙы юллауға иғтибар, йәки

геройҙы актив хәрәкәткә килтергән сәбәптәр юлланмай. Шуға күрә лә был осор күп кенә әҫәрҙәргә Билал Ҡадыров, Ғимай Басыров кеүек геройҙар менән бергә “идея етәксеһе”[61] типтары килеп инә. Был шул дәүергә характерлы күренеш булып һәр бер әҫәрҙә тиерлек осрай.

Ғимай Басыров кеүек яңы тип большевиктарҙы “ситтән килгән” тәжрибәле, политик аңы юғары коммунист революцион көрәш тактикаһына өйрәтә. “Йыш ҡына ул рус милләтенән булып”[62], коммунист-етәксе булып һынлана. Революция алды йылдарын сағылдырған мөхит йыш ҡына социаль инертлыҡҡа бирелгән, дини-патриархаль тәртиптәр менән баҫтырылған һәм яңы геройҙа шул инертлыҡтан халыҡты сығарып, синфи аңын үҫтереүҙә кәңәшсе, тәжрибә туплаған рус коммунисы етәкселек итә, этәргес көс булып бирелә. Артабанғы яңы тормошто урынлаштырыуҙа ла улар - ваҡиғалар башында тороусы, ойоштороусы образдар. Мәҫәлән, Д.Юлтыйҙың “Ҡан” романында Надеждин, эшселәр араһында тәжрибә туплап килгән Новиков, А.Таһировтың “Һалдаттар” романында Миша Холодовский, Михаил Кирш, Кирилл Суров, “Ҡыҙылгвардеецтар”, “Ҡыҙылармеецтар” дилогияһында Сверин, Шадрин, Суров, И.Насыриҙың “Күҙәй” романында Путилов заводы эшсеһе, элекке һалдат Тайнов, А.Карнайҙың “Беҙ ҡайтырбыҙ” повесында Александр Иванович Чернявский, С.Мифтаховтың “Зимагорҙар” драмаһында Федор идея етәксеһе булып әҫәрҙәргә индерелгән. Новиков башҡалар араһында тура һүҙле, килешмәүсән бунтарь характерлы булыуы менән айырылып тора. Тирә-яҡтағы ғәҙелһеҙлектәргә һалдаттарҙың күҙен аса. Ҡыйыу булғаны өсөн дә, Надеждин, Новиков кеүектәргә Булат һоҡланып ҡарай.

Заман идеологияһының “бәләкәй халыҡтарҙа айырыуса ныҡ йоғонтоһо, әлбиттә, башҡа рухи, милли ҡиммәттәрҙе тоноҡландырыуға килтерә. “Йыш ҡына был геройҙар әҫәрҙәрҙән “үҙенең миссияһын үтәгәс” алып ташланып, характеры үҫтерелмәй Тайнов (И.Насыри “Күҙәй”), Федор (С.Мифтахов “Зимагорҙар”), йә тормошсан иҫтә ҡалырлыҡ һыҙаттары менән асылмай, уларҙы әҙәби образ булараҡ, үҙенсәлекле сифаттар менән йәнләндереп еткерә

[61] Татар совет әҙәбиәте: -Казан: Тат. китап нәшриәте, 1981. -68-се бит.

[62] Баимов Р. Шаг в зрелость. -Уфа: Башк. книжное издательство, 1975. -С.77.



алмау әҫәргә мотлаҡ индерелергә тейешле образ”[63] тәьҫире ҡалдыра. Мәҫәлән: А.Карнайҙың “Беҙ ҡайтырбыҙ” повесындағы Александр Иванович Чернявский әҫәрҙең теге йәки был эпизодында ғына килеп сығып, әҫәр сюжеты үҫтерелеше барышында әллә ни ҙур роль уйнамай. Идея кәңәшсеһе булараҡ уйланылған образ уҡыусы хәтерендә ҡалырлыҡ индивидуаль һыҙаттары аша асылмаған.

Башҡа әҫәрҙәрҙән айырмалы, С.Мифтахов революцион эштәрҙе ойоштороусы флагман типтар – рус коммунистары концепцияһына яңылыҡ та алып инә. Икенсерәк планда хәл итә: “Зимагорҙар” пьесаһында рус эшсеһе, машинист, тәжрибәле Федор образын индерһә лә, Ғайса ла шул уҡ политик, синфи аңы юғары булыуы менән Федорға тиң. Ғайса образы менән милләттән айырылып сыҡҡан шундай көрәшсе геройҙар үҙенең халҡын “революционлаштырыуҙа” етәксе булып тороуын сағылдыра. Тап шундай характерҙар – “тимер кешеләрҙең” халыҡ араһында таянысы, терәге булыуын күрһәтә. М.Ғафуриҙың “Шағирҙың алтын приискыһында” повесында “Ҡан” романы һалдаттарынан айырмалы революцион аңы формалашыуы, халыҡтың көрәшсе традициялары йоғонтоһо күрһәтелә: ул – Сибәғәт бабай образы. Төп герой шахтала Сибәғәт бабай менән эш урынының тап килеүенә һөйөнөп тә ҡуя. Сөнки ул унда терәк тапҡандай. Сибәғәт бабай бик күп шахталарҙа эшләгән. Шахтерҙарҙың эштәрен ҡарап, күҙәтеп йөрөүсе штейгерҙарҙың байҙарға ярамһаҡланып йөрөүселәр икәнен дә төшөнгән. Элек эшләгән приискыһында шуларҙың береһенә һуғып, төрмәлә лә ултырып сыҡҡан. Приискыла коммунист егеттәрҙең агитацияларын да ишетергә тура килгән. Коммунистарҙың Сибәғәт кеүек эшселәргә бергәләшеп, үҙ байҙарына ҡаршы көрәшергә кәрәклеген йәшерен генә рәүештә төшөндөрөп йөрөгәндәрен һөйләүе төп геройҙың тормошҡа күҙен аса. С.Мифтаховтың “Зимагорҙар” драмаһында ла бәхет эҙләп приискыға килгән Күдрәшкә реаль тормош ҡырыҫлығының әсе хәҡиҡәтен төшөндөрөүсе, тормош тәжрибәһен туплаған Кинйәбай ҡалҡыу ғына бирелә.

Тимәк, яңы тип кеше булып формалашасаҡ революция

[63] Баимов Р. Шаг в зрелость. -Уфа: Башк. книжное издательство, 1975. -С.77.

алды һәм унан һуңғы осорҙарға тура килгән геройҙарҙы юллағанда ла көрәштең милли тамырлы булыу традицияларын күрһәтеү урын ала башлай.

Шулай итеп, тарихи әҫәрҙәрҙәге геройҙарҙа ла халыктың эпик үткәненең төрлө яҡтары сағылыш тапты.

Утыҙынсы йылдар әҙәбиәтендә осор шарттары менән бәйле герой концепцияһын хәл итеүҙә шундай етешһеҙлектәрҙе лә күрһәтергә була. Геройҙы ниндәйҙер кимәлдә идеаль образға яҡынайтып бирергә тырышыу күҙәтелә. Ғ.Дәүләтшиндың “Ялҡын ҡосағында” хикәйәһендә төп герой Айбулат - тимер юл мастерскойындағы ударсы отрядтың етәксеһе. Ул үҙ отряды менән срогынан биш көн элек алты паровозды ремонттан сығарырға һүҙ биргән. Шул бурысты үтәп йөрөгән көндәрҙә өйөндә янғын сығып, ғаиләһе шәхси бәләгә тарый. Ғаиләһе бәләнән ҡотҡарылып ҡалыуын белгәс, тәүге күңел реакцияһы сағылдырыла: “Ни булһа, ул булды. Минең бригада биш көн элек үҙенең эшен бөтөрҙө. Уттан үҙебеҙ ҙә, балаларыбыҙ ҙа ҡотолдо. Ҡалған яғына совет ташламаç,- ти. Үтә сәйәсәтләштереү, социаллаштереү, вульгарлаштырыу геройҙың тип, индивид, характер булараҡ һынландырылыуына ҙур ғына зыян килтерә. Мәçәлән: С.Мифтаховтың “Һаҡмар”, “Дуçлыҡ һәм мөхәббәт” драмаларында Айһылыу өсөн больницала ауырып ятҡан улының хәл-торошонан бигерәк яҙғы сәсеүҙә тракторсылар ярышында ҡатнашыу, Юлай өсөн икеһе бер көндә булған ваҡиғаларҙың – һөйгәне Айһылыуҙың юғалыуы һәм колхоз мөлкәтенең яндырылыуы – икенсеһе мөһимерәк. Геройҙа тормошто артыҡ идеаллаштырыу, ҡаршылыҡтарын шымартып биреү ҙә образдың эшләгән эштәренә артыҡ ышандырмай. Ғ.Дәүләтшиндың “Коммуна” романынан өҙөктәрҙә Ҡыҙыл Армия һалдаты Арыçланғәленең хәрби хеҙмәттә йөрөгәндә ап-аҡ икмәк ашарға өйрәнеп, әсәһе бешереп ебәргән күмәсте үҙһенмәй ултырыуын биреү ваҡиғаларҙы реаллектән айыра.

Яҙыусыларҙың геройҙарының социаль-ижтимағи эшмәкәрлеген алғы планға ҡуйыуы, йыш ҡына күңел кисерештәрен “аңлы рәүештә” баçырып ҡалдырыуы - замандаш концепцияһын хәл итеүҙәге быңдай характерҙағы ҡытыршылыҡтар башҡа халыҡтар әҙәбиәтенә лә хас. В.Б.Окорокова билдәләүенсә: “Утыҙынсы йылдар бөтә милли әҙәбиәттәргә лә хас типик күренеш – абсолютлаштырылған социаллек булды. Тулы ҡанлы тормошсан характер булыуы өсөн мотлаҡ булған индивидуаль-психологик һыҙаттарҙы ҡорбан итеү – шул осор бөтә совет әҙәбиәте өсөн характерлы”[64].



Тарихты кешеләр яҙмышында бөтөн ҡаршылыҡтары менән ҡалҡыу итеп сағылдырыу йәһәтенән Ғ.Хәйриҙең “Боролош” романы үҙенсәлекле. Әҫәр әле вульгар социологизм рамкаларына ҡыçылмаған. Әҫәрҙең төп иғтибарға лайыҡ һыҙаттары: “... айырым кешеләрҙең яҙмышы, төрлө социаль төркөмдәр, замандың иң актуаль проблемалары, тарих хәрәкәте менән бәйләп бирелеүендә, тормош картиналарының киçкен контраçҡа ҡоролоуында, кеше яҙмышында ғәжәйеп боролоштарҙы һүрәтләүендә”[65] Ысынбарлыҡ күп төрлө әҙәби типтар аша күп ҡырлы булып килеп инә: Шәмсиҙең яңы тормоштоң социаль ваҡиғалары һөҙөмтәһендә яңы кеше булып формалашыуы сағылһа, Баһау Нуриманов, Зәки Мәүлетов образдарында революцион үҙгәрештәрҙе ойоштороусылар бирелә. Зәки Мәүлетов трагедияһында яңылыҡтың еңел генә төҙөлмәүе һүрәтләнә. Солтандың мөхәббәтендә, Сәхибәнең яҙмышында тормош фажиғәле яҡтары менән дә асыла, Ғариф образына ла ул традицион карикатур буяуҙар һалмай, тормоштағыса күҙ алдына баçырлыҡ индивидуаль характер итеп бирә һ.б.

Милли әҙәбиәттең милли характерлы геройын биреү концепцияһы социалистик идеология, осор һыҙаттары менән нык бәйле булыуы күҙгә ташлана. Яңы тип кешенең характерында милли традицияларҙың, уй-тойғоларҙың башҡа милләттәрҙең уй-тойғолары менән гармоник бергә ҡушылыуын биреү алғы пландараҡ тора. Йәки ул милли характер булыуға ҡарағанда, күберәк интернациональ һыҙатлы итеп һүрәтләнә. Ошо һыҙаттар йыш ҡына уның миллилеген күмеп китә. Шул осор әҙәбиәтенә ҡарата тәнҡиттә: “Милли культура байлыктары социализм һәм интернационализм дингеҙенә батырылған булыуын граждандар һуғышы осорон сағылдырған әҫәрҙәрҙә күрергә мөмкин”[66] тигән фекерҙәр бар. Образ алдына дөйөм маҡсаттарҙы ҡуйыу уның милли характер булараҡ

[64] Окорокова В.Б. Пути и проблемы развития прозы в литературах народов Якутии // Автореф. дисс. на соиск уч. ст. д. филн. наук. -Уфа: БГУ, 1999. -С.22.
[65] Вахитов Ә. Таланттың асылы. -Өфө: Башҡ. китап нәшриәте, 1972. -38-се бит.
[66] Агаев А. Социалистическая национальная культура. -М.: 1974. -С.12.

һүрәтләнеүенә әҙ иғтибар бирелеүгә алып килә.

Яңылыҡтың еңеүен рухланып ҡаршы алған яңы кешенең үткәндәре менән бәйләнеште өҙөүе, милли тамырҙарҙан айырылыуы ҡайһы бер әҫәрҙәрҙә прогрессив күренеш итеп ҡабул ителә: К.Мәргәндең “Ҡунаҡкол ҡарт”, “Экспедиция” хикәйәләре геройҙары шулай итеп бирелгән: Ҡунаҡкол ҡарт ейәненә күрһәтергә һуҡа эҙләп йөрөй, һәр бер өйгә керә, таба алмай. “Экспедиция” хикәйәһендә музей директоры Еникеев музей өсөн халыҡтың боронғо милли кейемдәрен һәм башҡа экспонаттар эҙләп сығып китә, шулай уҡ бер кемдән дә ул әйберҙәрҙе таба алмай. Былар, әлбиттә, тормоштан реаллектән алыҫ итеп сағылдырыу ине: “Был осраҡта автор тормош ысынлығы менән иҫәпләшмәй, алдан иҫәпләнгән схема менән эш итә, ул хикәйәләрҙә үткәндәргә ҡарата нигилизм саҡтылары ла һиҙелеп ҡала: бер-нисә генә йыл эсендә халыҡтың быуындан-быуынға килгән традицияларының, милли йәшәйеш атрибуттарының юҡҡа сығарылыуына ҡыуаныс ауазы ла яңғырай”[67].

Шундай ваҡытлыса ҡытыршылыҡтар булыуға ҡарамаҫтан, был осор әҙәбиәте яңы эпоханың геройына нигеҙ һалды. Утыҙынсы йылдар күп ҡырлы ысынбарлығының герой характерында һынланышы – оҙайлы, ҡатмарлы, әкренләп үҫеүсе, бәхәсле процесс. Яҙыусы ижад эшендә билдәле бер рамкаларға һалынған схема менән эш итмәй: кеше һәм уны уратып алған мөхитте өйрәнеү сәнғәтенең билдәле бер ҡалыптарға һалынған рецепты юҡ. К.Федин билдәләүенсә: “Совет әҙәбиәтенең дөйөм картинаһы уның үҙендә – әҫәрҙәренең эсендә. Беҙгә романтизм, символизм һәм башҡалар хаҡында асыҡ күҙ алдына килтерерлек картина бар, тотош совет әҙәбиәте тураһында ла дөйөм картинаны бирегеҙ, тиҙәр. Ундай әҙәбиәтте барлыҡҡа килтереү һәр милләттең яҙмышында һис шикһеҙ конкрет-тарихи процесс Ул яңы кешенең үҫеше менән билдәләнә. Яҙыусы үҙе үҙендә шул яңы кешене тәрбиәләй, ул булып йәшәй һәм сәнғәткә яңылыҡ индерә”[68].

Утыҙынсы йылдарҙа яңы герой формалашыуы уның рух диалектикаһын, эмоциональ яҡтарын һүрәтләүгә ҡараштар ординар

[67] Башҡорт әҙәбиәте тарихы: 6 томда: 4-се том: 1941-1955. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1993. -368-се бит.
[68] Федин К. Писатель. Искусство. Время. -М.:Советский писатель, 1957. -С.514-515.



булмаған шарттарҙа бара. Әҙәбиәт оҙаҡ ижади эҙләнеүҙәр осорон кисерә. Герой характерын биреүҙә социаль детерминизм ҡараштары өҫтөнлөк алыуын күрергә мөмкин.

**Беренсе бүлек буйынса һорауҙар һәм эштәр:**

1. “Һәр заман геройын тарихи-социаль шарттар тыуҙыра” тигәндән һеҙ нимәне аңлайһығыҙ?
2. Утыҙынсы йылдар башҡорт әҙәбиәтендә замандың яңы ыңғай геройын биреү үҙенсәлектәре ниндәй?
3. Был осор башҡорт әҙәбиәтенең ыңғай герой типтарын һанап сығығыҙ.
4. Утыҙынсы йылдар башҡорт әҙәбиәтендә ҡатын-ҡыҙҙар образдарын замандың төп геройы итеп биреү сәбәптәре нимәлә?
5. Утыҙынсы йылдар тарихи әҫәрҙәрҙәге геройҙарҙы һынландырыу концепцияһы хаҡында нимәләр әйтә алаһығыҙ.
6. “Һ.Дәүләтшинаның “Айбикә” повесында яңы кеше проблемаһы” темаһына реферат яҙырға.

## Икенсе бүлек

## Осор ҡаршылыҡтарының әҙәби типтарҙа һынланыш концепцияһы

Һәр тарихи эволюция ҡаршылыҡтарһыҙ булмай. Йәмғиәт, тирә-яҡ мөхит тик ыңғай, яҙыусының күңеленә яҡын, идеалына тап килгән күренештәрҙән генә тормай. Ниндәй генә быуатты алып ҡараһаң да, тормош - ул ҡаршылыҡтар көрәше. Ҡаршылыҡтар - ул йәмғиәттең һәм тормоштоң хәрәкәт иттереүсе көсө. Бында донъяны кәтғи революцион идеяларҙан, синфи позициянан сығып бүлеп ҡараған ҡаршылыҡтар тураһында ғына түгел, ғөмүмән, йәшәйештәге ҡаршылыҡтар күҙ уңында тотола. Әйткәндәй, синфи ҡаршылыҡтар - шул дөйөм ҡаршылыҡтарҙың бер формаһы, төрө, сағылышы. Тимәк, ул ҡаршылыҡтар һәр осорҙа, һәр йәмғиәттә үҙенсә төҫ, төрлө форма ала. Яҙыусы үҙ әҫәрендә ыңғай идеяларҙы яҡлау йәки уларҙың йәшәүгә хоҡуғын билдәләү менән бергә кире күренештәргә лә күҙ йомоп ҡарай алмай. Мәңгелек ҡаршылыҡтар

көрәшенең үҙ осорона хастарын дөйөмләштереп, типиклаштырып уҡыусы хөкөмөнә бирә. Әҫәрҙең конфликтын да ул кире күренештәргә мөнәсәбәте, ҡараштар системаһы, концепцияһынан сығып ҡора. Теге йәки был әҫәрҙең конфликт нигеҙендә заман ҡаршылыҡтары һүрәтләнеш ала.

Тормошто әҙәбиәттә күп ҡырлы итеп сағылдырыу өсөн образдар галереяһында ыңғай геройҙар менән бергә тормош ҡаршылыҡтарын дөйөмләштергән әҙәби типтар булыуы ла мөһим. Характерҙар ошо көрәш процесында, ҡаршылыҡтар менән бәрелешендә асыла. Һәр бер ыңғайға уның антиподы була.

Хәҙер әҙәбиәт совет идеологияһы осорондағы тар сикләүҙәрҙән ҡотолоп, эстетик асылына ҡайтты. Тик ҡара буяуҙарҙа ғына һүрәтләнгән кире геройҙар тигән төшөнсә киңәйҙе. Ул тормошсан ҡатмарлы шәхес булып һүрәтләнә башланы.

Был бүлектә беҙ әҙәбиәттең заман ҡанундарына ҡаршы килгән, заман тыуҙырған ҡаршылыҡтар тенденцияларын анализлаған, асыҡлыҡ индерергә тырышҡан, һорауҙарға яуап эҙләгән, осор тенденцияларын тәнҡитләгән йәки инҡар иткән ҡараштар системаһын күҙ уңында тотасаҡбыҙ. Яҙыусыларҙың кире күренештәрҙе һынландырыуы, утыҙынсы йылдар дәүере тыуҙырған ҡаршылыҡтарҙы сағылдырыу концепцияһына бөгөнгө көн күҙлегенән баһа бирергә ынтыласаҡбыҙ.

Утыҙынсы йылдар ыңғай герой типтарын ғына барлап сығыу үҙе үк тормоштоң төрлө яҡлы сағылышын сикләүгә алып килер ине. Әҫәргә инеп китеүсе кире һәм ҡаршылыҡлы күренештәрҙе дөйөмләштергән геройҙар - ул тормоштоң диалектик үҫешен һынландырыусы идея-эстетик берәмек: "кире образдар ярайһы уҡ ҙур идея йөкмәткеһенә эйә, әҫәрҙең мөһим компоненты булып тора. Уларҙың мәғәнәһе төп персонаждарҙың характерҙарын асыуҙа ғына түгел, улар ярҙамында яҙыусылар ысынбарлыҡты бөтә ҡатмарлылығында, байлығында һынландыралар"[69]. Тимәк, улар конкрет типтар булып билдәле бер осорҙоң социаль-сәйәси, социаль-ижтимағи, социаль-иҡтисади, идеологик, мораль-этик, психологик һ.б. ҡаршылыҡтарын, тенденцияларын дөйөмләштерәләр. Уларға

[69] Окорокова В.Б Пути и проблемы развития прозы в литературах народов Якутии //Автореф. дисс. на соиск. уч. ст. д. фил. наук –Уфа: БГУ, 1999. -С. 23.



конкрет идея асылы, концепция һалына. Шуға күрә герой типтарын төркөмләп, анализлап сығып, яҙыусыларҙың уларға һалынған ҡараш-фекерҙәрен асыҡлауҙы хәл итергә тырышасаҡбыҙ.

Утыҙынсы йылдар баштарында коллективлаштырыу ваҡиғалары ҡаршылыҡтары синфи-социаль типтарҙа һыҙатланыш алыуы әҙәбиәттең характерлы күренештәренең береһе. 1917 йылғы Октябрь инҡилабы донъяны ҡапма-ҡаршы ике лагерға бүлгәндән һуң, тормоштағы ваҡиғаларҙы синфи конфликт аша ғына һүрәтләү концепцияһы әҙәбиәттә оҙаҡ йылдар йәшәне. Күп әҫәрҙәрҙең конфликты синфи көрәшкә ҡоролоп, ҡаршы яҡ позициялағы геройҙар йәшәүгә хоҡуғын юғалтыусы концепцияһынан сығып һүрәтләнде. Кешене артыҡ социаллаштырыу, ошо позициянан уның социаль күренеш булыуына баҫым яһау әҙәбиәттә лә тормошто социаль анализлауҙың алғы планға сығыуына килтерҙе.

Кулак тип аталған социаль төркөм кешеләре тик утыҙынсы йылдар социалистик үҙгәртеп ҡороуҙар ғына тыуҙырған заман геройҙары: Алаҡай кулак һәм уның малайы Әхмәт (С.Мифтахов "Һаҡмар"), Ишкилде һәм Нурулла (Р.Ниғмәти "Баҫыу хөкөмө"), Фәйзулла (С.Ҡудаш "Ҡушҡайын"), Һаҙый (Низам Кәрип "Алма"), Аллаяр һәм Әүхәҙи (С.Мифтахов "Ялан ҡыҙы"), Шәкүр (А.Таһиров "Себерәк Ғилман"). Әлбиттә, яңы замандың яңы типтары булараҡ, кулак образын биреү, һүрәтләү тирәһендә ныҡышмалы эҙләнеүҙәрҙе күрергә була. Ул типтар ҙа бер төрлө генә түгел, төрлө-төрлө һыҙатланышлы. Мәҫәлән: Алаҡай менән Әхмәт образында, уларҙың эшмәкәрлегендә - колхоз амбарҙарына ут һалыуҙарында, урта хәлле крәҫтиәндәр хужалыҡтарын яндырыуҙарында, ауыл халҡын Юлай башлаған эшкә ҡотортоуында коллективлашыуҙың яңы башланған осоронда асыҡтан-асыҡ көрәшеүсе, Б.Бикбайҙың "Урман артында" поэмаһында теләһә ниндәй көрәш алымы менән ҡаршы торған, активистарҙы үлтереүгә үк барған көслө дошмандар бирелә. Дошмандың көслөлөгөн, осорҙоң көсөргәнешлеген Б.Бикбай шомло ҡараңғы төн, урмандарҙа ҡараҡ-кулактар, юлбаҫарҙар йөрөүе хаҡындағы хәбәрҙәр, комсомолец Йомағолдо үлтереп киткән ҡара шәүләләр образы аша аса.

С.Мифтаховтың "Һаҡмар" драмаһындағы Алаҡай менән Әхмәт тә – конкрет эштәре менән иҫтә ҡалырлыҡ уңышлы характерҙар. Низам Ҡәрип әле "Алма" пьесаһында Һаҙыйҙы тулы

характер булараҡ асып еткермәгән. "Һаҡмар"ҙа Әхмәттең колхозға ҡаршы эштәре кулак ҡатламынан булыуы менән генә түгел, Юлай менән икеһе араһында Айһылыу өсөн көрәш аша мотивлаштырылыуы характерҙың ҡаршы эштәре логикаһын нығыта. С.Мифтахов аталы-уллы Алаҡай һәм Әхмәттең бер үк төрлө уйҙар менән йәшәүҙәрен һәм ҡаршылыҡ күрһәтеүҙәрен сағылдыра. Авторҙың быңдай социаль ҡатламдарҙың тамыры менән ҡоротолорға тейешлеге хаҡындағы ҡараштары геройҙарҙы бер ғаилә эсенән һайлауға алып килгән. Бындай тип образдарға ҡарата, әйтергә кәрәк, күп әҫәрҙәрҙә яҙыусыларҙың позициялары, концепциялары асыҡтан-асыҡ: бер ниндәй бәхәскә, уйланыуҙарға урын ҡалдырмайынса, уларҙы үлемгә йөҙ тотҡан иҫке донъя ҡалдыҡтары итеп фаш итеү. Геройҙарҙың телмәренә, монологына, мәҫәлән, С.Мифтаховтың асыҡ ҡарашы һалынған: "... Айһылыу ғынамы ни, бөтәһе лә уларҙыҡы буласаҡ, бына ни өсөн яна. Ана атайымдың барыуын ҡара, шулай инеме ни уның йөрөүе? "Мин Алаҡай бай", тип ер һелкетеп баҫа торғайны, уға осраған кеше алдан уҡ хөрмәт менән килә торғайны. Ә хәҙер ҡара: ул ояһын туҙҙырған ҡарағош кеүек асыулы, ҡайғылы: уның йөрәге яна. Борон уның һелкетә баҫҡан тупрағы емерелә төҫлө, атлаған аҙымында ышанысы юҡ. Ә мин?... Мин уның улы, мин дә шулай уҡ уның хәлендә. ...Ана улар шатланалар, ә беҙ һыҡрайбыҙ. Улар еңә – беҙ еңеләбеҙ. Улар тауға менә, ә беҙ йәһәннәм соҡорона төшәбеҙ"[70].

Заман алға тәгәрәй тора, синфи көрәш икенсе формалар ала барған һайын был типтарҙы һынландырыу юлдары ла үҙгәрә бара. Яҙыусылар Аллаяр һәм Әүхәҙи (С.Мифтахов "Ялан ҡыҙы"), Фәйзулла (С.Ҡудаш "Ҡушҡайын"), Нурый һәм Ишкилде (Р.Ниғмәти "Баҫыу хөкөмө"), Алтаев (С.Мифтахов "Дуҫлыҡ һәм мөхәббәт"), Нурулла (Р.Ниғмәти "Һөйөү"), Нәғим, Вәлишә (Һ.Дәүләтшина "Башаҡтар тулҡыны") кеүек яңы битлек кейгән кулактарҙың асыҡтан-асыҡ көрәштән йәшерен дошманлыҡтар эшләүгә күсеүҙәрен күрһәттеләр. Улар тағы ла көслөрәк, хәйләкәрерәк, көрәштең төрлө юлдарын һайлап, алдан уйлап, эш итәләр. Уларҙы шулай сағылдырыуҙа әҙиптәрҙең был геройҙарға һалған идея-йөкмәткеһенең үҙгәрә барыуы күренә: көрәш бер-нисә көндә генә

[70] Мифтахов С. Пьесалар. -Өфө: Башҡ. китап нәшриәте, 1956. -122-се бит.



тамамлана торғандарҙан түгел, ул тағы ла ҡатмарлыраҡ, йәшерен төҫ ала. Шул ҡатмарлылыҡ геройҙарҙың эш-хәрәкәте аша оҫта бирелә: С.Мифтаховтың "Ялан ҡыҙы" драмаһында Аллаяр һәм Әүхәҙи кеүектәр Фәррәх һымак совет органдарында эшләгән йәш егеттәрҙе үҙ яғына ауҙарһа, Р.Ниғмәтиҙең "Һөйөү" шиғырында Нурулла кеүек кулактар колхозда ялҡауҙар ҙа, көнө буйы баш баҫып эшләгәндәр ҙә бер тигеҙ эш хаҡы алған өсөн йәне көйөп, хужалыҡты һүккән Ҡадир ағайҙарҙы колхозға ҡаршы ҡоторторға уйлай. Шағирҙың икенсе "Баҫыу хөкөмө" поэмаһында Нурый һәм Ишкилде коллективҡа инеп, колхоз байлыҡтарын төндә урлау юлына баҫып, ҡаршы эштәр башҡара. Заманында тирмән тотҡан, тракторы булған Ислам (Д.Юлтый "Шеф-паровоз") кеүектәр коллективлашыу башланғас та, тиҙ арала бөтә хужалығын һатып, ситкә ҡасып китһә, үҙен ярлы итеп күрһәтһә, Нәғим кеүектәр (Һ.Дәүләтшина "Башаҡтар тулҡыны") колхоз председателлегенә үрләп, йәки хакимиәт органдарында юғары вазифалар биләп, тормошҡа яраҡлаша. Башта ысын асылдары күҙгә ташланып тормаған ундай типтар хәйләкәр эш итеүҙәре менән ҡурҡынысыраҡ: "...ер аҫтындағы йылан көйшәгәнен белә торған, һөйләй ҙә белә, халыҡты ла үҙенә тарта белә, һыуға ла төшә белә, төшкән һыуынан ҡоро сыға ла белә, ҡатыны Мәрйәм менән шайтанды, иблестең үҙен алдай ала торған"[71] Ислам (Д.Юлтый "Шеф-паровоз") шундай. Һ.Дәүләтшинаның Вәлишә һәм Нәғим кеүек образдарында ла үҙ хакимлығын юғалтырға теләмәгәндәрҙең көрәше теләһә ниндәй ваҡытта теләһә ниндәй форма алып китеүе асыла. Мәҫәлән: "Демагогия – Вәлишәнең төп ҡоралы. Хәйләкәрлеге, таҫма телләнеүе арҡаһында ул яраҡлашырға, халыҡтың ышанысына инеп алырға һәләтле"[72]. Колхоз председателе булып алған Нәғимдең бар уйы хужалыҡты алға ебәреү түгел, ә үҙенең тормошҡа ашмаған байыу, хаҡимлыҡты дауам иттереү пландары өсөн халыҡтан, совет системаһынан үс алыу, атаһы Ғилман муллалар эшен дауам иттереү. С.Мифтахов "Дуҫлыҡ һәм мөхәббәт" драмаһында МТС директоры Алтаев йөҙөндә ысынбарлыктың йөҙө күпкә ҡатмарлы икәнен сағылдырыу

[71] Юлтый Д. Хикәйәләр, пьесалар, мәҡәләләр. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1984. -69-сы бит.
[72] Минһажетдинов М. Ҡәләмендә ҡөҙрәт бар. -Өфө: Китап, 1995. -30-сы бит.

концепцияһынан уйланылған геройҙы бирергә ынтыла. Әммә әле авторҙың геройының эш-ҡылыҡтарын аныҡ ҡына күҙ алдына баҫтырып еткермәүе, ышандырырлыҡ буяуҙар таба алмауы тойола. Трактор майҙарына ҡом һалыу кеүек яһалма ҡаршылыҡтар көрәш киҫкенлеген биреп еткермәй. Образға тағы ла ҙурыраҡ йөкмәтке һалып үҫтерергә булыр ине.

Ошо уҡ концепцияға ҡоролған дин әһелдәренең, мәзин, муллаларҙың тибы ла – утыҙынсы йылдарға хас социаль күренештәр. Утыҙынсы йылдар әҙәбиәтендәге мулла образы, әлбиттә, 20-се йылдарҙан килгән традицион тип. Егерменсе йылдарҙа улар сатирик, карикатур, хатта гротеск планда фашлана: Сабир мулла (Б.Ишемғол “Сабир мулланың ҡәберҙән яҙған хаты”), Хәйрулла, Сабир муллалар (И.Насыри “Заман ахыры”, “Яраплан”). Уларҙың хатта тышҡы портреттары ла артыҡ сарказм менән һүрәтләнеп, фашлау алымы итеп бирелә. Мәҫәлән, Хәйрулла мулланың портреты: “Мөхәммәт заманындағы фасон менән тегелгән тун һымаҡ нәмә, туҙып, иҫкереп, салышайып бөткән ситек һәм ҡатаһы, хәҙерге кешеләргә оҡшамаған ҡиәфәт”.

Утыҙынсы йылдар баштарында дин әһелдәрен биреүҙә шул ҡараштар, сатирик-саркастик һүрәтләү юлдары дауам итә. И.Насыриҙың “Еңелгән ятыу” повесындағы Хәлил мәзинде, тарихи-революцион романдарҙағы муллалар образдарын һүрәтләүҙә күренә ул. «...Оҙон буйлы, һары һаҡаллы, ике һүҙенең берендә, кантон хәҙрәттәре ни әйтер тағы, тип ҡуя торған Ниғмәтйән ҡарт, быны тағы һәр ваҡыт күҙенән йәш ағып торған Фазлый, быны тағы бөтә ҡатнашлығы баш ҡағып ултырыуҙан ғибәрәт Ғирфан ҡарт, һаҫыҡ ауыҙ, китек иренле Абдулла” йәки “Уныһы рәтләп бейей белмәй икән. Йөнтәҫ айыу һымаҡ ырғаңларға тотонно. Күҙҙәрен йәш баҫып, иҙәнгә йәйгән коверҙарға һөрлөгөп, бер нисә тапкыр йығылып та алды. Күҙҙәренән йәш, елкәһенән тир ағыҙып, ахылдап кире урынына барып ултырҙы”[73] кеүек портрет характеристикаларында яҙыусыларҙың был образдарға ҡарата бөтә ҡара буяуҙарҙы, ироник һүрәтләүҙәрҙе йәлләмәүен күрергә була..

Революцияға тиклемге әҙәбиәттә һәм егерменсе йылдарҙа Ш.Бабич, М.Ғафури, Б.Ишемғол, Д.Юлтый, И.Насыри ижадтарында фашланған “һәр фәнгә маһир” муллалар, мәзиндәрҙең типтары утыҙынсы йылдар әҙәбиәтенә традицион һыҙаттары менән килеп инһә лә, яҙыусылар был образдарға яңы һыҙаттар ҙа өҫтәне, заманса хәл итергә тырышты. Улар тормошҡа яраҡлашып, үҙенең ысын йөҙөн йәшергән, тағы ла көслөрәк һәм йәшерен көрәшкә күскән, “шартына килтереп”, башҡалар менән бер төрлө йәшәү рәүеше алып барған типтар итеп байытылды. Яңы тормоштоң яңы кешеһенә үҙ алдында торған ҡаршылыҡтар менән көрәшеү өсөн ул кәртәләрҙең эске хәсиәттәрен дә белеү кәрәк ине. С.Агиш “Шартына килһен” әҫәрендә Саяф мулланы, А.Карнай “Беҙ ҡайтырбыҙ”, И.Насыри “Күҙәй” тарихи-революцион әҫәрҙәрендә Әхмәдулла мулла һәм Абдулов-мулла-комиссар образдарын яңы позициянан, яңы алымдар менән һүрәтләнеләр. Уларҙың алдағы схематик мулла образдарынан айырмаһы һәм уңышлы яҡтары шунда: яңылыҡ төҙөүселәргә нәфрәтле мөнәсәбәттәре, ҡараштары асыҡтан-асыҡ белдерелмәй. Хатта уҡыусыла ундай геройҙар башта симпатия уята. Характерҙары эҙмә-эҙлекле, йайлап асыла, әҫәр аҙағына ике йөҙлөлөгө, аҫтыртын тактикаһы, яраҡлашып йәшәүе күренә. Абдуловтың (И.Насыри “Күҙәй”) мулла-комиссар тип, С.Агиш әҫәренең “Шартына килһен” тип аталышында уҡ был геройҙарҙың ысын йөҙө битлек аҫтына йәшеренгәнлегенә ишара яһала.

А.Карнай ҙа Әхмәдулла мулла образын әкренләп аса, карикатурлыҡтан ҡасып, тормошсан реаль һыҙаттарын бирә. Әҫәр башында беренсе тапҡыр уның менән осрашҡанда уҡ ауылда совет органдарына байҙарҙан түгел, ярлылар араһынан Закирҙы һайларға тәҡдим иткәндә хәйләкәр тактика менән эш итеүен әле Ғинди Сәғиҙуллин һиҙеп еткермәй.

С.Агиш геройының психологик портретын тыуҙырыу өсөн монолог, эске телмәр алымын ҡуллана. Егерменсе йылдар әҙәбиәтендәге сатирик мулла тибының портреты эске күңел картинаһы тулы итеп бирелгән социаль-психологик тип менән алмашына. Мәҫәлән, автор әҫәрҙең тәүге абзацынан уҡ геройының уйҙарын һүрәтләй: “...Шартына килһен!” Был уның төп теләктәренең береһе. “Сөнки,- ти ул, аҙ ғына шартына килмәһә, хәүефе бар, хәүефе булдымы – йәшәү юлына кәртәләр төшөүсән була. Шуға күрә лә, ни эшләмә, нимәгә тотонма - шартына килтереп,

[73] Насыри И. Әҫәрҙәр: Ике томда: 2-се том. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1957. - 85-се бит.

килештереп эш итергә кәрәк, майлаған кеүек булһын. Эҙе лә ҡалмаһын"[74],- был юлдар төп герой Саяфтың әленән-әле ҡабатлап йөрөй торған тормош девизы.

Яҙыусыларҙың геройҙарға бындай концепцияһы, шуға бәйле һүрәтләү алымдары дәүер идеологияһы һәм заман шарттары менән дә аңлатыла. Утыҙынсы йылдар аҙаҡтарына табан синфи дошман типтары асыҡтан-асыҡ көрәш алып бармағанда, уның реаль портретын тыуҙырыу ҙа яңыса һүрәтләүҙәр, яңы сағылдырыуҙарҙы талап итә.

Бындай геройҙарға артыҡ сарказм, карикатура яҙыусыларҙың субъектив ҡарашы, әлбиттә, ҡайһы бер осраҡта схематизмға ла алып килде. А.Таһировтың граждандар һуғышы осорон сағылдырған "Ҡыҙылгвардеецтар", "Ҡыҙыلармеецтар" дилогияһында, И.Насыриҙың "Күҙәй" романында Зәки Вәлиди хәрәкәтен, хәрәкәт башында тороусыларҙы объектив һүрәтләмәү ҡараштары заман шарттары менән бәйле: ике әҫәрҙә лә сәйәси хәрәкәт ҡатнашсыларының мәжлес ҡороп һыйланырға ятыуҙары, уҡыусыла кире мөнәсәбәт тыуҙырған тышҡы портреттары фаш итеүҙең уңышлы бер алымдары итеп файҙаланыла: "Зәки Вәлиди бер нисә көндәр бер туҡтауһыҙ эсеп, түрлә урында өҫтөн сисенмәйенсә аунаған, әле пахмиленән башы ныҡ ауыртҡан кеше ҡиәфәтендә сығып, ялҡау ғына рәүештә керле ҡульяулығы менән күҙлеген һөртөп, уны танау өҫтөнә баҫтырҙы"[75]. А.Таһиров Зәки Вәлидиҙең тышҡы портретынан алып, актив хәрәкәтен дә әҫәр башынан аҙағынаса һүрәтләп бирһә, йәки милли хәрәкәт башлығы, Билал Ҡадыровтар һымаҡ уҡ төп геройҙарҙың береһе булып хәрәкәт итһә, И.Насыри романында Зәки Вәлиди образы Күҙәй кантонында уның эштәрен башҡарып йөрөүсе Ҡарабаш һәм Абдулов һүҙҙәре аша ғына һынлана. Зәки Вәлидиҙең бер нисә портрет штрихы ғына бирелә. И.Насыри, А.Таһиров һымаҡ шау карикатураға бирелмәй. Образды биреүҙә объективлыҡ сағылып ҡала. Үҙ кешеләре араһында Зәки Вәлидиҙең абруйы ҙур. Абдулов уның хаҡында "мәҙрәсәлә бергә уҡыныҡ, бик уҡымышлы кеше, күп һөйләргә яратмай ине, китапты

[74] Агиш С. Һайланма әҫәрҙәр. Ике томда. 2-се том. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1975. -7-се бит.
[75] Таһиров А. Ҡыҙылгвардеецтар. Ҡыҙылармеецтар. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1989. -169-сы бит.



бик күп уҡыны. Мин мәҙрәсәләге уҡыуҙы яратманым, шуға ябай ғына бер мулла булдым, ә ул ана ниндәй ҙур кеше",- тип һоҡланып һөйләй.

Заман ҡаршылыҡтарының күп яҡлы йөҙөн социаль-көнкүреш, әхлаҡи-этик планда һүрәтләргә ынтылыш әҫәрҙәргә тормоштоң күп ҡырлы килеп инеүенә лә булышлыҡ итте. Тормоштоң, тарихтың алға ынтылышында ҡамасаулаған социаль күренештәр әҫәргә икенсе типтар аша килеп инә. Уларҙы ла әҙиптәр йәшәүгә хоҡуҡтарын инҡар итеү концепцияһынан сығып сағылдыра. Мәҫәлән, патриархаль ҡалыптарҙан арына алмаған үгәй әсә, имсе ҡарсыҡ, ҡәйнә образдарын тормош ҡаршылыҡтарын дөйөмләштергән геройҙар рәтенә индереп булыр ине. Ижтимағи геройҙарҙан айырмалы, уларҙың көнкүреш планында һүрәтләнеүе әҫәрҙәргә йәнлелек өҫтәй, тормошто ғәҙәттәгесә ябайлығы, уҡыусы күңеленә яҡын яҡтары менән аса. Уҡыусы, ысынлап та, уларҙа үҙен уратып алған, үҙенең эргәһендә йыш осраған күренештәрҙе таный. Егерменсе йылдарҙа уларҙың иң сағыуы М.Ғафуриҙың "Ҡара йөҙҙәр" повесында сихырсы, өшкөрөүсе Ғилми ҡарсыҡ, Хәбибулла Ибраһимовтың "Башмағым" комедияһында фольклорҙан башланғыс алған, яусы, йәштәрҙе осраштырып йөрөүсе, "изге эштәр" башҡарыусы булып күренгән, ысынында иһә, үҙенең йәшәү сығанағы итеп кешеләрҙе алдап, һәр ситуациянан өлөш сығарыуҙы, эләктереүҙе генә ҡарап йөрөгән имсе Йыһан ҡарсыҡ. Утыҙынсы йылдар әҙәбиәтендә һүрәтләнгән Мөғөлөй ҡарсыҡ, үгәй әсә Үлмәҫбикә (С.Мифтахов "Һаҡмар"), Мәликә һәм Гөлбиназ ҡарсыҡ (Ғ.Хәйри "Ҡатын"), Ғәйшә (Һ.Дәүләтшина "Айбикә") – Ғилми, Йыһан ҡарсыҡ типтарына оҡшаш. Ул характерҙар әҫәрҙәргә милли колорит өҫтәй, социаль-патриархаль ҡаршылыҡтар системаһын да сағыу бирә. Уларға әҙиптәр әҫәрҙәрҙә ҙур ғына урын бирә, тәрән идея мәғәнәһе һала. Мәликә ҡарсыҡ, Фатиманың ҡәйнәһе Гөлбиназ менән татыулығын боҙорға теләп, ғәйбәт тарата, Гөлбиназды Фатимаға ҡаршы хөсөтлөк эшләргә ҡоторта. Автор Мәликә ҡарсыҡ образын бер нисә штрихта ғына оҫта итеп күҙ алдына баҫтыра: "Үҙ ғүмеренә кеше өшкөрөп ғүмер иткән, бик күптәрҙе ваҡытынан элек үлтерергә сәбәпсе булған"[76] Мәликә ҡарсыҡтың яратҡан һүҙе: "...

[76] Хәйри Ғ. Өсәүҙең тарихы. - Өфө: Башҡ. китап нәшриәте, 1990. -97-се бит.

мин үҙем, ғәйбәткә бирелеп, гонаһҡа бата торған кеше түгел". "Һәр ваҡытта дөрөҫөн һөйләгән" Мәликә Фатима хаҡында алдаҡ, ғәйбәт хәбәрҙе алты кеше аша ишеткән: "Миңә уны Шәмсеүәли ҡатыны әйтте, Шәмсеүәли ҡатынына – Мөхәррәмә ҡарсыҡ, Мөхәррәмә ҡарсыҡҡа – ен һуҡҡан Сабира, Сабираға – Хәлиҙә, Хәлиҙәгә – Хәбибә"[77],- ти ул. Мәликә ҡарсыҡ, Үлмәҫбикәләрҙең яңы йәмғиәт шарттары тыуғас, бөтә юлдар менән үҙҙәренең хакимлығын һаҡлап ҡалырға тырышыуҙары сағылһа, Ғәйшәнең йоғонтоһо Айбикәгә көслөрәк (Һ.Дәүләтшина "Айбикә"), сөнки уларҙың хаҡимлыҡ итеү осоро дауам итә. Айбикә, үҙенең яҙмышы әлегә Ҡотлояр ҡулында булғанлыҡтан, Ғәйшәнең урынһыҙ мыжыуҙарына, тиргәү, әрләүҙәренә лә түҙергә мәжбүр. Айбикәнең баш баҫып, Ғәйшәнең һәр мыжыған эшен еренә еткереп эшләп, өй мәшәҡәттәренән бушамауында, уның кеүектәрҙең азатлығы тотҡарланып килеүе, уларҙың юлында ҡаршылыҡтарҙың әле көслө булыуы күренә.

Заман шарттары үҙгәрә барып, әҙәбиәт тормошто ныҒыраҡ өйрәнә барған һайын, яҙыусыларҙың үҙ концепцияларын яңы формаларға һалыуын, схематиклыҡтан ҡасыу юлдарын эҙләүен күрергә мөмкин. Утыҙынсы йылдарҙа сатираның, аллегорияның йылдам үтеп инеүе шуның тураһында һөйләй, ғәмәлдә иһә, ул типтарҙа ла инҡар итеү, тәнҡит концепцияһы ята. А.Карнай ул концепцияны аллегорик типтарға оҫта һалды. Башҡорт әҙәбиәтендәге был новатор күренеш тормошто дөйөмләштереүҙә М.Горький концепцияһына яҡын. "Форма, эш булараҡ аллегория бик ауыр",– ти М.Горький, –идеяның "кейеме, һауыты" булараҡ уңайлы. Аллегория аҫтына сатираны, сәнскеле, ҡыйыу телмәрҙе еңел генә йәшереп, ҙур идея йөкмәткеһе һалып була"[78].

Башҡаларҙың уңыштарына көнләшеп ҡараған, үҙен өҫтөн ҡуйырға тырышҡан аллегорик типтар ҡаршылыҡ күрһәтеп, яуызлыҡ эшләп, үҙҙәренең көслөлөгөн раҫларға тырышһалар ҙа, еңеләләр. Ҡараңғыла, еүештә көн иткән Ирлән һәм Һоро йыландың бейектә, ағастан-ағасҡа һикергән, ҡояшҡа, тимәк, яҡтылыҡҡа яҡын Тейенгә ("Урманда") башҡаларҙан үҙен өҫтөн ҡуйған Ҡарғаның ярҙамсыл,

[77] Шунда ук. -99-сы бит.

[78] Овчаренко А.И. О положительном герое в творчестве М.Горького. Статьи. - М.: Советский писатель, 1956. -С.354.



изге уйлы Турғайға ("Турғай"), ғүмере һаҙлыҡта, бысраҡ, ҡараңғылыҡта үткән Тәлмәрйендең бейектә оҫҡан Өйрәккә ("Өйрәк менән Тәлмәрйен") контраст ҡуйылыуҙарында изгелек менән яуызлыҡ, кешеләргә ярҙам итеү һәм көнләшеп ҡарау, мәкерлелек һәм яҡты уйҙар көрәше фәлсәфәләре һалынған. А.Карнайҙың ошо ике полюслы фәлсәфәүи төшөнсәләрендә тормоштоң мәңгелек көрәше диалектикаһы сағылыш таба. Күренеүенсә, тормош ҡаршылыҡтарын әҙәби образдарҙа һынландырыуҙа яҙыусылар социаль-синфи концепциянан ғына һүрәтләүҙән киңерәк дөйөмләштереүҙәргә күсә баралар.

Был осорҙа әҙиптәр яңы тип кеше формалашыу һәм яңы йәмғиәт төҙөү юлында осраған бөтә төр ҡаршылыҡтарҙы ла уҡыусы алдына сығарып һалыу бурысын ҡуйҙы. Яҙыусылар мещандар тибын йәмғиәттең һау булып күренгән сирҙәре итеп һүрәтләнеләр. Егерменсе йылдарҙа И.Насыри бигерәк тә уларҙан әсе көлә, "зәғиф йәндәр" тип атай. Нәҫерҙәрендә ул бер-береһенә контраст тәбиғәт күренештәре аша яңы тормош хужаларының мещандарҙан өҫтөнлөгөн күрһәтә. "Тағы ҡалҡтылар инде" нәҫерендә автор мещандар образын заманға хас кире күренештәр итеп һүрәтләй. Яңылыҡтың еңеүен ярһыу диңгеҙ, яҙғы ташҡын, боҙҙар аҡтарылыуы, наҙлы май ҡояшы, атып килгән сәскәләр, иҫкелек вәкилдәрен - айһыҙ ҡара төн, имәнес томан, иләмһеҙ ҡара болот кеүек символик образдар сағыштырыуы аша бирә. Мещандар яҙын һыу буйында күперҙә боҙ аҡтарылғанын ҡарай, йәштәр барабан һуғып дәртле баҫып килгәнен күреп, улар китәләр. "Тағы ҡалҡырҙар әле улар. Ҡалҡа-ҡалҡа һеҙҙең һымаҡ зәғиф халыҡты баҫып, тапап китерҙәр. Ә һеҙ, тыумыштан зәғиф халыҡтар, тештәрегеҙҙе ҡыҫып, сигенеүҙән башҡа бер ни эшләй алмаҫһығыҙ"[79],-тип яҙыусы бындай типтарға ҡарата ҡәтғи позицияла тороуын әҫәр контексында уҡ белдерә.. Бында тормошто субъектив революцион идеялар концепцияһынан баһалау, әлбиттә, геройҙарҙы ана шулай киҫкен контраслығында һүрәтләүгә алып килә. И.Насыри нәҫерҙәрендә әлегә мещандарҙың дөйөм образы ғына бар, конкрет индивидуаль характерҙар итеп бирелмәгән. Ә бына утыҙынсы йылдар әҙәбиәте

[79] Насыри И. Әҫәрҙәр: Ике томда: 1-се том. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1957. -28-се бит.

уларҙың конкрет образдарын һүрәтләп кенә ҡалманы, йәшәү рәүештәрен дә асығыраҡ күрһәтергә тырышты. Уларҙы йәшәү рәүештәре, көнкүрештәре, тормоштағы маҡсаттары аша фаш итте.

Был йәһәттән Һ.Дәүләтшина Рәйсә (“Айбикә”), С.Агиш Наилә образдарында (“Мәхмүтов”) күңеле мүкләнгән, кеше елкәһендә йәшәгән, үҙен башҡаларҙан өҫтөн тотҡан, рәхәт йәшәү рәүеше алып барған типтарҙы оҫта һүрәтләй. Бар тормошто матур кейенеүҙән, кәйеф-сафа ҡороуҙан, театр, ҡунаҡҡа йөрөүҙән, йорт йыһаздары йыйыуҙан тип уйлаған Рәйсәнең алдында башҡа маҡсат юҡ, ул халыҡтан да айырылған, ябай халыҡты культураһыҙ тип, түбәнһетеп ҡарай.

А.Карнайҙың Зиннур Әбсәләмов кеүек геройы ла (“Әбсәләмовтар”) йәшәү рәүеше, тормошта барған үҙгәрештәрҙе үҙенсә аңлауы һәм үҙ яғына бороп ебәреп, йәмғиәттә үҙ файҙаларын ҡайғыртып йәшәүе менән Рәйсә, Наиләнең уртаҡ тибы. Хатта былай төркөм кешеләрҙе утыҙынсы йылдарға ғына хас мещан тибы тип конкрет атамайынса киңерәк планда ҡарарға мөмкин. Ундай типтарҙы һәр йәмғиәттә лә теге йәки был ҡиәфәттә осратырға мөмкин. С.Агиш үҙенең повесында был типтарҙың йәшәү рәүешен бирһә, Һ.Дәүләтшина Рәйсә, А.Карнай Зиннур Әбсәләмов кеүек характерҙарҙа уларҙың интеллектуаль йөҙөн асырға тырыштылар. Рәйсә, мәҫәлән, юғары белемле врач булыуға ҡарамаҫтан, рухи донъяһы ярлы. Ауылдағы хеҙмәтсән халыҡтың бер вәкиле Таймаҫ Хайбуллинды ул культураһыҙ ауыл мужигы тип атай. Унынса, культуралы тормош – юғары даирәләрҙәге мәжлестәргә йөрөү. А.Карнай үҙенең хикәйәһендә Зиннур Әбсәләмовтың йәшәү рәүешен, рухи донъяһын асып характерҙы тағы ла тулыраҡ бирә. Һәр ваҡыт ҡулында китап булған, немец классик композиторҙарының әҫәрҙәрен тыңларға яратҡан ҡустыһы Сәлихтың йәшәү рәүешен оҡшатмауында уҡ Зиннурҙың түбән рухи донъяһы асыла.

Системаға уңай урынлашып алған бюрократ, халтурасы, ялағай-ялҡауҙар тибы алда ҡарап үткән образдарҙа дөйөмләштерелгән тормош тенденцияларын, ҡатмарлылыҡтарын тулыландыра, байыта. Ташбулат (И.Насыри “Курортта”) Мария Петровна, Николай Кузьмич, (Ғ.Хәйри “Бүлмә”, “Өсәүҙең) – бюрократлыҡтың уңышлы бирелгән образдары. Ташбулат хаҡимиәт



органдарына үрләп алған, партияға инеп, взнос түләп йөрөүе лә күҙ буяу өсөн генә. Ҡатынын алдауы аша ғына ла уның тормошо алдашыуға, ябай халыҡ аҡсаһын туҙҙырыуға ҡоролоуы күренә. Мария Петровна, Николай Кузьмич йөҙөндә лә ҡасандыр революцион буталыштар заманында үҙ тиреләрен һаҡлап ҡалыу өсөн Себергә ҡасып китеп, хәҙер “тыныс” шарттар тыуғас, кире ҡайтып, тормош ауырлыҡтарын күп татыған ябай халык вәкиле Шәрифте үҙ бүлмәһенән ҡыуып сығарыу өсөн, суд органдары вәкилдәрен үҙ яғына ауҙарырға тырышҡан типтар бирелә.

Тәү ҡарашҡа совет йәштәре төркөмө эштәренең ялҡынлы яҡлаусыһы булып күренгән Ҡотош Әбсәләмов (Ғ.Хәйри “Өсәүҙең тарихы”) башта уҡыусыла ҙур симпатия уята. Ул – алда әйтеп үткән типтарға ҡарағанда ла “ҡурҡынысыраҡ”. Уның ысын йөҙө йәшерен битлек аҫтында. Ул утыҙынсы йылдар ҡатмарлы тенденцияларын сағылдырған уңышлы образдарҙың береһе, тиһәк тә, хата булмаҫ. Төп герой Сәғитйән Ҡотоштоң бар асылын бер-нисә һүҙ менән тулы ҡылыҡһырлай: “…ул таҙа бер ғаиләнең ауырыу, ләкин сәләмәт булып күренгән, күренә торған ағзаһы. Ул бар, шулай булғас, ул ниңә сәләмәт ғаилә менән бармаһын?! Ул бара... Ул алды менән, арты менән, ҡабырғаһы менән, әлхасил, төрлө яғы менән бара ала, һәм әле лә ул бөтә кешенең алдында...”[80]. Яңғырауыҡлы буш һүҙҙәр һөйләргә яратҡан, телмәрен Маркс-Ленин һүҙҙәре менән нығытып ҡуйып, уҡымышлы булып күренергә тырышҡан, колхозлаштырыу башланғас кулак тип Себергә ебәрелгән атаһынан еңел генә баш тартҡан Ҡотоштоң девизы: “... -Кем ҡаушай, ул ныҡ ҡыйнала, ә хәҙер замана шундай: тура килгәндә, үҙең һуғып өлгөр, юҡһа үҙеңде изәләр, төшөндөңмө? Әгәр ҙә үҙеңә ҡарата дошманлык һиҙһәң, дуҫыңды, туғаныңды, хатта һөйгән йәреңде лә дөмбәҫләргә кәрәк! Шул ваҡытта ғына йәшәү хоҡуғына эйә булырға мөмкин”[81].

Йәмғиәттә, халыҡ араһында башҡа күптәр кеүек улар ҙа йәшәүен һәм тәү ҡарашҡа уларҙың ысын йөҙөн асыу бик еңелдән булмағанлығын С.Агиш, И.Насыри сатира аша һүрәтләне. Ғ.Хәйри Ҡотоштоң ғәҙәти, ябай, башҡаларҙан айырылып тормаған характерын бирә, схематик буяуҙар менән дә эш итмәй, ә көндәлек

---

[80] Хәйри Ғ. Өсәүҙең тарихы. -Өфө: Башҡ. китап нәшриәте, 1990. -137-се бит.
[81] Шунда уҡ. -213-сө бит.

тормошон комсомолдар араһында ла актив, ялҡынлы “эшмәкәрлеген” күрһәтә.

Ҡотош кеүектәр һыуға батып барғанда кеше ярҙамында ҡотолоп үҙен ҡотҡарған кешене батырып китә торған типтар. Мәҫәлән, ул Мәхфүзәне мещанка тип атай, унда мещанлыҡ һыҙаттарын табып, уға ҡарата башҡаларҙа кире мөнәсәбәт тыуҙырырға тырыша. Ҡотошҡа эйәреп комсомолдар Мәхфүзәнең сибәрлеген, хушбуй һөртөп, үҙен бөхтә йөрөтөүен мещанлыҡ сифаттары итеп күрәләр.

Әммә Мәхфүзә һәм Сәғитйәндең комсомолдар фекеренә ҡаршы сығыуҙарында автор дәүер атмосфераһына полемика ла аса төҫлө. Автор геройҙың үҙен тәрбиәле тотоуын, матур кейенеүен мещанлыҡ һыҙаттары тип ироник-саркастик ҡөлөүгә ҡаршы. Төп герой Сәғитйән һүҙҙәрендә лә сағыла ул: “...мещанлыҡ йәки буржуалыҡ галстук тағыуҙан, үҙеңде тәртипле йөрөтөүҙән, ҡатын-ҡыҙҙарҙы ихтирам итеүҙән тормағанлығын бик яҡшы аңлайым. Шулай булғас, ни өсөн миңә уларҙан оялырға? Ни өсөн таҙалыҡты һаҡламаҫҡа”[82]. Мәхфүзәнең комсомол өмәләренә көрәк тотоп эшкә сығыуы, халыҡ тип янып йәшәүе, әлбиттә, комсомолдарҙың унан нигеҙһеҙ мещанлыҡ һыҙаттары эҙләүен инҡар итә.

Шулай итеп, дәүерҙең революцион, социалистик рухына тап килмәгән күренештәрҙә мещанлыҡ күреү был осорҙоң характерлы яҡтарының береһе булды.

Ғ.Сәләм үҙенең “Бала” поэмаһында Әршит образында Ҡотош кеүек ялҡынлы “эшмәкәрҙәрҙең” һүҙҙәре менән эштәре араһында ҙур упҡын булған “заман активистарының” йәмғиәттә урын табып йәшәй алыу оҫталығы менән бергә, башҡалар улар йоғонтоһонда ҙур хата аҙым яһауы ла мөмкинлеген иҫкәртә.

Тап Әршиттең “юғары идеялар өсөн янып йәшәү” хаҡындағы фәлсәфәһе йоғонтоһонда Сәйҙел менән Зәйнәп шәхси тормошонда хаталана. Сөнки Әршит, Ҡотош Әпсәләмов кеүектәр замандың сирле кешеләрен үҙҙәрендә түгел, ә башҡаларҙа күрәләр. Улар юғары һүҙҙәр һөйләп, “фәлсәфә һатыусы” ғына. Ысынында иһә, улар теләһә ниндәй шарттарҙа ла яраҡлашып йәшәй алған

[82] Хәйри Ғ. Өсәүҙең тарихы. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1990. -153-сө бит.



типтар. Авторҙар уларҙы тормошта нисек осрауҙары мөмкин, шундай итеп бирә. Йәмғиәттә оҫта ҡулайлашып, башҡалар менән бер һуҡмаҡтан атлаған, “шартына килтереп” йәшәгән Саяфта (С.Агиш “Шартына килһен”), Ҡотошта (Ғ.Хәйри “Өсәүҙең тарихы”), Әршиттә (Ғ.Сәләм “Бала”), А.П.Чеховтың “Футляр эсендәге кеше”, “Хамелеон” әҫәрҙәренең ялған ҡабырсаҡ, футляр эсенә йәшенгән геройҙарын танып була. А.Таһировтың граждандар һуғышы осорон сағылдырған тарихи-революцион дилогияһында ҡалҡыу итеп бирелгән Гөлстан ханым образы ошо “хамелеондар” тибын тулыландыра. Әҙип ике йөҙлө характерҙың эске һәм тышҡы портретын да асыу өсөн бөтә ҡуйы буяуҙарҙы ла йәлләмәй: “Ебәк күлдәкле, ынйы ҡалпаҡлы, ҡуш алтын беләҙекле, ҙур кәүҙәһен йәйеп быумалы кеше кеүек, ауыҙҙарын мыймылдатып ултырған”, “ебәк күлдәк, энйеле ҡалпаҡтары менән генә бегемоттан айырыла торған кәүҙәһен һөйрәп, өҫтәл янына баҫты, танауын йыйырып тартты, киң йөҙөндәге бәләкәс күҙҙәрен сыт-сыт йомғоланы”[83] кеүек сағыу һүрәтләүҙәргә йыш ҡына мөрәжәғәт итә. Әлбиттә, әле героиняһының тышҡы портретын биреүҙә А.Таһиров егерменсе йылдарҙан килгән яланғас саркастик фаш итеү концепцияһы менән эш итә. Ике йөҙлө, башта кем икәнлеген тиҙ генә таныу ауыр булған характерҙар заман ысынбарлығының ҡатмарлылығын биреүҙә уңышлы һайланған геройҙар: “Гөлстан ҡаланан Дутов китеү менән тағы ҡабығын алыштырҙы, ҡыҙыл гвардия төҙөлөп, совет урынлашҡас та, “сәйәсәттән алыҫ тороусы”, “балалар уҡытыусы ғына булды” йәки “Гөлстан ханым бөтөнләй йәшәрҙе. Ҡалала совет власы осоронда уның бер туҡтауһыҙ тештәре “һыҙлай”, “баш өйәнәге” әленән-әле тота, йөрәге “тибеүҙән туҡтай” торғайны. Ҡалаға Дутов баш булғас, вәлидовсылар килгәс, бөтә ауырыуҙары ҡул менән алып ташлаған кеүек булды”[84].

Утыҙынсы йылдар әҙәбиәтендә яҙыусылар ялағайланып йәшәү йәки әпкәләйлекте совет йәмғиәтендә тамырынан ҡоротолорға тейешле күренеш булараҡ фаш иттеләр. Сабиров (С.Агиш “Ялағай”), Ғәбхәлим Ғабсатаров (Ғ.Ғүмәрҙең шул исемдәге

[83] Таһиров А. Ҡыҙылгвардеецтар. Ҡыҙылармеецтар. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1989. -173-сө бит.
[84] Шунда уҡ. -334-се бит.

хикәйәһе) ялағайлыҡты уңышлы дөйөмләштереп биргән образдар булдылар. Сабиров характеры яңы түрәһенә кем тип өндәшергә тип оҙаҡ баш ватҡандан һуң, үҙенән бер нисә йәшкә кесе директорға "ағаҡайым" тип көлкөгә ҡалыуында асыла. Ғ.Ғүмәрҙең геройы Ғәбхәлим Ғәбкәлимович Ғабсатаровтың Подхалим Алыпсатаров тип халыҡ тарафынан үҙгәртелеп әйтелеүе унын бөтә асылына тап килә. Ғәбхәлимдең түрәләргә ялағайланыуы – йәшәү сығанағы: "Ләкин минең ҡатын да кешегә минең шундай хөрмәт күрһәтеүемде яратмай ул. Мин бит һуң, хөрмәт күрһәтәм икән ундай-бындай кешегә күрһәтәмме ни? Директорға, директор ҡатынына, балаларына күрһәтәм. Ә ул кәрәк. Улай булмайынса булмай. Хөрмәт күрһәтмәһәң, донъяла тороп та булмай. Ә ҡатын шуны аңламай. Минең түбәнселекле булып, хөрмәт күрһәтеүем арҡаһында ебәк шәлле, бейек үксәле ботинкалы булып йөрөүен төшөнмәй"[85], -ти Ғәбхәлим.

Утыҙынсы йылдарҙа ана шулай тормошта һәр саҡ үҙ-үҙен генә ҡайғыртҡан, ниндәй генә шарттарҙа ла үҙенә күберәк файҙа алырға тырышҡан әпкәләйселек, хамелеонлыҡ, ялағайлык тенденциялары тәнҡит ителде. Тимәк, Чехов, Д.Юлтый геройҙарының традицияларын утыҙынсы йылдарҙа үҫтереү, тормошто күрә белеү - ундай типтарҙың теләһә ниндәй йәмғиәттә төрлө ҡиәфәттә осрауҙары мөмкинлеген сағылдырыу. Улар - тормош күренештәрен дөйөмләштергән типтар. Д.Юлтыйҙың "Әпәш" поэмаһындағы төп герой Әпәш - ялҡаулыҡты дөйөмләштереүсе образ. Уға оҡшаш геройҙар был осор әҙәбиәттә күп осрай. Ғ.Әмириҙең "Кәмһетелгән Шәмсетдин, трудденһеҙ Нуретдин", Р.Ниғмәтиҙең "Һөйөү" һәм башҡа әҫәрҙәрҙә яңы замандың үҙгәрештәренә ҡамасаулаған күренештәр сағылдырыла. А.Таһиров "Машиналар ҡаны" повесында башҡалар ең һыҙғанып эшләгәндә, еңел эш эҙләп йөрөгән Васька менән Шаһиҙа ла, Р.Ниғмәтиҙең "Һөйөү" шиғырындағы Ҡадир ағай кеүек тырыш колхозсылар ер һөргәндә үҙенең тайын эҙләп, көнөн бушҡа "ауҙарған", аҙаҡ ижау хәтле ҡалаҡ тотоп башҡалар менән бергә ашарға килгән"[86] ялҡау Янғолда ла әпәшлек һыҙаттарын тәнҡит итеү ҡараштары ята. Йәшәү

[85] Ғүмәр Ғ. Мин кәләш алғанда. -Өфө: Башҡ. китап нәшриәте, 1991. -97-се бит.
[86]Ниғмәти Р. Әҫәрҙәр. Ике томда. 1-се том. -Өфө: Башҡ. к. н., 1982. -43-сө бит.



рәүеше менән, характер асылы менән улар И.А.Гончаровтың Обломовы типтары. Эшләргә теләмәү, йәшәүенең мәғәнәһе, алдында маҡсаттары булмауы, рухи үҫештә артта ҡалыуҙары, үҙенең тирә-яғында барған ваҡиғаларға хуш күңеллелек, ялҡаулык, апатия кеүек һыҙаттары менән улар һәм Обломов - образ-игеҙәктәр. Обломов – XIX быуат йәмғиәте кешеһе, ә Әпәштәр һуңыраҡ быуатта йәшәүе менән генә айырыла. Әйткәндәй, XIX быуат рус әҙәбиәтендә Обломов, Митрофанушка (Фонвизин "Недоросль"), помещик-үлек йәндәр (Н.В.Гоголь "Мертвые души") "артыҡ кешеләр" типтары галереяһы традициялары 20-30-сы йылдар әҙәбиәтендә башҡа осорҙарға ҡарағанда ла популярыраҡ икәнлеге күренә. Юғары идеялар, яңы ҡоролош өсөн көрәш барғанда, әлбиттә, ундай тенденцияларҙы ҡалҡыуыраҡ күрһәтеү концепцияһынан сығып эш итеү менән аңлатылалыр был. Обломовсылыҡ күренешен тыуҙырыусы сәбәптәрҙе И.Гончаров бәләкәй көнкүреш шарттары булмайынса, крепостной тәртиптәрҙә күрһә, улар "заманының күрһәткесе" ("знамение времени")[87] булһа, Д.Юлтый Әпәште көнкүреш планында һүрәтләһә лә, ул да - заман саҡкыһы. Ата-әсәһенең Әпәште һәр саҡ ҡурсалап тороуҙары ун һигеҙ йәшенә тиклем ҡулына һәнәк тә, көрәк тә тотоп ҡарамаған, уҡыуға ла артыҡ маһирлығы, теләге лә булмаған, тиҫкәре әрәмтамакты тыуҙырған. Комсомолға ул башҡалар ингән өсөн генә ингән, хәҙер комсомолдарҙың күмәкләп өмәгә йөрөүҙәре, актив тормош менән йәшәүҙәре, һәр эштә лә алдынғы булыуҙары, ғәҙеллек яратыуҙары Әпәштең "стихияһы" түгел, нисек булһа ла комсомолдан сығыу юлын эҙләй. Әпәш – "тормошҡа ҡулайлаша алмаған субьект, уға сиктән тыш ауыр, ә унын характеры менән тормошонда ниндәй ҙә булһа хәл иткес боролош яһау үтә лә ауыр"[88],- ти Ғ.Хөсәйенов. Коллектив ситкә типкән, коллектив эсендә йәшәү ауыр булған Әпәш, Васька һәм Шаһи һәм башҡа шундай ялҡауҙар образдары аша яҙыусылар кешелә рухи күркәмлек, матурлыҡ, сифаттары тәрбиәләүҙе үҙәккә ҡуйҙылар. Әҫәрҙәрҙә заман геройы характерының хеҙмәт процесында яҡшы яҡҡа үҙгәреүе һүрәтләнде.

[87] Программы педагогических инст-тов. Сборник 6. -М.: Просвещение, 1980. -С.93.
[88]Хусаинов Г.Б. Д.Юлтый. Жизнь и творчество. -Уфа: Китап, 1993. -С.206.

Ул осор – социалистик хеҙмәттең кешенең ҡиммәтен, йәмғиәттәге ысын асылын билдәләгән йылдар. Хеҙмәткә новаторҙарса ҡараған, ижади хеҙмәттә үҙ-үҙен расҡлай алған, бәхетен тапҡан, ныҡлы характер тәрбиәләгән, кешелек ғорурлығы тойғоһо юғары булған, күңеле саф, әхлаҡлы, бәхетте аҡсала һәм байлыҡта түгел, ә ҙур мөғжизәле тәьҫир көсө йәшеренгән ижади эштә, уның серҙәрен төшөнөүҙә күреүсе хеҙмәт кешеһе утыҙынсы йылдар әҙәбиәтенең төп геройҙары булдылар. Мәҫәлән, Ярулла һәм Гөлшат (С.Мифтахов “Ялан ҡыҙы”), Хөршиҙә (С.Агиш “Эш самауырҙа түгел”) һәм башҡа бик күп геройҙар “Н.Островскийҙың “Ҡорос нисек сыныҡты” романынан Павел Корчагин тибындағы образдар рәтен тулыландырҙылар. Уларҙы сағылдырыу “кешенең тормоштағы урыны – фәлсәфәүи ҡараштарына барып тоташа”[89]. Утыҙынсы йылдарҙан алдағы әҙәбиәттәрҙәге традицион прообраздары менән бәйләнештә һәм киң планда ҡарағанда, улар үҙ дәүеренең күренештәрен генә һынландырып ҡалмай, ә йәмғиәттең төрлө осорҙарында осратырға мөмкин булған типтарҙы дөйөмләштерәләр. Шулай итеп, улар типиклаштырыуҙың киң характерҙағыһы. Сөнки һәр дәүерҙең үҙенең әпкәләйҙәре, әпәштәре, обломовтары тыуып тора.

Кеше күңеленең байлығы, күркәмлеге, материаль байлыҡҡа ынтылыусыларҙың рухи ярлылығы хеҙмәткә мөнәсәбәт ҡараштары аша асылһа, алда һүҙ алып барыласаҡ геройҙарҙың һаранлыҡ кеүек сифаттарын тәнҡит итеү, ваҡытында, күреү, иҫкәртеү, рухи мүкләнеүен сағылдырыу бөтә яҡлап камил шәхес тәрбиәләү маҡсатынан һүрәтләнә. Кирәй Мәргәндең Майгөл әбейендә (шул исемдәге хикәйә), Илмырҙа менән Хөсәйен образдарында (“Ҡорҙаштар”), Сафиуллала (С.Агиш “Икмәк”) һаранлыҡтың, йәшәүенең мәғәнәһе донъя, мал туплауға ғына ҡоролғанлыҡтың нимәгә алып килеүе ябай һәм ғәҙәти көнкүрештәре аша, сатирик буяуҙарһыҙ асыла. Майгөл әбей үҙ-үҙенән аҡсаһын ҡыҙғанып, хәйерсе тормошонда көн күрә. Һәр саҡ ҡатҡан икмәк менән сәй эсеп, иҫкереп бөткән кейемдә йөрөп, үҙе үлгәс, ерләү йолаһын башҡарырға кәфен-фәләне булмайынса, шул кейеп йөрөгән иҫке

[89]Хусаинов Г.Б. Д.Юлтый. Жизнь и творчество. -Уфа: Китап, 1993. -С.206.



кейемендә ерләнеүендә, һуңынан өйөнөң нигеҙенән тупраҡҡа күмелгән бер көршәккә йыйылған аҡсалары табылыуында Майгөл әбейҙең характер асылы күҙ алдына баҫа. Хөсәйен менән Илмырҙаның (К.Мәргән “Ҡорҙаштар”) күңелдәрендә тәрәнәйгәндән-тәрәнәйә барған һаранлыҡ ғүмерлек дуҫлыҡ, ҡорҙашлыҡ ептәрен өҙә. Бәләкәйҙән бергә татыу, бер һыныҡ икмәкте икегә бүлешеп үҫкән, ғүмергә дуҫ булып, өйләнгәс өйҙәрен йәнәш һалып күрше булып йәшәргә һүҙ ҡуйышҡан ҡорҙаштарҙың араһын бәләкәй генә сәбәп боҙа. Өйҙәре һалынырға тейешле урындан Илмырҙа үҙенә саҡ ҡына күберәк ер кәртәләп алған, Хөсәйендең өлөшөнә сыҡҡан. Ике ҡорҙаштың һаранлыҡтары талаш-тартышыуҙарҙан уҙып, юғары нөктәһенә етә: береһенең бесәненә ут төрткәнлектән, икеһенең дә күршеләш ултырған өйҙәренән көл өйөмө генә ҡала.

С.Агиш Сафиулла образында (“Икмәк”) алыпһатарлыҡ итеү маҡсатында икмәкте күп итеп һатып алып, советтарға ингән ярлыларҙың икмәге бөткәс, уларға һатып аҡса эшләү уйы менән янған һаран типты һүрәтләй. Уйлаған эштәре барып сыҡмағас, Сафиуллаға оҙаҡ ятыуҙан күгәргән икмәктәрен сығарып ташлауҙан башҡа сара ҡалмай. Үҫә барған нәфсеһен тыя алмаған геройҙар ахыр сиктә Пушкин герояныһылай “ярыҡ кәритә” менән тороп ҡала. Тимәк, был геройҙарҙа кешенең таҙа, саф әхлаҡи йөҙө өсөн көрәш концепцияһы ла ята.

Был осор әҙәбиәтендә яңы социалистик процестар кешенең күңел донъяһына ла үҙгәрештәр алып килеүен, кешеләр араһындағы мөнәсәбәттәрҙе психологик планда асыу ҙа сағылыш тапты. Юғары әхлаҡлы, мәҙәниәтле заман шәхесен тәрбиәләүгә йүнәлтелгән ҡараштар системаһы кеше характерындағы етешһеҙлектәрҙе еңелсә юмор, ирония аша һүрәтләүгә алып килде. Үҙенең белемһеҙлеге, уҡый белмәүе, наҙанлығы менән көлкөгә ҡалған заман геройҙары үҙ осороноң бер күренешен сағылдырҙы. Халыҡтың беренсе тапҡыр патефон менән осрашыуы – (С.Агиш “Сумаҙан”) яңылыҡты, яңы тормош ваҡиғаларын ҡабул итеүҙә грамотаһыҙлыкты бөтөрөү кеүек утыҙынсы йылдар кампанияларының бер сағылышы: “Тирә яҡтағылар ауыҙҙарына йөҙәк ҡапҡандай ҡатып ҡалдылар: сумаҙан аҙ ғына тамаҡ ҡырғандай ғырылдап алды ла ҡурай уйнай башланы. Йәштәр ике һиҙенеү уртаһында ҡалдылар. Уның береһе был серле сумаҙанға аптырау булһа, икенсеһе көйҙөң шул тиклем оҫта, шул

тиклем нескәлектәренә бирелеп уйнауға аптырау ине”[90].

Ғ.Ғүмәр уҡый-яҙа белмәүҙән загсҡа барғанда һөйгәненең метрикаһы урынына ат һатып алған ҡағыҙ тотоп барған Шәрәфи (“Мин кәләш алғанда”) аша наҙанлыҡтан еңелсә генә көлә.

Ундай геройҙарҙы һүрәтләү нигеҙендә, әлбиттә, яҙыусыларҙың халыҡта белемгә, культураға ынтылыш тәрбиәләү, уларҙы юғары мәҙәниәтле итеү ҡараштары ята.

Осор аҙағына табан Көнбайыш Европала һәм көнсығышта һуғыш уттарының тоҡаныуы яҙыусыларҙың гражданлыҡ, патриотлыҡ тойғоларына, илде һаҡлау хистәренә иғтибарын көсәйтте. Яңы тормошта үҙенә ирек, азатлыҡ яулап алған халыҡтың быуаттар буйы хыял итеп килгән яҡты теләктәренә ҡул һуҙырға теләүселәр әҙәбиәткә сатирик буяуҙар менән килеп инеп, инҡар ителде. Ғ.Сәләм балладаһындағы фрицтар, самурайҙар образы шундайҙар. Әгәр ҙә С.Агиш, Ғ.Ғүмәр, К.Мәргән сатирик фашлау концепциялы геройҙарын кешеләр араһында ғәҙәти тормош менән йәшәгән типтарҙы йә хәл-ҡылыҡтары, йә үҙҙәренең монологтары, йә эске телмәре, йә психологик уйҙары, йә хәрәкәт портреттарын гипербола, сарказм, гротеск аша күрһәтһә, Ғ.Сәләмдең сатирик һүрәтләүҙәренең нигеҙендә көтөлмәгәнлек аша көлкөгә ҡалдырыу эффекты ята. Геройҙы асыуҙағы бындай алым сатирик фашлауҙы ла, уҡыусыға тәьҫир итеү көсөн дә арттыра. Мәҫәлән: “Самурай һәм уның хужаһы” балладаһында самурай үҙенең совет ерҙәрен баҫып алырға бойороғоноң еренә еткереп үтәлеүе хаҡында регуляр рәүештә рапорт алып тора. Беҙҙең ғәскәр ҡалған ерҙәр беҙҙеке бит тип шатланған, үҙ-үҙенән һәм ғәскәренән ҡәнәғәт Хужаның самурайҙан шундай яуап алыуында сағыла ул көтөлмәгәнлек эффекты аша сатира тыуҙырыу.

*“Хужам, ти, самурай әйтә*
*Түбән эйелеп:*
*Ерҙең нисек биләнеүен*
*Аңлағыҙ элек:*
*Һәр һалдатҡа тик бер метр*

[90] Агиш С. Әҫәрҙәр. Дүрт томда. 4-се том. -Өфө: Башҡ. к. н., 1980. -11-се бит.



*Ер тейҙе унда.*
*Ул да ер өҫтөндә түгел,*
*Ерҙең аҫтында*[91].

Халыҡтың яңы тормош төҙөү юлында осраған социаль, идеологик, әхлаҡи, психологик, ижтимағи ҡаршылыҡтарҙы һынландырыу яҙыусыларҙың эстетик ҡараштарының халыҡ теләге менән бер булыуынан, массалар ихтыяжынан килеп сыға.

Шулай итеп, алда ҡарап үтелгән төрлө-төрлө саралар менән бирелгән төрлө-төрлө типтарҙы, геройҙар характерын дөйөм бер концепцияға берләштерергә мөмкин: уларҙы һынландырыу нигеҙендә яҙыусыларҙың алғы планда яңылыҡты раҫлау, яңылыҡты төҙөү юлындағы, халыҡтың рухи үҫешендәге ҡаршылыҡтарҙы дөйөмләштерергә ынтылыу, тәнҡит итеү ҡараштары ята.

Алда ҡарап үткән геройҙар типтарында шартлы рәүештә әйткәндә тормоштоң “тышҡы” яҡтары сағылыш тапты. Яңы тип геройҙың алдында осраған кәртәләрҙең социаль-ижтимағи яҡтары бирелде. Ул ҡаршы көстәр ҙә, әлбиттә, психологик, көнкүреш планында ла һәм башҡа һыҙаттары аша ла бирелделәр, тулы ҡанлы образдар булып күҙ алдына баҫтылар. Күпселектә был әҙәби типтар менән ыңғай геройҙарҙың киҫкен бәрелештәре әҫәрҙәрҙең тышҡы конфликтын тәшкил итте.

Әҙиптәрҙе был осорҙа ваҡиғаларҙың кешенең рух диалектикаһына, яҙмышына, психологияһына тәьҫире лә йәки тормоштоң эске ағышы ла ҡыҙыҡһындырҙы. Эске конфликтты һүрәтләү замандың ҡаршылыҡлы характерлы геройҙарын да тыуҙырҙы.

Тормош ҡаршылыҡтарын биреү был осор әҙәбиәтендә ваҡиғаларҙы тышҡы һүрәтләүҙән “эстән” тәрәнерәк һүрәтләүгә килеү эволюцияһы характерында барҙы.

Бер төркөм геройҙарҙа бирелгән революцион һәм социалистик үҙгәрештәрҙең кеше яҙмыштарының көтөлмәгән боролоштарына алып килеү күренештәре - утыҙынсы йылдар әҙәбиәтендә тормоштоң күп яҡлы ҡаршылыҡтарының бер

[91] Сәләм Ғ. Һайланма әҫәрҙәр. Бер томда. -Өфө: Башҡ. к. н., 1962. -159-сы бит.

сағылышы ине. Күсеү осоро геройының ҡатмарлы психологик типтары Григорий Мелехов кеүек (М.Шолохов "Тымыҡ Дон") яҙмыштар аҙашыуы һәм бәргеләнеүҙәре аша бирелгән геройҙар аша асылды. Шәрәфи, Сибай (И.Насыри "Еңелгән ятыу", "Сибай"), Нурулла, Ишми (С.Ҡудаш "Ҡушҡайын", "Хат"), Әхмәт (Ғ.Сәләм "Шоңҡар"), Шакир, Юлдыбай (Һ.Дәүләтшина "Башаҡтар тулҡыны", "Айбикә"). Бындай геройҙар һәр береһе төрлө-төрлө ҡатмарлы яҙмышлы, төрлө аспектлы характерҙар.

Баштараҡ дәүерҙең һынылышлы мәлдәренең ҡатмарлы ла, аяуһыҙ ҙа яҡтары Шәрәфи тибындағы яҙмышы хосуси милек һәм үҙгәртеп ҡороуҙар менән бәйле урта хәлле крәҫтиән типтарында бирелде. Совет осоро барлыҡ әҙәбиәттәрҙә лә яҙыусыларҙың бындай геройҙарға мөрәжәғәте совет ҡоролошо өсөн проблеманың глобаллеген, күренештәрҙең типиклығын һәм тенденциозлығын билдәләне. Григорий Мелехов (М.Шолохов "Тымыҡ Дон"), Никита Моргунок (А.Твардовский "Муравия иле"), Кондрат Майданников (М.Шолохов "Күтәрелгән сиҙәм") кеүек геройҙар яҙмышы аша сағылған дөйөм концепция Шәрәфи кеүек типтарҙа милли башҡорт ерлегендә сағылышын тапты. Производство өлкәһендәге үҙгәрештәрҙең тура һыҙыҡ буйынса ғына бармауын, көрәштең кеше яҙмыштарында ла үҙгәрештәргә алып килеүен И.Насыри "Сибай" повесында Сибай образында бирә.

Яҙыусылар геройҙарҙың күңеле икегә бүленеү сәбәптәрен күрһәтеү, юллау аша ысынбарлыҡтың ҡорал менән генә түгел, ә кеше яҙмыштары менән яуланыуын да художестволы кәүҙәләндерә. Герой ҡараштарының яңы үҙгәртеп ҡороуҙар менән бәрелеше күңел коллизиялары менән ҡушып алып барыла.

Шәрәфи, Сибай (И.Насыри "Еңелгән ятыу", "Сибай"), Нурулла, Ишми (С.Ҡудаш "Ҡушҡайын", "Хат") кеүек геройҙарҙың күңелдәренең икегә бүленеүе характерҙарының ике төрлө социаль тәбиғәтле булыуында: хеҙмәт кешеһе һәм хосуси милексе. Милекселек "ауырыуының" сәбәбе - йылдар буйына кеше елкәһендә түгел, ә үҙ ҡул көсө менән, намыҫ менән эшләп тапҡан мөлкәт. Революцияға тиклем алтын руднигында мастер булып, юғары эш хаҡы алған, ҡул көсө менән эшләүгә күнеккән, большевиктар етәкләгән заводта ла эшләп бер ҡасан да ялҡмаған, бер ҡасан да арыным, тип әйтмәгән, бер тапҡыр ҙа прогул яһамаған, бөтә яҡлап



та өлгө булырлыҡ Сибай "революцияға тиклем бай эшендә йөрөгән, баяр урағында бишек тартып ғүмер иткән, Ильяс купецта батрак булып торған, үҙенең ҡул көсөн купецҡа бушҡа һатҡан"[92]. Революция ваҡиғаларында ҡатнашып, Совет власын үҙ ҡулдары менән урынлаштырған Нуруллала, балыҡсы һөнәрен айырым бер күңел талабына әүерелдергән, йорто тирәһендә үҫкән йәшел үләндә бәләкәй генә сүп ятыуын да яратмаған, балыҡ септәһенә тиклем үҙенә бер махсус ләззәт менән эленеп ҡуйылыуына күнеккән Шәрәфиҙә лә хеҙмәт кешеһенең характер сифаттары асыла.

Нурулла, Кондрат Майданников, Никита Моргунок характерҙары Шәрәфигә ҡарағанда "йомшағыраҡ", пассивыраҡ йәки улар эшмәкәрлегендә дөйөм хәрәкәткә ҡаршылыҡ күрһәтеү бөтөнләй юҡ. Шәрәфиҙең синфи дошман юлына баҫмаһа ла, бәләкәй генә "тиҫкәрелектәр" эшләүе шул актив, бирешмәҫ характеры менән бәйле. Автор "…һәр ваҡыт үҙ һүҙен өҫтә ҡалдырырға тырышҡан, "Сулпан" колхозында бутап ятыусы"[93] тиҫкәре Шәрәфиҙең актив, ныҡ характерлы булыуын уны формалаштырыусы шарттарҙы күрһәтеү менән бергә, тышҡы ҡиәфәте аша ла "нығытып ҡуя": "…һуҡһа, кәртә һындырырлыҡ көслө, ҡурҡмаҫ йөрәкле, киң күкрәкле, таҙа беләкле, уртаса буйлы, ҡалын кәүҙәле, киң яурынлы, арыҫлан һымаҡ, йөрөгәндә һалмаҡ ҡына баҫып йөрөй торған"[94] Шәрәфиҙең тышҡы һынында ла үҙ-үҙенә сикһеҙ ышанғанлыҡ, баһадирлыҡ рухы бөркөлөп тора. Шәрәфиҙең эске күңел һыҙаттары менән тышҡы ҡиәфәтенең дә тап килеүе геройҙың характер тотороҡлоғон, ҡараштар ныҡлығын һындырыуҙың еңел генә бирелмәйәсәгенә лә ишара. Нурулла, Никита Моргунок, Сибай кеүектәргә коллективтың өҫтөнлөклө яҡтарына ышаныу өсөн бер ни тиклем ваҡыт кәрәк булһа, Шәрәфи трагик аҙашыуҙары менән Григорий Мелехов тибына оҡшаш. Тимәк, герой яҙмышының "...трагиклығы – халыҡ тормошонда тарихи ваҡиғалар сағылышының һүрәтләнеүе ул"[95]. Драматик бәргеләнеүҙәре характерҙарҙы формалаштырған сәбәптәрҙең тамырҙары тәрәндә ятыуы һәм шул осор ижтимағи сәйәси атмосфера менән бәйле.

[92] Ҡудаш С. Ҡушҡайын. -Өфө: Башҡортостан китап изд., 1969. -79-сы бит.
[93] Насыри И. Әҫәрҙәр: 2-се том. -Өфө: Башҡ. китап нәшриәте, 1957. -297-се бит.
[94] Шунда уҡ.
[95] Андреев Ю.А.. Революция и литература. -М.: 1987. -С.377.

Шәрәфи характерының ныҡлығы, “тиҫкәрелеге” донъяға ҡарашының киң булыуынан, дини-патриархаль йолалар менән аңы томаланмауынан, кеше наҙанлығын үҙ мәнфәғәтенә борған иҫке ғөрөф-ғәҙәттәргә баш эйеп тә бармауынан килә. Автор Ҡара ятыу хаҡында һөйләгәндә геройҙың бала сағынан уҡ башҡаларҙан айырылып, үҙенә башҡа бер кеше булыуын, бар булмышын Ҡара ятыу менән бәйләүен, унһыҙ йәшәүҙе күҙ алдына ла килтерә алмауын тәфсилләп тасуир итә. Ябай халыҡ Ҡара ятыу тураһында үҙенең хыялы еткән ҡәҙәр мифтар тыуҙырып, балаларҙы һыу төбөнә алып китә торған һыу инәләре, кеше әйтеп ышанмаҫлыҡ йәйендәр, аждаһа, юхалар тураһында имеш-мимештәр тыуҙырып, һуңынан үҙе шуларҙан ҡурҡа. Улар Ҡара ятыуҙың эргәһенә барырға ла шикләнһә, бәләкәйҙән маңҡаһын лыш-лыш тартып, ыштанһыҙ көйө теҙҙән һыуға инеп ҡармаҡҡа йөрөгән” Шәрәфи Гут баярына ла ҡыйыулығы менән оҡшаған. Хәлил мәзин уға тотҡан балыҡтарының бер өлөшөн шәриғәт закондары буйынса мәсеткә бирергә тейешлеге, шулай эшләмәгәндә, гонаһ аҙыҡҡа әйләнеүе тураһында әйткәндә, “Алланың минең балыҡтарымды һанап ултырырға ваҡыты бар, тип уйлайһыңмы” тип яуап биреүендә Шәрәфиҙең дингә лә үҙенең ҡәтғи ҡарашы барлығы күренә. Ә “Ҡушҡайын” романындағы Нурулла кеүектәрҙең “йомшаҡлығы” шунан да килә: ул “яңғыҙ хужалыҡтың ғазабын күп татыған, совет кредит биреп булышҡас, атлы-һыйырлы булған”[96]. Коллектив тормош менән йәшәүгә лә ҡаршы түгел, тик тир менән тапҡан малдарының изгелектәрен дә күрәһе килә. Шуға күрә минең милкем – колхоз милке, тип һанаһа ла, атының яҡшы ҡайыш ҡамытын систереп алып, иҫке ҡамыт кейҙереп, арҡаһынан япмаһын алып ҡалған. Тимәк, геройҙарҙың “ике йән” көрәшенең сәбәбе характерҙарына ғына ҡайтып ҡалмай, йылдар буйына нығынған тормош, йәшәү рәүеше менән бәйләнгән. “Рус совет әҙәбиәте тарихы” хеҙмәтендә билдәләнеүенсә, утыҙынсы йылдар тотош совет әҙәбиәтендәге былдай геройҙарҙы һүрәтләгәндә әҙиптәр өсөн “тарих-характер хәрәкәтен, ҡатмарлы тормош юлын, эске конфликтын билдәләүсе фактор”[97]ҙы һүрәтләү мөһим. Геройҙарҙың ҡаршылыҡ күрһәтеүе объектив сәбәптәр, йәмғиәт тарихы менән

[96] Ҡудаш С. Ҡушҡайын. -Өфө: Башҡортостан китап изд., 1959. -80-се бит.
[97]История русской советской литературы. -М., 1958. –С.33.



барып тоташа.

Яҙыусылар геройҙарын икеләнеүгә килтереүсе сәбәптәрҙе уларҙы уратып алған тирә-яҡ мөхит шарттары итеп бирә. Мәҫәлән, Ҡушҡайын ауылында колхозлашыу күптән тамамланған, кулактар синыф булыу яғынан бөтөрөлөп, крәҫтиәндәр күмәк хужалыҡ булып эшләүгә күсеп бөткән, халыҡҡа яҡшы тормош менән йәшәү өсөн юлдар киң асылған, шулай ҙа “Ҡушҡайын” колхозы алдынғылар рәтенә баҫа алмай. Һаман да тәртипһеҙлектәр, етешһеҙлектәр хөкөм һөрә. Халыҡтың хеҙмәткә ҡарата төрлө-төрлө мөнәсәбәте һөҙөмтәһендә тәртип түбән, күп кеше уттай ҡыҙыу эш миҙгелендә лә эшкә сыҡмай, сыҡҡандары ла илке-һалҡы ғына йөрөй. Тир түгеп эшләгән Саттар бабай кеүек намыҫлы эшселәр ҙә, Шәрәфи кеүек тел биҫтәһе ялҡау колхозсылар ҙа игендең хеҙмәткә ҡарап түгел, ә йән башынан иҫәпләнеп бүленеүе һөҙөмтәһендә бер төрлө күләмдә ашлыҡ ала.

“Сибай” повесында ла И.Насыри Сибайҙың яңы йәмғиәтте үҙһенеп етмәүенең сәбәптәрен күрһәтә. Улы Әсғәт большевиктар ҡылысынан үлгән. Ул эшләгән заводта ла прогулсылар ҙа, ялҡауҙар ҙа бер ниндәй яуаплылыҡ тоймай. “Еңелгән ятыу” повесында һүрәтләнеүенсә, “Сулпан” колхозында ла эштәр ал да гөл түгел. Колхозсылар араһында берҙәмлек юҡ, күптәр “башта һарыҡ көтөүе кеүек өйөрөлөп йөрөп, барыһы ла колхозға инеп, һуңынан сыҡҡан, вәғәҙәләр биреп индергән колхоз, үҙе аҙыраҡ иҫкерә төшөү менән таралырға торған тары икмәге кеүек”[98] тотороҡһоҙ. Былар бөтәһе лә геройҙарға тәьҫирһеҙ ҡалмай, әлбиттә. Шул уҡ ваҡытта яңы йәмғиәттә бөтәһе лә насар түгел: уларҙың үҙҙәре һымаҡ уҡ намыҫлы, тырыш, хеҙмәт һөйөүсе, халыҡ тип янып йөрөүсе, яңы ҡоролошто төҙөү өсөн үҙ-үҙен аямаған яңы быуын йәштәр, комсомолецтар, коммунист-етәкселәр бар: “йөҙҙө һорағанда йөҙ иллене эшләп бирә торған”, дөйөм эш тип янып йөрөгәнендә фажиғәле йәрәхәтләнгән Хәсән (И.Насыри “Сибай”), “Ҡушҡайын” колхозын өҙөклөктән сығарып, алдынғылар рәтенә баҫтырыу өсөн үҙ-үҙен йәлләмәгән Афзал (С.Ҡудаш “Ҡушҡайын”), тапҡыр һүҙле, Шәрәфи ағайға һәйбәт мөнәсәбәтле, “йәш кенә көйөнә лә идеяһы өсөн үлерлек

[98]Насыри И. Әҫәрҙәр. 2 томда. 2-се том. -Өфө: Башҡ. к. н., 1957. -306-сы бит.

юғарылыҡҡа күтәрелгән”[99] Фәтхи (И.Насыри “Еңелгән ятыу”) кеүек һәр ваҡыт эштең алғы сафында йөрөп, ғүмерҙәре менән иҫәпләшмәгән фанаттар улар.

Геройҙарҙы “ике йән” көрәшенә алып килгән сәбәптәр уны индивидуаль бунтҡа ла этәрә. Ул бунтарлыҡ мөхит шарттарына, геройҙар характерына бәйле төрлө төҫ ала. Бер төркөм “бунтарҙар” көнсел тартҡылашыуҙарын еңеп, “…ышанмаҫ нәмәм ҡалманы”[100] тип, коллектив тормош яғына сыҡһалар (Хәләф (С.Агиш “Ышанмаҫ Хәләф”), Сөләймән (Ғ.Хәйри “Ҡатын”), Әпсәләм, Сырлыбай (С.Мифтахов “Һаҡмар”)), икенсе төркөмдәренә ныҡлы ҡарарға килеү өсөн А.Твардовскийҙың геройы Никита Моргунок кеүек ситтә йөрөп, башҡа ерҙәрҙе лә күреп ҡайтыу кәрәк булһа (Нурулла (С.Ҡудаш “Ҡушҡайын”)), өсөнсөләренең – Шәрәфи кеүектәрҙең яҙмышы трагик кульминацияһына етә. Геройҙарҙың трагиклығы, көрсөккә килеүҙәре – ҡатмарлы тарихи ысынбарлыҡ сағылышы. Яҙыусыларҙы бына ошо ҡатмарлы ысынбарлыҡ тәьҫирендә кешенең күңел торошо – “крәҫтиәнде ҡыҙыҡтырған да, өркөткән дә яңылыҡ”[101] тыуҙырған күңел үҙгәрештәре, кеше яҙмыштары мәсьәләһе, борсой. Авторҙың “Еңелгән ятыу” повесы геройы Фәтхи ауыҙынан әйттергән “үҙенең иҫкелегенә тартҡан һәр кешелә контрреволюционер күрәләр” тигән һүҙҙәрендә урта хәлле крәҫтиән мәсьәләһенә һаҡсыл ҡараш хаҡындағы эстетик позицияһы сағыла. Шуға күрә бындай геройҙарҙы әҙиптәр совет яғында түгел икәнһең, тимәк, контрреволюционер тигән позиция күҙлегенән түгел, ә һынылышлы осорҙар һәм шәхес яҙмышы аспектынан яҡтырталар. Рус яҙыусыһы М.Шолохов “Тымыҡ Дон” роман-эпопеяһын яҙғанда: “... ҡыҙылдарҙың аҡтар менән көрәшен түгел, ә аҡтарҙың ҡыҙылдар менән көрәшен сағылдырырға тырышыуын, ошонда инде ҙур ауырлыҡ”[102] тойоуын әйтә.

Тимәк, яҙыусыларҙың ҡатмарлы дәүерҙәрҙе төрлө яҡлы сағылдырыуы – ҡатмарлы тормоштоң реаллеген урап үтмәй, ҡырыҫ

[99] Шунда уҡ. -377-се бит.
[100] Агиш С. Әҫәрҙәр: 4-се том. -Өфө: Башҡ. китап нәшриәте, 1980. -9-сы бит.
[101] История русской советской литературы. -М.: Издательство Академии наук СССР, 1958. -С.51.
[102] Андреев Ю.А. Революция и литература. -М.: 1987. -С.377.



ысынбарлығында бирергә тырышыу ине ул.

Геройҙарҙың характерындағы типологик оҡшашлыҡтар менән бергә, уларҙың яҙмыштарын эҙмә-эҙлекле хәл итә барыуҙа ла айырмалыҡтар бар. Мәҫәлән: С.Ҡудаштың “Ҡушҡайын” романында Нурулланың яҙмышы ваҡиғалар ағышы менән параллель сюжет һыҙығы булып килә, төп конфликт “Ҡушҡайын” колхозын алға ебәреү, ундағы эштәрҙе яйға һалыу өсөн көрәшкә ҡоролған, Нурулла тирәһендәге ҡаршылыҡтар әллә ни ҡуйыртылмай. Автор бер ни тиклем ваҡыттан һуң уның башҡаларға ҡушылып китеүен күрһәтә. И.Насыри ҙа күңел коллизиялары кульминацион моментынан һүрәтләнә башлаған “Мистер Сибай” менән “товарищ Сибай”ҙың көрәше Хәсән фажиғәһе һөҙөмтәһендә товарищ Сибайҙың еңеүенә килеүен бирә. Артабан күңел конфликты тирәһендәге ваҡиғаларҙы юғары температураға ярашлы кирбес эшләү өсөн көрәш конфликтына күсерә. Сырлыбай, Әпсәләм (С.Мифтахов “Һаҡмар”) кеүектәр яҙмышы ла артыҡ драматиклаштырылмай, күңел тороштарына, хис-тойғоларына бик күп баҫым яһалмай. Шәрәфи, Григорий Мелехов, Әхмәт (Ғ.Сәләм “Шоңҡар”) кеүек типтарҙа тормош ҡалҡыуыраҡ, трагигыраҡ, тағы ла ҡатмарлыраҡ бирелә. Әҙиптәр тап төп геройҙарының яҙмышын әҫәрҙәрҙең башынан аҙағынаса фокуста тота. Әхмәттең трагедияһы – “йәшәр өсөн һуҡмаҡ эҙләү”[103] юлында тайғаҡ юлға баҫып, шәхес булараҡ юҡҡа сығыуы, тормошо хәҙер бур Әхмәт тураһында әкиәткә яҡын хикәйәткә әйләнеп, “үҙен урмандар ҙа, кешеләр ҙә онотоп барыуында”[104], “үҙ илкәйе ят”[105] булыуында. Шәрәфи яҙмышы ла Әхмәттеке һымаҡ. Ул да “һөйгән еренән һөрөлөп”[106]ситкә сығып китергә мәжбүр була, кешелек сифаты өсөн дә һынау баҫҡыстары үтә, күңеленең йәмғиәт тәртиптәре менән килешергә теләмәүе һөҙөмтәһендә оҙайлы ғазаптар кисерә.

И.Насыри Шәрәфи күңелендә һәр ваҡиғаның ниндәйерәк йоғонто яһауын һүрәтләүгә әҫәрҙең аҙағынаса тоғро ҡала. Характерҙың намыҫлы эш, хеҙмәт кешеһе икәнен дә иҫенән

[103] Сәләм Ғ. Һайланма әҫәрҙәр: Бер томда. -Өфө: Башҡ. к. н., 1962. -238-се бит.
[104] Шунда уҡ, -232-се бит.
[105] Шунда уҡ, -238-се бит.
[106] Насыри И. Әҫәрҙәр. 2 томда: 2-се том. -Өфө: Башҡ. к. н., 1957. -38-се бит.

сығармай. Трагик аҙашыуҙар мәлендә, бер-бер артлы кәртәләр “әҙерләп”, геройын шул ситуацияларҙа һынай.

Әстрханда, Махачкалала, тыуған яҡтарынан, ғаиләһенән айырылып йөрөгәндә Шәрәфи “үҙен яңғыҙ ватылған, рухи иҙелгән, тормош тулҡындары менән ярға ташланған юнышҡылай хис итә, эргәһенән шыйлап үткән машинала үҙенең эргәһенән үтә торған тормошто күргәндәй, үҙен мәңгегә онотолған итеп тоя”. Еңел юл менән килгән табыш күңеленә ғазаптар ғына өҫтәй.

Шулай ғазапланып уйланыуҙары, үҙен борсоған һорауҙарға яуап эҙләүе, трагик яңғыҙлығы һәм “йәшәү өсөн һуҡмаҡ эҙләүе” менән Шәрәфи Әхмәткә (Ғ.Сәләм “Шоңҡар”) яҡын. Улар бөтөнләй япа-яңғыҙ ҡалыуҙары менән уртаҡ яҙмышлы, уларҙың яҙмыштары көтөлмәгән боролош алыуында йәмғиәт тәртиптәре, улар йәшәгән мөхит сәбәпсе. Шәрәфи көслө характерлы, үҙ-үҙенә шикһеҙ ышанғанлығы, сәмсел, баш бирмәҫ холоҡло булғаны өсөн дә башҡаларҙан үҙ-үҙен изоляциялай. Әхмәт рухы көслө булһа ла, йәшәү юлын аныҡ ҡына белмәүе, эҙләнеүҙәре һөҙөмтәһендә Миңъянға эйәреп бурлыҡ, юлбаҫарлыҡ юлына баҫа. Ауылдаштары, тыуған тупрағына илтер юлды үҙе киҫеүе менән яңғыҙ. Гөлнурға булған оло һөйөү хистәре лә ауылда ҡалдыра алмай уны. Халыҡты дер ҡалтыратып, юлбаҫарлыҡ итеп йөрөһә лә, Әхмәт кешелек хисен юғалтмаған. Шул кешелек хисе унын һәр ваҡыт йөрәгендә Гөлнурға булған һөйөүен һаҡлағанда ла күренә. Әхмәт үҙенең ни өсөн шул хәлгә төшөүен төшөнөп етмәүе менән революцияға тиклем халык яҙмышын яҡтыртҡан Тимеркәй (Д.Юлтый “Тимеркәй фәлсәфәһе”), Булат, Байғужа (Д.Юлтый “Ҡан”), Бәкер Бакиров (А.Таһиров “Һалдаттар”), Вәхит Йәғфәров (М.Ғафури “Тормош баҫҡыстары”), Айбикә (Һ.Дәүләтшина “Айбикә”) кеүек ярлылар ниңә ярлы, байҙар ниңә бай икәнен аңламаған, көрәшеү юлдарын аныҡ белмәгән, тик революция һөҙөмтәһендә генә үҙ хәлдәрен төшөнгән күсеү осоро геройҙарын хәтерләтә, шул геройҙар тибы. “Емерек өйөн һөйәтергә таяу табырмын” тип уйлап Миңъянға эйәреп, киреһенсә, тормош төпкөлөнә тәгәрәгән Әхмәт поезда Миңъянды үлтереп китә.

Шәрәфи, Әхмәт, Григорий Мелехов, Никита Гурьянов, Кондрат Майданников, Никита Моргунок, Нурулла һәм башҡа бик күп шундай геройҙар яҙмыштарында йәмғиәт тәртиптәре һәм шәхес концепцияһы алғы һыҙыҡҡа ҡуйыла. Уларҙың эске күңел



кисерештәренә ҙур ғына урын бирелә. Мәҫәлән, Нурулла күк бейәһен колхозға биргәс, йоҡоһоҙ уйлы төндәр үткәрә. Ғ.Сәләм революция, граждандар һуғышы кеүек сәйәси ваҡиғаларҙы бөтөнләй “алып ташлап” Әхмәттең архитектор дәрәжәһенә үҫеп етеүен күрһәтә, тайғаҡ юлға баҫҡас ғазапланыуҙарын алғы планға ҡуя. Әхмәт образында капиталистик йәмғиәттең кешене рухи яҡтан иҙеүсе ҡоролош булыуы, социалистик йәмғиәттә генә кеше үҙен шәхес булараҡ раҫлай алыуы идеяһы үткәрелә. Айһылыуҙар (С.Мифтахов “Һаҡмар”, Б.Ишемғол “Тракторсы Айһылыу”), Ярулла (С.Мифтахов “Ялан ҡыҙы”), Айбикә (Һ.Дәүләтшина “Айбикә”) типтарында ла шул идея, концепция һалынған ине.

Шулай итеп, “…үҙенең аяҡтары аҫтындағы бөтә нәмәне ватып-емереп килгән йәмғиәт тәртиптәре алдында ҡоралһыҙланып теҙ сүгергә теләмәгән”[107] кешеләр яҙмыштарында шәхес һәм йәмғиәт араһындағы ҡаршылыҡтар, кешене тыуған яҡтарынан айырыу кеүек гуманлыҡ проблемалары күтәрелә. Бындай тип геройҙарҙа революция яңы йәмғиәтте төҙөү өсөн юл асыусы ғына булмайынса, кеше яҙмыштарын емереүсе лә боролошло ваҡиға булыуын күрергә мөмкин. Ғ.Сәләмдең Әхмәте үҙенең яҙмышы менән капиталистик йәмғиәтте кешенең юлын быуып тороусы ҡоролош икәнлеген раҫлаһа, Шәрәфи образында социалистик йәмғиәттең шулай уҡ кеше яҙмыштарын боҙоуға алып килеүе бирелде.

Яҙыусылар Григорий Мелехов, Шәрәфи кеүек өр-яңы типтарҙа революцион үҙгәрештәрҙе бер яҡлы ғына һүрәтләүҙән арына барып, уның ҡатмарлы яҡтарын асырға, анализларға тырыштылар. Шулай итеп, был осор әҙәбиәте заман ҡаршылыҡтарын дөйөмләштергән типтарҙы һүрәтләүҙә лә дәүерҙе бөтә ҡатмарлылығында, киңлегендә һәм нескәлегендә биреү оҫталығына ирешә барҙы.

Утыҙынсы йылдарҙың төп геройы, социалистик ҡоролошто төҙөүсе өр-яңы кешенең юлында осраған тормош ҡаршылыктарын һынландырыу, кире күренештәрҙе сағылдырыуҙа ла яҙыусыларҙың актив, асыҡ концепцияһы бар. Әҙиптәрҙең уйҙары уның төп ыңғай геройының теләге менән бер: ул - халыҡ ихтыяждарын күҙәтеүсе,

[107] Насыри И. Әҫәрҙәр: 2 томда: 2-се том. -Өфө: Башҡ. к. н., 1957. -406-сы бит.

шуға күрә халыҡтың тормошон алға ебәреүҙе тотҡарлаған бар күренештәрҙе лә асып биреүҙе үҙенең маҡсаты итеп ҡуя, уның төрлө формаларын, юлдарын эҙләй. Был осорҙа замана кире типтарының оҫта итеп бирелгән тәрән социаль-психологик портреттары, сатирик-аллегорик-гротеск типтарҙың да әҙәбиәткә йылдам үтеп инеүе шул хаҡта һөйләй. Тимәк, был геройҙарҙы һүрәтләү алымдары ла, яҙыусыларҙың был геройҙарға һалған концепцияһы ла заман талабы менән аңлатылалыр.

Тормоштоң кире күренештәрен һүрәтләгәндә лә яҙыусыларҙың герой концепцияһына ҡарашының үҙгәрә барыуын күрергә мөмкин. Башта кулак, дин әһелдәре, мулла, мәзин һәм башҡа типтарҙа тормоштоң социаль-тарихи, синфи яҡтарын ғына күреп, уларҙы ижтимағи күренеш булараҡ ҡына бирһәләр, һуңға табан әҙиптәрҙе бындай геройҙар концепцияһында ла тәүҙә ижтимағи-тарихи шарттар кеше психологияһына ниндәй тәьҫир яһай – шул ҡыҙыҡһындыра. Алғы планда – киңерәк солғап алына башлаған күп яҡлы тормош, кешеләр яҙмышы, уларҙың күңел донъяһы. Яҙыусылар дәүерҙең ҡаршылыҡтары яңы социаль шарттар тыуҙырған ҡаршылыҡтар булыуын һүрәтләнеләр.

Осор аҙағына табан тормошто тәрән анализлау заман геройының ҡатмарлы характерлыларының уңышлы асылыуына килтерҙе. Әҫәрҙәрҙәге тышҡы күҙгә ташланып торған конфликт геройҙың эске донъяһындағы психологик конфликт менән алышынды. Тышҡы һәм эске конфликтты бергә ҡушыу, эске конфликтҡа килтереүсе сәбәптәрҙе лә күрһәтергә тырышыу, схематиклыҡтан да ҡотолоу юлында ныҡышмалы эҙләнеү – кеше яҙмыштарын алға ҡуйыу ине ул.

**Һорауҙар һәм эштәр:**

1. Утыҙынсы йылдар башҡорт әҙәбиәтендә заман конфликтын, ҡаршылыҡтарын сағылдырыу концепцияһы ниндәй?
2. Был осор кире геройҙарҙы биреү үҙенсәлектәре хаҡында нимәләр әйтә алаһығыҙ?
3. Был йылдар әҙәбиәтендә дин әһелдәре, мулла, руханиҙар образдарын сағылдырыу алымдары хаҡында нимәләр әйтә



алаһығыҙ?
4. Утыҙынсы йылдар прозаһында сатирик типтар бирелеше хаҡында нимәләр әйтә алаһығыҙ?
5. И.Насыриҙың “Еңелгән ятыу” повесындағы Шәрәфи образына характеристика бирегеҙ
6. “Ғ.Сәләмдең “Шоңҡар” поэмаһында йәмғиәт һәм шәхес проблемаһы сағылышы” тигән темаға доклад әҙерләргә.
7. Ғ.Сәләмдең “Бала” поэмаһына рецензия яҙырға.

## ӨСӨНСӨ БҮЛЕК

### Утыҙынсы йылдар геройы егерменсе быуат башҡорт әҙәбиәте традициялары һәм новаторлығы системаһында.

Утыҙынсы йылдар осороноң ыңғай һәм ҡаршылыҡлы тенденцияларын дөйөмләштергән геройҙар концепцияһын ҡарап үттек. Утыҙынсы йылдар әҙәбиәтенең төп геройы 20-се йылдарҙан айырылып тора, үҙенсәлекле. Ул - иҫке йәмғиәтте емереп ташлаусы ғына түгел, яңыны төҙөүсе, актив эшмәкәр, героик-романтик характерлы, ижтимағи һыҙатлы, патриот, теремек гражданин. Осорҙоң ыңғай һәм ҡаршылыҡлы тенденцияларын дөйөмләштергән геройҙар характерын һүрәтләгәндә лә әҙиптәр тапалған юл, шаблон образ менән генә эш итмәй. Тормош төрлө яҡлы сағылышын таба. Осор һыҙаттары төрлө яҫылыҡта һүрәтләнә. Герой концепцияһында идеаль образдан ҡатмарлы характерға табан һүрәтләнеш эволюцияһын билдәләп булыр ине.

Әммә әле был тикшеренеүҙәрҙең бер яғы ғына. Заманалар үҙгәрә – заңдар үҙгәрә. Һуңғы йылдарҙағы үткәндәргә яңы тарихи баһа әҙәбиәттә лә геройҙарҙы өр-яңы яҡтары менән асты. “Тарих үҙ заманында “ыңғай” тип баһаланған, маҡталған геройҙарҙың эштәренең һәр ваҡытта ла ыңғай булып та бөтмәүен күрһәтте, “кире” критерийы менән билдәләнгән әҙәби типтарға ла концепциялар үҙгәрҙе, үткәндәрҙе юллаған әҫәрҙәргә шул уҡ геройҙар, шул уҡ революция, граждандар һуғышы, утыҙынсы йылдар социалистик үҙгәртеп ҡороуҙар мөхитенә бөгөнгө көн баһаланышында, концепцияһында инеп китте”,- тип билдәләй Р.Н.Байымов.

Был бүлектәге тикшеренеүҙәрҙең маҡсаты – утыҙынсы йылдар геройын XX быуат әҙәбиәте геройы эволюцияһында, фонында ҡарау. Сөнки әҙәбиәттәр үҫеше һәр саҡ үҙ-ара ижади бәйләнештә. Һәр новатор күренеш традициялар нигеҙендә үҫә. Традицияларҙың һәр дәүер менән бәйле өр-яңы аспекттары асыла. Алдан уҡ шуны ла әйтергә кәрәк, бүлектә XX быуат башҡорт әҙәбиәте үрнәктәренең барыһын да солғап алыу күҙ уңында тотолмай. Фактик материал итеп ҡайһы бер әҙәби өлгөләр генә алынды. Беҙҙең маҡсат – совет ҡоролошоноң 30-сы йылдар әҙәбиәте тотоп алған, әҙәби геройы аша һынландырған ҡайһы бер үҙенсәлекле тенденцияларҙың артабанғы әҙәбиәттәрҙә үҫтерелеше ниндәй концепциялар аша һүрәтләнеүен ҡарау.

Утыҙынсы йылдар әҙәбиәте геройы совет осоро әҙәбиәтенең геройы формалашыуҙа төрлө яҡлап та әҙәби ориентир, этәргес булды. Беренсенән: әҙәбиәттең төп ыңғай геройы – совет кешеһе образы формалашыуҙа. Геройҙың утыҙынсы йылдарҙан килгән төп һыҙаттары, утыҙынсы йылдар әҙәбиәте тотоп алған совет ҡоролошоноң үҫеше барышындағы төп тенденциялар артабанғы әҙәбиәттә тағы ла тәрәнерәк, ҡалҡыуыраҡ сағылыш алды. Совет йәмғиәтенең мөһим проблемалары итеп күтәрелде. Икенсенән, ҡаршы полюстағы кире тенденцияларҙы һүрәтләүҙә лә әҙиптәр үткәндәрҙән сығып эш итте. Йәмғиәттең тарихи үҫешендәге аҡ таптарҙы бөгөнгө көн күҙлегенән биргән күп әҫәрҙәр барлыҡҡа килде. Революция, граждандар һуғышы осорондағы төрлө сәйәси хәрәкәттәр, утыҙынсы йылдарҙағы коллективлаштырыу кеүек өйөрмәләр хаҡында бик күп әҫәрҙәр ижад ителде: Ә.Хәкимдең “Өйөрмә”, Р.Солтангәрәевтың “Осто бөркөт”, М.Ямалетдиновтың “Ҡотолоу юлҡайҙарын тапманым”, Я.Хамматовтың “Комбриг Мортазин”, Ғ.Хисамовтың “Тамып та ғына ҡала ҡандары”, Р.Байымовтың “Яуап бирер көн”, “Сыбар шоңҡар”, Н.Мусиндың “Таң менән сыҡ юлдарға”, Т.Ғарипованың “Бөйрәкәй” һ.б. әҫәрҙәрҙә совет ҡоролошоноң теге йәки был ҡаршылыҡлы яҡтарын, проблемаларын, заманында кире тип нарыҡланған күренештәрен әҙәби юллау алып барылды. Мәҫәлән, А.Таһировтың “Ҡыҙылгвардеецтар”, “Ҡыҙылармеецтар” дилогияһындағы, И.Насыриҙың “Күҙәй” романындағы карикатур З.Вәлиди образы Р.Байымовтың “Сыбар шоңҡар” романына киң эрудициялы, оҫта



тактикалы, абруйлы, юғары мәҙәниәтле сәйәсмән, халҡының һәм иленең милли ҡаһарманы булып инеп китте.

Бөгөнгө көн баһаһы кире геройҙарға ла, тарихи-революцион әҫәрҙәрҙәге осор сәйәсәтенең яҡтыртылышына ла концепцияларҙы үҙгәртте.

И.Насыриҙың “Күҙәй” романында “…революция беҙгә үҙебеҙҙең динебеҙҙе һәм милләтебеҙҙе һаҡлар өсөн кәрәк”,- тигән, юғары даирәләге муллалар менән йыйылыштарҙа ла башҡорт халҡы мәнфәғәте тип янып йөрөгән Ҡарабаштың телмәрҙәре һәм эшләгән эштәре уны буржуаз милләтсе тип күрһәтеү, фашлау алымы булһа, бөгөнгө көн уҡыусыһына ул милли характер булараҡ якын.

Яңы социалистик йәмғиәттең, совет ҡоролошоноң әле яңы ғына тамырлана башлаған һәм артабанғы әҙәбиәттә мөһим проблемалар итеп күтәреләсәк башҡа төп тенцияларын яҙыусылар әле утыҙынсы йылдарҙа уҡ тотоп алғайны. Шуларҙың бөтә совет әҙәбиәттәре өсөн дә иң глобаль һәм үҙәк булғаны - революцион үҙгәртеп ҡороуҙар һәм кеше яҙмыштары мәсьәләләре. Был концепция Әхмәт, Шәрәфи һ.б. типтарҙа бирелеп, яңы йәмғиәттең ҡоролошо һәм идеологияһы тыуҙырған тенденция итеп ҡуҙғатыла.

Коллективлаштырыу кеүек социалистик үҙгәртеп ҡороуҙар һынылышлы ваҡиғалар булыуы менән революция, граждандар һуғышы кеүек буталсыҡлыҡтарға, ҡатмарлылыҡтарға тиң. Бер нисә тиҫтә йылдар үткәс тә башҡорт яҙыусыларының геройҙар концепцияһында тарихты яңынан күҙҙән үткәреү, тарихи хәрәкәттең кеше яҙмыштарына емергес тәьҫир итеүсе боролошло йылдар булыуы сағылды. Ә.Хәкимдең “Өйөрмә” романында Сәләхетдин, Т.Ғиниәтуллиндың “Михнәттәр” әҫәренән Ғәлиәхмәт, Т.Ғарипованың “Бөйрәкәй” романынан Диңгеҙхан-Сибәғәт кеүек бер нисә геройҙы һанап үтеү ҙә етә.

Шәрәфи, Сибай (И.Насыри “Еңелгән ятыу”, “Сибай”) Ишми (С.Ҡудаш “Хат”), Сырлыбай (С.Мифтахов “Һаҡмар”) кеүек геройҙар концепцияһында яңы йәмғиәт, яңы кеше өсөн идеологик көрәш конкрет милли үҙенсәлекле булыуы менән бергә, ғаилә мөнәсәбәте аша яҡтыртылыуы менән тағы тормошсан төҫ ала, конкретлаша төшә, яңы аспекттары асыла. Әгәр ҙә иҫке йәмғиәттең элекке тәртиптәрҙе яңынан тергеҙеү һәм һаҡлап ҡалыу өсөн яңы йәмғиәт менән идеологик көрәше Ғинди Сәғидуллин һәм Әхмәҙулла

мулла (А.Карнай “Беҙ ҡайтырбыҙ”), Билал Ҡадыров һәм Дутов, Колчак һ.б. (А.Таһиров “Ҡыҙылгвардеецтар”), Юлай һәм Әхмәт, Алаҡай (С.Мифтахов “Һаҡмар”) араһындағы айырым синфи төркөмдәр бәрелеше итеп күрһәтелһә, Шәрәфи, Сибай кеүектәрҙең ғаиләһе менән конфликтында яңы ҡараштар менән “иҫке” ҡараштар бәрелешен, революцион һәм социалистик үҙгәрештәрҙең “ата-әсәләр һәм балалар”, “ата һәм ул”, “ғаиләлә икегә бүленеүҙәр” кеүек проблемаға алып килеүе лә дөйөмләштерелә, конкрет күҙ алдына баҫа.

“Аталар һәм балалар” – әҙәбиәт өсөн дөйөм традицион проблема. Һәр дәүерҙә ололар һәм йәштәр ҡараштарының конфликтка килеүе төрлө яҫылыкта сағылышын тапҡан. Ошо проблемаға рус әҙәбиәтендә И.С.Тургеневтың “Аталар һәм балалар” тигән роман ижад итеүе билдәле. Унда ике быуын ҡараштары бәрелешкә инә. Ошо традицион проблемаға, темаға утыҙынсы йылдарҙа яҙыусылар ҡабат әйләнеп ҡайтты. Башҡорт совет әҙәбиәте өсөн ул яңы күренеш. Өлкән быуын менән яңылыҡ вәкилдәренең тормошҡа ҡараштарының тап килмәүе ғаилә мөхитендә бирелеп, ул замандың тағын бер ҡатлаулы яғын аса. Был концептуаль проблеманы А.Карнай “Беҙ ҡайтырбыҙ” повесында төп герой Ғинди Сәғиҙуллин менән атаһы Нәрттин ҡарт мөнәсәбәте аша ҡалҡыу ғына итеп биреүгә ирешкәйне. Һ.Дәүләтшинаның “Һылыуҡай-пионерка” хикәйәһендә Төңөлдөк әбейҙең ейәнсәре Һылыуҡай пионер галстугын тағып ҡайтҡас, сикһеҙ шатланыуын күреп, “ҡыҙ балаларға килешмәгәнсә һикерәндәп йөрөүен” өнәп етмәүе аша ниндәйҙер кимәлдә яҡтыртылғайны. Әммә Һ.Дәүләтшина Һылыуҡайҙың пионер булыу шатлығын мәктәп эштәрендә актив ҡатнашыуын, мәктәптән ҡайтҡас та, клубҡа концерт репетицияларына ашығыуын йәш ҡыҙҙың телмәре аша бирҙе, шуға күрә хикәйә Һылыуҡай тормошонан “ҡыҫҡа репортажды хәтерләтеп”[108], геройҙарҙың көнкүрешен теҙеп һөйләп сығыуға ҡоролғанлыҡтан, характерҙар тулыһынса күҙ алдына баҫып етмәне.

Шәрәфи, Сибай, Сырлыбайҙарҙың ғаилә ағзалары менән

[108] Минһажетдинов М. Ҡәләмендә ҡөҙрәт бар. -Өфө: Китап, 1995. -19-сы бит.



конфликтҡа килеүе “ике яҡ”тың да характер активлығынан килә. Улар араһындағы бәрелеш киҫкен төҫ алып, геройҙарҙың яҙмыштары ҡырҡа үҙгәреүгә алып килеүе күренә. Сибай һәм ҡыҙы Ниса, Шәрәфи һәм улы Рәшит, ҡыҙы Саимә (И.Насыри “Сибай”, “Еңелгән ятыу”), Ишми һәм комсомолец улы (С Ҡудаш “Хат”), Сырлыбай һәм ҡыҙы Айһылыу (С.Мифтахов “Һаҡмар”, “Дуҫлыҡ һәм мөхәббәт”) араһындағы мөнәсәбәттәрҙең йәштәрҙең ата йортон ташлап сығып китеү кульминацияһына етә. Сырлыбай Үлмәҫбикә йоғонтоһонда ҡыҙына ҡул күтәргәндән һуң, Айһылыу яҙмышын ата йортонан айырһа, Шәрәфиҙең башҡаларҙан айырылып йөрөүе, тиҫкәре холҡон ташламауы – Рәшит менән Саимәнең ситкә сығып китеүенә сәбәпсе. Авторҙар йәш геройҙарының бындай ҡарарға килгәнгә тиклем оҙаҡ уйланыу-ғазаптарын деталле һүрәтләүгә ҙур ғына урын бирә. Башҡаларҙан уңғанлығы, егәрлеге менән айырылып торған, комсомолецтар менән бергә колхоз эшенә дәртләнеп йөрөгән Саимә менән атаһы араһында киҫкен һөйләшеүҙә, Саимәнең үҙ-үҙенә ҡул һалырға ла уйлап ҡуйыуында күренә. Өлкән быуындың яңы йәмғиәт тәртиптәренә ҡарашында йәш быуынға ҡарағанда киҫкен контраслыҡ ятыуында тәүгеләренең характерында, йәшәү рәүештәрендә, милли һыҙаттарҙың нығынған традицияларҙың тотороҡло булыуы, үҙгәреүҙәргә тиҙ генә бирелмәүе күренә.

Социаль-тарихи шарттарҙың, боролошло йылдарҙың ғаилә мөхитенә ҡырҡа тәьҫире концепцияһы туған менән туған араһындағы киҫкен мөнәсәбәттәргә ҡоролған ваҡиғаларҙа ла сағылышын тапты. Асылда, бындай герой типтарында алда әйтеп үтеүебеҙсә, революцион үҙгәрештәрҙең ғаилә мөхитендә ҡараштар айырымлығына алып килеүенең социалистик тәртиптәр осоронда яңынан ҡабыныуын һүрәтләү урын алды.

Баррикаданың ике яғында торған ағалы-ҡустылы бер туғандар образдары шулай уҡ революциянан һуңғы әҙәбиәтебеҙ өсөн яңы күренештәр һәм яңы типтар булды. Утыҙынсы йылдарҙа ижад ителгән тарихты юллаған әҫәрҙәрҙә ундай геройҙар күп түгел. Хатта Афзал Таһировтың “Ҡыҙылгвардеецтар”, “Ҡыҙылармеецтар” дилогияһындағы Ғафар менән Мәғәфүрҙән башҡа осратып булмай тиһәк тә, яңылышмабыҙ. Бер туған Ғафар менән Мәғәфүр граждандар һуғышы осоронда баррикаданың ике яғында ҡала, Ғафар яңы йәмғиәт өсөн көрәш юлына баҫа, Мәғәфүр ҡаршы позицияны

һайлай. Ошо ике герой яҙмышында дәүер ысынбарлығы ҡатмарлы яҡтары менән асыла. Мәғәфүр аҡтар армияһына ҡушылып китә. Ул яңы тәртиптәр менән бәрелешкә килеүендә Шәрәфи, Григорий Мелехов типтарына яҡын. Әлбиттә, Афзал Таһиров дилогияла геройҙар бәрелешен эпизодик рәүештә генә һүрәтләй, әммә проблема актуаллеген билдәләп китеүгә өлгәшә. Рус әҙәбиәтендә Л.Леоновтың “Барсуки” романында шундай геройҙар конфликтты ойоштороуҙа ҙур урын тота. Бер туған Павел һәм Семен Рыхлеевтарҙың ҡапма-ҡаршы позицияға баҫыу сәбәптәре менән күңел торошо алғы планда тора. Ғафар менән Мәғәфүрҙең икәүҙән-икәү ҡалып, улар араһындағы киҫкен диалогты һүрәтләгән эпизод һәм Семендың Павел менән туғай ауыҙында икеһе генә һөйләшеүендә ваҡиғалар оҡшашлығы ла бар. Әммә һәр герой үҙенсәлекле милли колоритлы.

Геройҙарҙың яҙмыштары хәл ителеүҙә лә айырмалыҡ бар. Ғафар ҡустыһы Мәғәфүрҙе атып үлтерә. Автор большевиклыҡ идеяһын өҫкә сығарып, геройының күңел ғазаптарының тиҙ хәл ителеүен бирә. Автор улар араһындағы мөнәсәбәтте биреүҙә социалистик реализмдың тар рамкаларынан ситкә сыҡмай эш итә. Ғафарҙы иптәштәре “унтер-офицер Мәғәфүр кеүек туғаныңдың булмағаны яҡшы” тип йыуата. Л.Леонов был мәсьәләгә бер яҡлы ғына ҡараштa түгел. Павел менән Семендың араһында туғанлыҡ хистәре өҫтөнөрәк булыуын һүрәтләй. Павелдың “аралар бер нисә генә аҙым булып, атырға мөмкинселек булғанда, кире ебәреп дөрөҫ эшләнемме икән?” тигән борсолоулы уйланыуҙар кисереүен бирә.

Мәғәфүр ҡатмарлы яҙмышлы булыуы менән Шәрәфиҙәр һымаҡ уҡ. Уларҙан айырмалы, Мәғәфүр үҙ хосуси милеге өсөн көрәшкә ҡорал менән күтәрелгән. Шәрәфиҙәрҙән тағы ла уларҙы шул айыра: Мәғәфүр кеүектәр көрсөктән сығыуҙың башҡаса юлын һайлай алмауҙары, компромисҡа ҡарағанда нәфрәт көслө булыуҙары менән үҙ яҙмыштарының бөтөнләй көтөлмәгән боролош алыуына сәбәпселәр. Шундай типта Фәйзулла (С.Кудаш “Ҡушҡайын”), Хәсән (К.Мәргән “Хәсәндең яҙмышы”). Улар тағы драматигыраҡ типтар: шәхес күсеү осоронда дөйөм мөхиттән айырылыу менән деградацияға килә. К.Мәргәндең “Хәсәндең яҙмышы” хикәйәһендә төп герой “һеҙҙең колхозһыҙ ҙа йәшәй алырмын тип”, ситкә сығып китә, алдашыу, урлашыу, алыпһатарлыҡ юлына баҫа, ахыр сиктә



ауылдаштары алдында хурлыҡҡа ҡала. Сәйәси ваҡиғаларҙың ҡырыҫ йоғонтоһо һөҙөмтәһендә кеше шәхес булараҡ юҡҡа сыға.

Әгәр ҙә Шәрәфи, Сибай (И.Насыри “Еңелгән ятыу”, “Сибай”), Сырлыбай (С.Мифтахов “Һаҡмар”), Сөләймән (Ғ.Хәйри “Ҡатын”) бик оҙайлы, ҡатмарлы, трагик моменттарҙан һуң, яҙмыштары эволюцияла бирелеп, улар яңы тәртиптәрҙе ҡабул итеүгә күҙ йәштәре аша булһа ла килһәләр, Мәғәфүр, Фәйзулла, Хәсән яҙмыштары мөхиттән, халыҡтан айырылған. Был яғы менән Григорий Мелехов яҙмышы уларҙың характерына яҡын. Мәғәфүр, Фәйзуллаларҙы милексе итеп формалаштырран сәбәптәр, яңы ҡоролош шарттары кеше яҙмыштарын тамырынан үҙгәрештәргә алып килә.

Үҙ ғүмеренә байҙар көтөүен көткән Шиһап ҡарттың улдары Ғафар һәм Мәғәфүрҙең тормоштарын билдәләүсе шарттар төрлө булһа, Ҡушҡайын ауылы кешеләре Фәйзулла менән Нуруллаһың яҙмыштары революцияға тиклем бер үк. Мәғәфүрҙең ағаһы Ғафар старшинаға йылҡы көткән, һабан һөргән, бесән сапҡан, утын әҙерләгән, ҡустыһы Мәғәфүрҙе уҡытырға тырышҡан, һалдат михнәттәрен аҙ татымаған кешенең ҡыҙылдар отрядына ҡушылып совет власы өсөн үҙен аямай көрәшеүе осраҡлы түгел. Ә йәштән донъя михнәтен, байҙар ҡамсыһын күрмәй үҫкән, һалдат һурпаһын татымаған, империалистик һуғыш башланғас, мулла һуғыштан йолоп алып ҡалған, мулланың сауҙалығы менән байып киткән, урта хәлле, йортло, атлы, тәрән кеҫәле, киң ҡуллы сауҙагәр Мәғәфүрҙең үҙ мөлкәтен һаҡлау өсөн аҡтар отрядында йөрөүе лә аңлашыла. Мәғәфүрҙән айырмалы, Фәйзулла (С.Ҡудаш “Ҡушҡайын”) Нурулла, Шәрәфиҙәр кеүек “аҫтан күтәрелгән ҡатлам,...Фәйзулла ла Нурулла шикелле үк Октябрьға тиклем, нужа һурпаһын һемереп үҫкән крәҫтиән”.[109] Октябрь боролоштарына ҡәҙәр Нурулла ла, Фәйзулла ла бер үк яҙмышлы: хәйерселекте үҙ елкәһендә күп татыған, “сереп бөткән ептәй берсә өҙөлөп, берсә ялғанып, ҡайһы ваҡыт ике арбалы булып, ҡайһы ваҡыт бөтөнләй бөлөп йәшәгән” Фәйзулла Совет власы осоронда, нэп дәүерендә ер алып хужалығын тиҙ арала аяҡҡа баҫтырған, малын ишәйткән, йорт-ҡураһын бөтәйткән йәки Нурулла,

[109] Сәйфи Ҡудаш ижады. Әҙәби-тәнҡит мәҡәләләр йыйынтығы //Төҙөүсеһе С.Сафуанов. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1986. -43-сө бит.

Шәрәфиҙәр кеүек үҙ ҡул көсө менән күтәрелгән, “сығышы бай ҡатламдан, йоҡанан да түгел, уртаса булған крәҫтиән”[110]. Фәйзулла, Мәғәфүрҙәрҙең яңы ҡоролошҡа ҡаршы килеүенең бер сәбәбе шул булһа, икенсе сәбәбе - байҙар йоғонтоһоноң һаман да көслө булыуы. И.Насыри, С.Ҡудаш шул осор шарттарҙы конкрет кеше характерҙарында бирә. Шәрәфи Иван Иванович кеүек урыҫ байында ныҡлы терәк тапһа, Фәйзулла Усман, Хәким байҙарға ылыға, Яҡуп бай менән араһын ҡоҙалыҡ ептәре менән нығытҡан. Байҙар кәңәше менән улар һәр ситуацияла хәйләкәрлек, үҙенә уңайлы юл менән эш итеүгә өйрәнәләр, ә А.Таһиров Мәғәфүрҙең көслө ҡаршылығының сәбәптәрен, буталсыҡ заман шарттарын әҫәр контексында һалдаттар телмәрендә, Мәғәфүрҙең ағаһына әйткән һүҙҙәрендә бирә.

– Бына һин, Тукһанбаев, үҙең ярлы кеше балаһы тиһең, атайың һалсы икән, атығыҙ, һыйырығыҙ ҙа бер генә икән, шулай булғас, ниңә Совет власына ҡаршы ҡорал күтәреп сыҡтығыҙ?- тип һораны. Туҡһанбаев: “...-Әллә”,- тине. Икенсе берәүһе уның өсөн яуап биргәндәй:

– Беҙҙе алданылар бит, Башҡорт автономияһы өсөн һуғышырға кәрәк, большевиктар башҡорттарҙың ерҙәрен рустарға бирәләр, тинеләр...

– Өсөнсө һалдат уның һүҙен бүлде:

– Дөрөҫөн әйткәндә, беҙҙе көсләп мобилизовать иттеләр. Ул саҡта кемгә ҡаршы, ни өсөн икәнен әйтеүсе булманы, тик Ырымбурға килгәс кенә, автономия тип баш ҡатырҙылар,- тине.

Мәғәфүрҙең Ғафарға әйткән һүҙҙәрендә лә халыҡтың яңы властҡа ышанып бөтмәүҙәре сағылып ҡала. “Большевиктарға эйәреп ил таларға, кеше малын тартып алырға сыҡҡанһығыҙҙыр бит, кем белә, бәлки кеше малын талап байығас, һеҙҙә лә кибеттәр асып, сауҙа итергә ниәт барҙыр, уныһы миңә ҡараңғы”,- ти Мәғәфүр.

Геройҙарҙың төрлө юлдар менән һәм төрлө характерҙа ҡаршылыҡ күрһәтеүе - бунтарлыҡтың төрлө юлдары ул. Шәрәфи үҙен коммунистар балыҡсылар бригадаһына бригадир итеп ҡуйырға тәкдим иткәс, тәүҙә ризалашмай, һуңынан “мин ризалашмаһам, башҡа берәүҙе ҡуйырҙар” тип үҙенә уңайлы булһын өсөн Совет

[110] Ҡудаш С. Ҡушҡайын. -Өфө: Башҡортостан китап издательствоһы, 1959. -96-97-се биттәр.



власына ҡаршы кешеләрҙән бригада төҙөй. Балыҡтарҙы улар колхозға тапшырмайынса йәшереп һатып йөрөйҙәр, хәйләкәрлек менән эш итәләр, ә Фәйзулла улдарын айырым хужалыҡ итеп айырып сығара, мөлкәтен аҙ итеп күрһәтергә тырыша. Шәрәфи шундай бунтарь булһа ла унда Шәрәкәй, Хәлил мәзиндәрҙәге кеүек мәкерлелек, ҡороткослоҡ итеү уйҙары бөтөнләй юҡ. Фәтхи батҡанда ла, ул кемдән дә булһа ҡурҡып, яуаплылыҡка тарттыраласағын уйлап түгел, ә батып барған кешене ҡотҡарыу уйынан һыуға ташлана. Фәйзулланың артабанғы яҙмышында автор синфи дошман айырылып сығыуын күрһәтһә лә, актив емереү юлын һайлауы тиҙ генә хәл ителгән юл түгел, уның күңел тартҡылашыуҙары, оҙаҡ ҡына ғазаптар сигеүе сағыла:

*Башында һуғышкан ике уйҙың*
*Береһе сығармаҫҡа тағыла.*
*Береһе ягаһынан тотоп һөйрәй*
*Буҫаганың арғы ягына.*

Тимәк, геройҙарҙың ике юл сатында ҡайһы юлды һайларға тартҡылашыуы, ахыр сиктә килеп, һәр ҡайһыһы төрлө-төрлө һуҡмаҡ һайлауҙары – “социаль тетрәү ваҡытында синфи айырымланыуҙың ҡотолғоһоҙ факторҙарының”[111], яңы ҡоролоштоң урынлаштырылыуы ҡоралды юл менән, кеше яҙмыштары өсөн көрәш менән яуланыуының художестволы кәүҙәләнеше булып күҙ алдына баҫа.

Бындай герой типтарын аса барыу шундай һығымталар яһауға, үҙенсәлектәрен күреүгә килтерә: беренсенән, абстракт-схематик образдарҙан ҡотола барып, реалистик характерҙарҙың тормоштағыса ҡатмарлы итеп биреүгә ирешә барыу яҙыусыларҙы һүрәтләнгән ваҡиғаларҙың эске логикаһын художестволы танып белеүгә, ысынбарлыҡҡа тарихи ҡараштың үҫеүенә, нығыуына, юғары кимәлдә сәнғәтсә оҫта бирелеүенә алып килә. Тарихилыҡ факттарҙы, документаль материалдарҙы теркәп сығыуҙан йәки теҙеп

[111] С.Ҡудаш ижады: Әҙәби-тәнҡит мәҡәләләр йыйынтығы //Төҙөүсеһе: С.Сафуанов. -Өфө: СССР ФА БФ, 1986. -44-се бит.

һөйләп сығыуҙан геройҙың көнкүрешендә, йәшәү рәүешендә, әйләнә-тирәләге мөхит атмосфераһында уңышлы асыла, ижтимағи-сәйәси ваҡиғалар милли ерлек аша типиклаштырылып бирелә; икенсенән, герой мөхит менән айырылғыһыҙ берлектә икәнлеге дәлилле бирелә, бөгөнгөһө менән үткәндәре араһында диалектик бәйләнеш эҙмә-эҙлекле, көндәлек ябай тормошо аша асыла. Характерҙың милли һыҙаттары ҡалҡыуыраҡ һүрәтләнә. Мәҫәлән: И.Насыри “Еңелгән ятыу” повесының башында уҡ ваҡиғаларҙы Шәрәфи үҫкән Ымыҡ йылғаһы буйҙарын оҙон-оҙаҡ, тәфсилләп һүрәтләүҙән башлай. Өсөнсөнән, бындай герой концепцияһында ижтимағи ваҡиғаларҙан кеше яҙмыштарының беренсе планда тороуы әҙәбиәт өсөн яңы күренеш. Шәхес тормошондағы көтөлмәгән боролоштарҙың ижтимағи ваҡиғалар менән билдәләнеүе ғаилә, шәхси мөнәсәбәттәр, милли ерлектә асыла.

А.Таһиров дилогияһында ағалы-ҡустылы Мәғәфүр һәм Ғафар мөнәсәбәттәрендәге эпизодик рәүештә генә бирелгән боролошло йылдарҙың ҡатмарлы ысынбарлығы З.Биишева трилогияһында Таибә әбейҙең улдары Хаммат, Хисбулла, Закир яҙмыштарында конкретыраҡ һәм тулыраҡ үҫеш алды. Хаммат Ғафар кеүек көрәшсе большевик-революционерҙар тибының үҫтерелеше булһа, Закир ике ҡоролош, ике идеология көрәше мәлендә үҙенең юлын таба алмаған, ошо үҙгәрештәр яҙмышына ҡырҡа тәьҫир яһаған халыҡтың бер ҡатламын дөйөмләштерә. З.Биишева трилогияһындағы Хаммат һәм Закирҙың бәләкәйҙән үк һалынған характер һыҙаттарын һүрәтләү, икеһе ике төрлө юл һайлауҙарының сәбәптәрен биреү А.Таһиров романындағы һүрәтләүҙәр менән ауаздашлыҡ таба.

Заман идеологияһының кешеләрҙе хатта бер ғаилә эсендә ҡатламдарға бүлеүен утыҙынсы йылдар әҙәбиәте тотоп алды, артабанғы әҙәбиәттәр өсөн совет ҡоролошо эсендәге был тенденциоз проблеманы һүрәтләүгә нигеҙ һалды.

Утыҙынсы йылдарҙа яҙыусылар геройҙарҙың рухи донъяһындағы коллизияларға алып килгән башҡа сәбәптәрҙе лә асырға тырыштылар.

Геройҙың әхлаҡи, рухи юғарылыҡҡа ынтылыуы камил шәхес булыу өсөн көрәшеүе хаталаныуҙар, яңылышыуҙар аша барыуы сағыла. Был, әлбиттә, замандың социаль-тарихи



шарттарының үҙгәреүе менән дә бәйле. Тормоштағы конфликттың синфи айырымлыҡтары юйыла барған һайын ”тыныс шарттарҙа” кеше өсөн көрәш геройҙы башҡа “өлкәләрҙән” эҙләүгә килтерә. Әҫәрҙәрҙә конфликт та үҙгәрҙе, ул характерҙарҙың хис тойғоларының, күңел кисерештәренең бәрелешенә ҡоролдо, шуның менән “рухи өлкәлә эҙләнеүсе” актив геройҙы һүрәтләү әҙәбиәткә психологизмдың ныҡлап үтеп инә башлауына ла сәбәпсе булды. Әҙиптәр геройҙар характерын уй-монологтары, хистәр өҙгөләнеүе, үҙгәрештәре аша тормошсан итеп бирергә тырыштылар. Сәйҙел менән Зәйнәб (Ғ.Сәләм “Бала”), Юлай (С.Мифтахов “Дуҫлыҡ һәм мөхәббәт”), Сәғитйән, Рәшит Мазһаров (Ғ.Хәйри “Өсәүҙең тарихы”) кеүек геройҙар шундайҙарҙан. Уларҙы Һ.Дәүләтшинаның “Айбикә” һәм “Башаҡтар тулҡыны” повестарындағы Юлдыбай һәм Шакир менән сағыштырып ҡарау утыҙынсы йылдар геройының характерындағы оҡшаш һәм айырмалы яҡтарын рельефлыраҡ күрһәтә. Юлдыбай ҙа, Шакир ҙа ҡоралл көрәш осоро ижтимағи геройҙар булыуы менән Билал Ҡадыров, Ғинди Сәғиҙуллин, Ғимай Басыров типтарына оҡшаһа, күсеү осоронда тиҙ генә дөрөҫ юл табып башҡаларға ҡушылып китә алмаған ҡатмарлы яҙмышлы булыуы менән Шәрәфигә, Нуруллаға яҡын. Асыҡтан-асыҡ көрәшкә өйрәнгән Юлдыбай тыныс тормош шарттарында көрәш атмосфераһының үҙгәреүе осоронда хаталаныуы менән Сәйҙел, Зәйнәп характерҙарына оҡшаш. Төрлө-төрлө социаль-ижтимағи характерлы, социаль-психологик, әхлаҡи-этик һыҙатлы заман кешеһен синтезлаштырыусы, бер-береһе менән бәйләүсе “арауыҡтағы” герой тибы ул. Был герой яҙмышында йәмғиәттең тарихи хәрәкәт үҫеше тағы ла эҙмә-эҙлекле художестволы кәүҙәләнеш ала. Сәйҙел, Зәйнәб, Юлдыбайҙағы ҡатмарлы коллизиялар сәбәптәрен тарихи контекстан башҡа күҙ алдына килтереүе ҡыйын. Заман атмосфераһы Әршит (Ғ.Сәләм “Бала”), Рәйсә (Һ.Дәүләтшина “Айбикә”) аша конкрет образдарҙа, конкрет кеше йөҙөндә бирелә. Юлдыбай империалистик һуғыш осорон, революцияны үтеп, Ҡыҙыл гвардия һалдаты булып, совет власын урынлаштырып йөрөгән һалдат тыныс тормошҡа күскәс үҙенең хата юлға баҫыуын да аңлап етмәй. Зәйнәп менән Сәйҙелдең яңылышыуын Әршитһеҙ аңлап булмаған кеүек Юлдыбайҙың

тормошон Рәйсәһеҙ күҙ алдына килтереп булмай. Юлдыбай менән Сәйҙел яңы тормоштоң камиллыҡҡа ынтылыусы, яуланған уңыштар менән генә тынысланырға яратмаған, хеҙмәт яратыусы, актив геройҙар. Юлдыбай ҙа, Һ.Дәүләтшинаның "Башаҡтар тулҡыны" повесындағы Шакир ҙа ҡулдарына ҡорал тотоп яңы тормош өсөн көрәшкән кисәге һалдаттар. Ҡоралды көрәштәр мәлендә кемдең дошман, кемдең дуҫ икәне асыҡ мәлдә актив көрәшһәләр, хәҙер баҙап ҡалып, хата юлға баҫалар. "Яңы тарихи шарттарҙың ҡатмарлы атмосфераһын баһалап еткермәйҙәр"[112]. Юлдыбай, мәҫәлән, ҡан ҡойоштар туҡтағас, тап ана шул идеаль тормош, тыуған иленә хеҙмәт итеү, бәхетле ғаилә төҙөү юлында аҙашҡан да инде: "... Быға тиклем интектереп килгән наҙанлығы - белем менән иҫкесә генә ҡоролған ғаиләһен "яңы культурный семья менән алмаштырырға"[113], "ҡатыны Рәйсә доктор булып уҡып сыҡҡас, киләсәктә бик күп эштәрҙе икәүләп башҡарыу" уйынан яңы юл һайлаған.

Сәйҙел менән Зәйнәбте лә улар рәтенә ҡуйып ҡарарға мөмкин. Уларҙы аҙашыуҙарға алып килгән сәбәптәрҙе заман идеологияһынан эҙләргә кәрәк. Әршит Сәйҙелгә:

*Ләкин иң ҡиммәтле - һин илеңә*
*Файҙалы кеше бул, туғаным...*
*Семьянан элек беҙҙең илгә*
*Герой кәрәк, данлы кешеләр.*
*Ә ундайҙар, иптәш,*
*Тыумай тар семьялар эсендә...*
*Ҡайҙа ул идеалдар?...*[114]-
тип әйтеүе менән дә хаҡлы кеүек.

Әршиттең тәүге осрашыуҙа Сәйҙелгә "Ҡайҙа ҙур идеалдар?" тип "әсенеп" әйтеүе фәлсәфәүи уйланыуҙарға этәрерлек, көслө тәьҫирле. Ул Сәйҙелгә бөгөнгө тормошонда үҙенән алда килгән быуындар һымаҡ уҡ ижтимағи

[112] Минһажетдинов М. Х. Ҡәләмендә ҡөҙрәт бар. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1997. -29-сы бит.
[113] Дәүләтшина Һ. Айбикә. -Өфө: Башҡ. китап нәшриәте, 1987. -55-се бит.
[114] Сәләм Ғ. Һайланма әҫәрҙәр. Бер томда. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1962. -295-се бит.



ынтылыштарҙы бөтәһенән өҫтөн ҡуйып йәшәргә өндәй. "Ҙур идеалдар ҙур эштәрҙә генә тыуа", ә тар семьялар эсендә быуыла, тип кешенең эштәренең ижтимағи яғы беренсе планда торорға тейешлеге хаҡында Сәйҙел күңеленә ойотҡо һала. Ижтимағи идеалдар өсөн көрәш дәүере геройҙарынан, Сәйҙел кеүек герой типтарының характер хәрәкәтенән тарихтың диалектик үҫеше, көрәштең "күсәгилешлеге" күҙ алдына баҫа. Әгәр ҙә революцион ваҡиғалар, социаль боролоштар, һынылышлы хәл иткес көрәштәр мәлендә заман геройының эштәре ижтимағи маҡсаттар менән билдәләнһә, "тыныс тормош" шарттарында кеше өсөн көрәш башҡа төҫ ала.

Ғ.Хәйризең "Өсәүҙең тарихы" повесындағы Рәшит Мазһаров үҙенең "бәхетһеҙлеге" менән Сәйҙел менән Зәйнәб образына һалынған концепцияны раҫлай. Рәшит бәләкәйҙән үгәй әсә ҡулында михнәттәр күреп, йәберһетеүҙәргә түҙеп үҫә. Ҡыҙылдар менән бергә граждандар һуғышында ҡатнаша, аслыҡ йылдарында заводта эшләй, Ҡазан эшселәр факультетын тамамлай, Мәскәүҙә уҡый, тормош баҫҡыстарында сынығып, хәҙер үҙ эшен яҡшы белгән экономист дәрәжәһенә тиклем күтәрелә. Яратҡан эшендә эшләп, тормош һынауҙарын ҡыйыу үтеп, бәхетле ғаилә ҡорһа ла, үҙен тулы бәхетле кеше итеп тоя алмай. Ғаилә тотҡаһы, киләсәге - балалары булмау сәбәпле Рәшиткә күңеленә йыуаныстарҙы һыраханала һыра эсеп көн үткәреүҙә табырға ҡала.

Ғ.Сәләм геройҙары Сәйҙел менән Зәйнәптең яҙмышы Рәшиттекенә оҡшаш. Улар Әршит һүҙенә алданып, хата юлға баҫалар, аңлы рәүештә баланан баш тарталар. Эпоханың бөйөклөгөнән, талаптарынан сығып ҡараһаң, Әршит хаҡлы ла кеүек. Әммә уның ысын йөҙө асыла барған һайын, "нсш-та химиянан дәрес уҡытҡан", итәк тулы бала үҫтергән Вәлишин образының, яңғыҙ ҡатын Нәзирәнең бер нигә ҡарамай балаһын тәрбиәләүҙә оло бәхет тойоуының бөйөклөктәре раҫлана бара. Тимәк, кешегә тулы бәхетле булыу өсөн ижтимағи маҡсаттар менән генә йәшәү етмәй. Һәр кемдең тормошта үҙ урыны бар. Шәхестең рухи бөтөнлөгө өсөн үҙен бөтә яҡлап та раҫларға тейеш. Кешенең йәшәүенең мәғәнәһе шәхси бәхет һәм ижтимағи маҡсаттар менән дә билдәләнә. Ғ.Сәләм поэмаһының

*Бына шулай беҙҙең быуында ла*
*Юкка сыға кай бер кешеләр*

тигән юлдарында "йәшәү өсөн һуҡмаҡ эҙләү" еңел генә булмауы сағыла. Сәйҙел менән Зәйнәбтең, Рәшит Мазһаров кеүектәрҙең тулы ҡанлы тормош менән йәшәргә ынтылыштары эске күңел конфликты аша асыла. Бындай геройҙар концепцияһында конфликт, әлбиттә, ғаилә мәсьәләләренә генә ҡайтып ҡалмай, ул тәрәндәрәк ята, заман шарттары менән бәйле геройҙың характерындағы әхлаҡи-этик коллизияларға ҡорола. Сәйҙел һәм Зәйнәп, Рәшит Мазһаров кешелек һыҙаттарына һынауҙы үтеп, эволюцияла бирелә. Финалда Сәйҙел һуғыштан орден-миҙалдар тағып ҡайтҡан, ҡулына сабыйын ҡосҡан герой итеп һүрәтләнә. Зәйнәп, Сәйҙелдәрҙең характер эволюцияһын күҙәтеү шундай һығымталар яһауға килтерә: автор ғаилә мөнәсәбәттәре аша һәр ваҡыт актуаль булған кешенең ижтимағи һәм шәхси тормошо кеүек мәсьәләләргә ҡағыла. Был осорҙа, ижтимағи маҡсаттар алға ҡуйылған мәлдә, Зәйнәп менән Сәйҙелдең яҙмышы дәүер шарттарына протест та кеүек. Сөнки Сәйҙел тап дәүер идеологияһын алға һөргән Әршит менән полемикаға ла инә. "Әршитлек – ул большевизм, революция менән тыуҙырылған идея"[115],-ти Р.Байымов. Ябай кешенең ижтимағи һәм шәхси тормоштарының бәрелеше яҙмышында һикәлтә, боролоштарға алып килә. Был тема кешене өйрәнеүсе әҙәбиәттә актуаллеген юғалтмай. Шулай итеп, шағир һәр заман өсөн дә әһәмиәтле, мәңгелек проблемаларҙың береһен күтәреп сыҡты.

Осор аҙағына табан яҙыусылар ысынбарлыҡтың ҡатмарлы яҡтарын тәрәнерәк өйрәнә барған һайын яңы яҡтарын астылар. Яңы ғына тыуып килгән тенденцияларҙы осорҙоң мөһим һыҙаты булыуына баҫым яһанылар. Былар заман геройҙарының "яңы әҙәби тибы тыуыуын, әҙәбиәттә проблемаларҙың һәм конфликттарҙың яңырыуын"[116] аңлатты.

Юлай (С.Мифтахов "Дуҫлыҡ һәм мөхәббәт") тибындағы

[115].Баимов Р.Н. Шаг в зрелость. -Уфа: Башк. кн. изд-ство, 1975. -С.136.
[116] Шул уҡ. -С.136.



геройҙар улар – йәшәп ятҡан системала моронлай башлаған кире тенденцияларҙы дөйөмләштергән ҡаршылыҡлы характерҙар. Бындай образдар өлгөләрендә тәнҡитле реализм һыҙаттары сағылышын, яҙыусының эстетик ҡараштарында алдан күреү, күҙаллау һиҙгерлеген тойоп була. Юлай кеүек ҡаршылыҡлы типҡа Ғ.Хәйриҙең "Өсәүҙең тарихы" повесынан Сәғитйән Ильясов яҡын.

Юлай, Сәғитйән характерҙары өр-яңы яҫылыҡтағы проблемаларҙы, осор тенденцияларын сағылдырыуҙары менән бер. Улар характерында йәшәп ятҡан системала тыуып килгән кире күренештәр тәнҡит ителә. Юлай, Сәғитйән кеүек геройҙарҙы һуңғы осорҙар әҙәбиәте геройҙарының "прообраздары"[117] тип әйтергә мөмкин. Бындай типтағы геройҙарға һалынған концепция 60-80-се йылдарҙа, тарихты яңы күҙлектән баһалау осоронда, үткәндәргә өр-яңы ҡараш ташлаған быуат аҙағында ижад ителгән әҫәрҙәрҙәге герой концепцияһында ҡабаттан сағылыш тапты. Юлайҙа шәхес культы һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән Мөхип Мөжипов (Д.Исламов "Йомарт ер"), чекист Бураншин (Ә.Хәкимов "Өйөрмә"), Аҫылғужа Назаров (Н.Мусин "Таң менән сыҡ юлдарға"), Ихсанбай (Т.Ғарипова "Бөйрәкәй") кеүек етәкселәр образдарының һыҙаттары асыла.

Юлай тибында С.Мифтахов етәксе һәм халыҡ, шәхес һәм йәмғиәт проблемаһын сағылдыра. Үҙенең дөйөм эш итеп янып йөрөүе, "Һаҡмар" колхозының яҙмышы өсөн ҙур яуаплылыҡ тойоуы менән Юлай халыҡтың ышанысын яулаған. Ул етәксе поста, колхоз рәйесе. Ҡаршылыҡлы ла герой ул. Халыҡҡа үҙ принциптарын һәм ҡараштарын көсләп тағыуын, эштең ул теләгәнсә башҡарылыуын башҡалар иҫәбенә булһа ла үтәлеүен бойомға ашырған етәксе образына, конфликттың киңерәгенә тартым ул. С.Мифтахов геройын көнкүреш планда асып бирһә лә, образға тәрәнерәк йөкмәтке һалынған. Юлай ҡатыны Айһылыуҙы ғаилә усағын ҡараусы, бала тәрбиәләүсе итеп кенә күрергә теләй. Айһылыуға: "Тамағың туҡ, өҫтөң бөтөн, һиңә тағы нимә етмәй",- тип бер яҡлы ҡараште тора. Был "патриархаль иҫкелек

[117]. Шул уҡ. -С.155.

ҡалдыҡтарының, ҡараштарының һаман да бөтөп етмәүе”[118] булмайынса, яңы конфликттарҙың утыҙынсы йылдарҙа уҡ билдәләнеүелер, сөнки “Һаҡмар” драмаһының дауамы булып ҡабул ителгән “Дуҫлыҡ һәм мөхәббәт”кә Юлай өлгөргән, сыныҡҡан, үҙе үк халыҡ тормошон яҡшыртыу өсөн иҫке тәртиптәр менән көрәшкән герой булып килеп инә. Шуға күрә Юлайҙың ҡатын-ҡыҙға иҫкесә ҡараш принцибынан Айһылыу менән конфликтҡа инеүе характер логикаһына ҡаршы килә. Шуға күрә лә Юлай характерының асылын шәхестең мин-минлеге, баш-баштаҡлығы, күрһәтмәләр менән эш итергә яратыуы тип баһаларға кәрәктер. Автор геройҙың шул һыҙаттары уның мораль деградацияға алып килеүен дә күрһәтә. Айһылыуҙы бөтә халыҡ алдында түбән һүҙҙәр менән кәмһетеүендә Юлайҙың әхлаҡи тарҡалыуы, түбәнгә тәгәрәй барыуы сағыла. Юлайҙың мин-минлегенең көслө булыуын уның характерына ғына ҡайтарып ҡалдырмайынса, тирә-яҡ мөхиттә уға тәьҫире көслө геройҙар барлығын да билдәләргә кәрәк. Мәҫәлән: МТС директоры Алтаев ҡатын-ҡыҙға түбәнһетеп ҡараған етәксе. Эш һорап килгән Айһылыуҙы ҡатын-ҡыҙға нисек кенә итеп ышанып трактор тапшыраһың, бейә һауырға ғына булдыралар,- тип бороп сығарып ебәргән Алтаев Юлайҙың хаталаныуын файҙаланып, колхоз эшенә аяҡ салырға уңайлы кеше итеп үҙҙәре яғына ауыштырмаҡсы.

Әлбиттә, С.Мифтахов Юлай кеүек етәкселәрҙең яҙмышын алдан билдәләй алмай. Герой драматик хаталар эшләп, ғаиләһе тарҡалып, халыҡ колхоз рәйеслегенән төшөрһә, артабан яҙыусы геройын коллектив йоғонтоһонда дөрөҫ юлға баҫтырып, яҙмышын заманса хәл итә.

Шәрәфи кеүек “индивидуаль бунтарсылар”, Юлай кеүек шул осорҙа моронлай башлаған кире күренештәрҙе үҙ характерында дөйөмләштереүсе геройҙар концепцияларында тәнҡитле реализм саҡтыларын тойомларға мөмкин. Сөнки Шәрәфиҙең яңы үҙгәрештәр менән ҡаршылыҡҡа инеүендә,

[118] Ғәйнуллин М.Ф. Башҡорт драматургияһының үҫеү юлдары. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1985. -71-се бит.



Юлайҙың, киреһенсә, етәксе-коммунистың, халыҡ менән идара итеүселәрҙең бер вәкиленең, массалар теләгенә ҡаршы килеүендә артабан әҙәбиәт өсөн мөһим булған совет ҡоролошо мәсьәләләре яҡтыртыла.

С.Мифтахов, Ғ.Сәләм, Ғ.Хәйри геройҙары аша бирелгән проблемалар 60-70-се йылдар әҙәбиәтендә, конкрет әйткәндә, Н.Асанбаевтың “Рәйсә”, “Фәйзи” дилогияһындағы төп геройҙар яҙмышында дауам иттерелә. Автор яңы ҡоролош кешеһенең формалашыуының ҡатмарлы ситуацияларҙа барыуын үҙ заманы шарттарында һүрәтләне. Фәйзиҙең “Һин ҡатын кеше, Рәйсә, һин - әсә..., эйе, һин яҡшы инженер булдың. Һүҙ юҡ. Ә ҡатын, әсә була алманың”[119],- тип шелтәләүендә Юлайҙың Айһылыуға әйткән һүҙҙәре яңғырай кеүек.

Ә бына Сәғитйән Ильясов образында заманында системаға тоғро ҡалып, халыҡ яҙмышы менән иҫәпләшмәйенсә эш иткәне өсөн өҙгөләнеүсе Ғәлиәхмәт Байрамғолов, Ниғмәт Хәкимов (Р.Байымов “Яуап бирер көн”) кеүек геройҙарҙың прообраздарын күрергә мөмкин. Сәғитйән яҙмышында автор тенденцияларға уратып ишаралап тормайынса, уның социаль-сәйәси ваҡиғаларҙы фәлсәфәле анализлауында осор һыҙаттарын туранан-тура уҡыусы алдына һала. Бындай геройҙар тибы утыҙынсы йылдар әҙәбиәтендә бөтөнләй осрамай. Повесть үҙе лә туҡһанынсы йылдарҙа ғына уҡыусы хөкөмөнә сығарылды[120], әҙәбиәт ғилемендә лә тейешле баһаһын алып бөтмәгән. Автор “көрәш өйөрмәһе эсендә буталып, үҙен-үҙе һәләк иткән”[121], “сигенеүгә дусар булған кешене үҙәк герой итеп алған”.[122] Сәғитйәндең йәмғиәт ысынбарлығы менән килешеп етмәүендә пассив булһа ла, күңел протесын күрергә мөмкин. Роберт Байымовтың 80-се йылдар аҙағында яҙылған “Яуап бирер көн” романы геройы Ниғмәт Хәкимовтың “Хаталар, хаталар... Юл сатындағы хаталар... Ерҙең ҡайһы бер хужаларын ул саҡта ерҙән

[119] Асанбаев Н. Һайланма әҫәрҙәр. -Өфө: Башҡ. китап нәшриәте, 1991. -47-се бит.
[120] Хәйри Ғ. Өсәүҙең тарихы. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1990.
[121] Шунда уҡ. -10 сы бит.
[122] Шунда уҡ. –8-се бит.

көсләп айырҙыҡ"[123] тигән һуңлап үкенеүҙәрен иҫкәртә кеүек. Ғ.Хәйри Сәғитйән образында заман геройының әхлаҡи һыҙаттарын шәхси хис-тойғолар аша аса.

Сәғитйән Ильясов индивидуаль бунтарлығы, трагик яҙмышы менән Шәрәфигә оҡшаш та, тап крәҫтиәндәрҙе коллектив хужалыҡтарға берләштереү кеүек социаль ваҡиғаларҙы үтәү барышында туранан-тура ҡатнашып, үҙ ҡулдары менән урта хәллеләргә, кулак тип нарыҡланғандарға "яза" сығарыусыларҙың бер вәкиле булыуы менән Шәрәфигә контраст та.

Сәғитйән – социалистик үҙгәртеп ҡороуҙарҙың башында йөрөп, һуңынан был социаль тетрәнеүҙәр халыҡ теләгенә ҡаршы килеүен аңлап, күңел ғазаптары кисереүсе заман геройы. Уның күңелендәге ҡаршылыҡтар көрәшенең сәбәбе – үҙ ҡулы менән башҡарған эштәрҙе әхлаҡи-этик планда баһалау. Алғы планда геройҙың күңел коллизиялары. Шуға күрә авторҙың ваҡиғалар барышын төп геройҙың көндәлеге формаһында биреү рух диалектикаһын эҙмә-эҙлекле күҙәтеүҙә уңышлы һайланған алым.

Сәғитйән Ильясов яҙмышында ла Шәрәфи, Әхмәт, Григорий Мелеховтарҙыҡы һымаҡ рухи трагедия, донъянан изоляцияланған шәхес трагедияһы асыла. Был изоляция - билдәле тарихи дәүер емеше. Был яңғыҙлыҡ геройҙарҙың Саяф (С.Агиш "Шартына килһен"), Ҡотоштар һымаҡ (Ғ.Хәйри "Өсәүҙең тарихы") шартына килтереп, яраҡлашып йәшәргә теләмәү, тормошта дөрөҫ һуҡмаҡ табырға тырышыу ынтылыштарының һөҙөмтәһе. Яҙыусылар бер генә кешенең трагедияһын сағылдырған кеүек, ә шул геройҙарҙы трагедияға алып килгән тарихи сәбәптәр әҫәр контексынан аңлашыла. Ул обьектив сәбәптәрһеҙ, мөхит шарттарынан башҡа герой характерындағы ҡапма-ҡаршылыҡтар бәрелешен аңлау ҡыйын. Шәрәфи, Григорий Мелехов, Әхмәттәрҙең актив рухи эҙләнеүҙәре тышҡы хәрәкәт итеүгә лә алып килһә, Ғ.Хәйри геройы пассив. Уның күңелендә синфи көрәшкә, заман ваҡиғаларына мораль-этик баһа үткәрелһә лә, йәмғиәттә барған күренештәргә ҡаршы көрәше юҡ.

[123] Байымов Р.Яуап бирер көн. -Өфө: Башҡ. китап нәшриәте, 1989. -168-се бит.



Әлбиттә, уҡыусы уның "пассивлығын" аҡлай, сөнки замандың аяуһыҙ тәгәрмәсе алдында әлегә ул көсһөҙ. Яҙыусы әле ул утыҙынсы йылдар заманында йәмғиәттә барған тәртиптәргә ҡаршы эске күңел протесы менән бирелгән геройҙы алыуы менән ҡыйыу аҙым яһаны. Уның геройында тәнҡитле реализм саҡтылары бирелде.

Тәү ҡарашҡа Сәғитйәндең трагик көрсөккә килеүендә яуапһыҙ мөхәббәт сәбәпсе кеүек. Автор әҫәрҙең башында уҡ Сәғитйән менән Мәхфүзә араһындағы мөхәббәткә төп иғтибар йүнәлтеүҙән башлай. Әммә был яуапһыҙ мөхәббәт хистәре – төп эске конфликтты ҡуйыртыусы ғына.

Осор һыҙаттары, шул осор ҡатмарлылыҡтары өс кеше яҙмышы аша сағылдырыла. Повеста төп геройҙар итеп алынған Мәхфүзә, Ҡотош, Сәғитйән утыҙынсы йылдарҙың өр-яңы йәш быуыны. Мәхфүзә ижтимағи маҡсаттарҙы үҙенең шәхси тормошонан да өҫтөн ҡуйған, дәртле, ҙур фиҙакәр эштәргә әҙер комсомолец-йәштәр, ижтимағи геройҙар тибы. "…бөгөнгө көндә һөйөүҙән дә әһәмиәтлерәк нәмәләр бар",- тиеүе уның характерын ғына түгел, осор һулышын да сағылдыра. Сәғитйән эргәһендә Мәхфүзә кеүек фанаттар бер яҡта булһа, икенсе яҡта – теләһә ниндәй шарттарға ла яраҡлаша алған Ҡотоштар ҙа бар. Һәр кем йәшәүенең мәғәнәһен заман шарттары менән бәйләй. Автор Сәғитйән яҙмышында шәхес һәм йәмғиәт, шәхес һәм уны уратып алған мөхит кеүек мәсьәләләргә төп иғтибарҙы бүлә. Мөхиттән айырылған шәхестең деградацияға килеүе проблемаһы сағыла. Шәрәфи, Әхмәттәр үҙҙәре йәшәгән мөхиттән ситкә сығып китеп, халыҡтан айырылһа, Сәғитйән шул мөхит эсендә йәшәп тә изоляцияла. Әлеге йәмғиәтте үҙ ҡулдары менән төҙөгән, "ярайһы уҡ күп йылдарын, йәшлеген комсомолға биргән комсомолец, пролетариат юлында барыусыларҙың бер вәкиле, әммә уларға һуҡырҙарса эйәрә алмауы, ҡараны аҡ тип ҡабул итә алмауы менән айырым һуҡмакта"[124]. Сәғитйән коллективлаштырыу башланғас аяуһыҙ йәмғиәт тәгәрмәсе кеше яҙмыштарына ла аяуһыҙ икәнлеген, "йәшәһен колхоз" тигән раҫлауҙың атаһына, үҙ

[124] Хәйри Ғ. Өсәүҙең тарихы. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1990. -174-се бит.

туғандарына үлем язаһы булып яңғырауын яҡшы аңлай. Үҙенең хатаһын танып, күңел ғазаптары кисереүе менән йәштәштәре Мәхфүзә менән Ҡотоштан айырыла. Мәхфүзә дөйөм мәнфәғәттәр өсөн, ә Ҡотош үҙ тиреһен һаҡлап ҡалыу өсөн аталарынан, туғанлыҡ хистәренән баш тарткан. "Һәр нәмәлә иң элек кешелек хисенең йәшәүе"[125]н күрергә ынтылған, "йыртҡыс тәбиғәтле кешеләрҙе"[126], алдашыуҙы, яраҡлашыуҙы яратмаған Сәғитйәндә заман геройының таҙа әхлағы сағыла. Сәғитйәндең характерының көслө ыңғай яғы - шул кешелек хисенең ҙурлығы. Ундай сифаттарҙы "Астан үлгән саҡта ла, урлашырға ҡул һуҙмам"[127] тигән Шәрәфиҙә лә, "Әхмәт йөрәгендә генә кешелек хисен тапҡан"[128] Гөлнурҙың ҙур һөйөүе аша Әхмәттә лә (Ғ.Сәләм "Шоңҡар") күрергә мөмкин ине.

Тимәк, авторҙар сәйәси ваҡиғалар һәм кеше яҙмышы мөнәсәбәттәрендә замандың гуманлы яҡтарын да эҙләй. Сәйҙел, Зәйнәп, Рәшит Мазһаров, Әхмәт, Шәрәфи кеүек геройҙар тибына һалынған концепция Сәғитйән образы аша тағы ла раҫланды. Ул тормошоноң, йәшәүенең мәғәнәһе, үҙенең заманы, тиҫтерҙәре, заманының аяуһыҙ ғәҙелһеҙлектәре, Кеше исеменә лайыҡ булыу тураһында фәлсәфәүи уйланыуҙарға бирелә, выждан ғазабы кисерә. Ул характерҙа ижтимағи шарттарҙы әхлаҡи-этик күҙлектән баһалауы һөҙөмтәһендә "ҡапма-ҡаршылыҡтар ҡолона"[129] әүерелгән замана геройын бирергә ынтылыш бар. Заман кешеһенең, рухи-әхлаҡи тормоштоң ҡаршылыҡлы яҡтарын сағылдырыусы герой ул.

Шулай итеп, утыҙынсы йылдарҙың заман геройы типтарында кеше концепцияһы тик "ыңғай", тик "кире" тигән критерийҙарҙан ситләшә бара, әҙәбиәт социаль-психологик, әхлаҡи-этик типтар менән байый. Әҙәбиәттең замандашты биреүҙә ныҡышмалы эҙләнеүҙәренең һөҙөмтәһе – шәхескә күберәк иғтибар биреүҙән, йәмғиәттең үҙгәрештәрен кеше яҙмыштарында тулыраҡ сағылдырыуҙан тыуған конфликтлы, тормошсан, ҡапма-ҡаршылыҡлы типтар. Ундай тип геройҙарҙың характеры әҫәрҙең конфликты үҙгәреүгә лә сәбәпсе. Хәҙер инде әҫәрҙәр үҙәгендә синфи бәрелешкә генә түгел, ә характер ҡаршылыҡтарына нигеҙләнгән конфликт ята. Был тормошто бер яҡлы ғына һүрәтләүҙән, схематиклыҡтан арына барыуҙың бер күрһәткесе ине.

[125] Шунда уҡ.
[126] Шунда уҡ. -175-се бит.
[127] Насыри И. Әҫәрҙәр. 2 томда. 2-се том. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1957. -438-се бит.
[128] Сәләм Ғ. Һайланма әҫәрҙәр. Бер томда. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1962. -240-сы бит.
[129] Хәйри Ғ. Өсәүҙең тарихы. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1990. -175-се бит.



### Һорауҙар һәм эштәр:

1. Утыҙынсы йылдар башҡорт әҙәбиәтендә Сәғитйән Ильясов (Ғ.Хәйри "Өсәүҙең тарихы"), Шәрәфи (И.Насыри "Еңелгән ятыу") кеүек ҡатмарлы характерҙарға һалынған концепция хаҡында нимәләр әйтә алаһығыҙ?
2. Юлай (С.Мифтахов "Һаҡмар", "Дуҫлыҡ һәм мөхәббәт") тибындағы геройҙарға һалынған концепция артабанғы осорҙар башҡорт әҙәбиәтендә ҡайһы геройҙарҙа дауам ителде?
3. Утыҙынсы йылдар башҡорт әҙәбиәтендәге Шәрәфи (И.Насыри "Еңелгән ятыу") кеүек геройҙарҙың башҡа әҙәбиәттәрҙәге шундай уҡ типтар менән оҡшаш һәм айырмалы яҡтары нимәлә?
4. С.Мифтаховтың "Һаҡмар", "Дуҫлыҡ һәм мөхәббәт" дилогияһында Юлай образына һалынған концепцияла замандың ниндәй һыҙаттары сағыла?
5. "Башҡорт прозаһында сәйәсмән Зәки Вәлиди образының бирелеше" тигән темаға реферат яҙырға.

## Һығымта

Егерменсе быуаттың һуңғы йылдары башҡорт мәҙәниәте, ижтимағи-сәйәси тормошонда, милли аңы үҫешендә мөһим

үҙгәрештәр осоро. Социалистик йәмғиәт ҡоролошо осорондағы әҙәбиәттең үҫешен яңы ҡараштарҙан баһалау ихтыяжы тыуған осор.

Совет осоронда социалистик реализм методының һәм коммунистик партиялылыҡ принцибының тар үҙәнендә үҫешкән совет әҙәбиәте үрнәктәре әҙәбиәт ғилемендә лә коммунистик идеология күҙлегенән баһаланды.

Бөгөнгө көндә әҙәбиәт ғилеме өлкәһендә лә "совет осоронда милли әҙәбиәт проблемаһын обьектив нигеҙҙә яңынан баһалау мохтажлығы тора"[130].Ул мәсьәләләргә арналған ғилми тикшеренеүҙәр, эҙләнеүҙәр һуңғы йылдарҙа күберәк күренә башланы. Ниндәйҙер кимәлдә совет осорондағы әҙәбиәт үҫешенә генә түгел, ижтимағи-сәйәси ваҡиғаларға ла обьектив ҡараштар булдырылды ла кеүек. Тарихсылар ҙа, әҙәбиәтселәр ҙә ул үткәндәргә ҡабат-ҡабат мөрәжәғәт итәләр.

Үткәндәрҙе тәрәнерәк өйрәнеү, яңынан-яңы асыштар, яңы фекерҙәр, яңы күренештәрҙе өҫкә сығарыу, барлау эштәре дауам итә. Был эш тә ана шул маҡсаттарҙан сығып башланылған эш булып ҡабул ителергә тейештер. Сөнки әҙәбиәтте герой концепцияһынан айырып ҡарау мөмкин түгел. Герой - ул эстетик һәм тарихи берәмек. Шуға күрә лә герой концепцияһы әҙәбиәт алдында даими актуаль булған мәсьәләләрҙең береһе. "Әҙәбиәттә герой концепцияһы – ижад методының төп аспекттарының береһе"[131],- ти ғалим С.Сафуанов. Яҙыусы һәм уҡыусы араһын тоташтырыусы күпер – әҙәби әҫәр һәм уның геройы. Яҙыусы үҙенең донъяға, тормошҡа булған эстетик ҡараштарын, мөнәсәбәтен уҡыусыға геройы аша еткерә, үҙенең уйҙарын уның ауыҙынан әйттерә, хәрәкәте, эш-ҡылыҡтары аша сағылдыра. Заманының үҙен һәм уҡыусыһын борсоған мәсьәләләренә яуап эҙләй. Яҙыусыларҙың әҫәрҙәрендәге индивидуаль геройҙар характерында әҙәбиәттең үҫеш перспективаһы, эстетик концепцияһы, теге йәки был дәүерҙең тарихи атмосфераһы күҙ алдына баҫа.

[130]Туған тел һәм әҙәбиәт. Фәнни-практик конференция тезистары. -Өфө: БДУ, 1994. -7-се бит.
[131]Башҡорт әҙәбиәтендә метод һәм стиль мәсьәләләре. -Өфө: БФАН СССР, ТТӘИ, 1982. -70-се бит.



Билдәле бер осор әҙәбиәтенең геройы концепцияһын күҙәтеү – ул яҙыусыларҙың ысынбарлыҡты художестволы дөйөмләштереүгә эстетик ҡараштар системаһын, уртаҡлығын, дөйөмләгән күҙәтеү, геройҙа дәүерҙең тарихи һыҙаттарын, \типик яҡтарын, әҙәбиәттең яңылығын юллау, асыҡлау тигән һүҙ менән дөйөмләштереп булалыр.

Төп бүлектәрҙә күтәрелгән һәм хәл итергә ынтылыш яһалған проблемаларға күҙәтеүҙәрҙән сығып, шундай һығымталар яһарға мөмкин.

Утыҙынсы йылдарҙа күп яҡлы ижтимағи-эстетик тәжрибә туплап өлгөргән башҡорт әҙәбиәте социалистик йәмғиәт төҙөү эшенә тотонған яңы кеше характерын береүгә төп иғтибарын йүнәлтте. Утыҙынсы йылдар әҙәбиәте "яңы тормош төҙөргә өйрәнеү өсөн ижтимағи аренаға сыҡҡан совет кешеһенең характерын күрһәтеүҙә ҙур аҙым яһаны"[132],-тип билдәләнә Ә.Вахитов. Утыҙынсы йылдар осоро ваҡиғаларға бай булған кеүек, әҙәбиәт тә әҙәби типтарҙың төрлөлөгө менән айырылып торҙо һәм ул әҙәби типтарҙа, төп геройҙың дөйөм һыҙаттарында осорҙоң типик яҡтары сағылыш алды.

Егерменсе йылдар әҙәбиәте революцияға тиклемге әҙәбиәт һүрәтләгән йәмғиәттең аҫҡы ҡатламынан булған хоҡуҡһыҙ бәләкәй кешене – ябай халыҡ араһынан сыҡҡан шәхесте тормоштоң хужаһы итеп һүрәтләне. Әҙәбиәттең төп геройы – ана шул массалар мәнфәғәте өсөн көрәшкән, иҫке тормошто емереп, яңыһын төҙөү өсөн тотонған большевик-революционер булды.

Утыҙынсы йылдар әҙәбиәте ошо көрәшсе, яңы тормош төҙөүсе шәхес концепцияһын нигеҙ итеп алды, артабан яңы һыҙаттар менән байытты, төп геройҙың характеры баҙыҡлана төштө.

Төп герой характеры инде формалашҡан "әҙер" образ булып килеп инде. Башҡорт ауылдарын коллектив хужалыҡтарға ойоштороуҙа, индустриаль эш участкаларында ла һ.б. ваҡиғаларҙа ла яңылыҡты башлап йөрөүсе, синфи, ижтимағи-

[132] Вахитов А. Башкирский советский роман. -Москва: Наука, 1978. -С.30.

сәйәси аңы юғары яңы заман кешеһе итеп бирелде. “Әҙер” герой булып килеп инеүенең сәбәптәрен яҙыусылар йыш ҡына уның үткәндәре менән, сәйәси аң формалашыуҙы революция һәм граждандар һуғышы осоронда сыныфыу этаптары менән бәйләне, йә совет Армияһы “мәктәптәрендә” тәжрибә туплауын сағылдырҙы. Һ.Дәүләтшинаның “Башаҡтар тулҡыны” повесынан Шакир һәм Ғәлләм, “Айбикә” повесынан Юлдыбай, А.Таһировтың “Машиналар ҡаны” әҫәренән Ибрай һ.б. шундай типтар совет власын урынлаштырыу өсөн көрәштә сынығҡан “кисәге” фронт һалдаты булһа, С.Мифтаховтың “Һаҡмар” драмаһынан Юлай, С.Ҡудаштың “Ҡушҡайын” романынан Авзал Бикташев һ.б. шундай геройҙар Совет Армияһында хеҙмәт итеп ҡайтҡан яңы, йәш быуын. А.Таһировтың роман-дилогияһында, И.Насыриҙың “Күҙәй” романында, А.Карнайҙың “Беҙ ҡайтырбыҙ” повесында һ.б. әҫәрҙәрҙә геройҙың фронт юлдарында һәм фронттан һуң совет власы өсөн “урындарҙағы” көрәштәрҙә тәжрибә туплауы, тормошҡа ҡарашы аныҡланыуы, характеры сынығыуы уларҙы артабанғы яңы үҙгәрештәрҙең активисы, инициаторы итеүе һүрәтләнде. Кисә өҫтөнә һалдат шинеле кейгән герой яңы тормош төҙөүгә тотоноп китте. Әммә йыш ҡына ошондай типтағы ижтимағи геройҙың уның яңылыҡтың инициаторы иткән сәбәптәрҙе күрһәтмәү характерҙы тоноҡландырҙы.

Яңы социалистик ҡоролош өсөн көрәште герой яҙмышында трагик яҡтары менән биреү осорҙоң киҫкен драматик яҡтарын һүрәтләү булып килеп баҫты. Был трагиклыҡтың оптимистик характерҙа булыуы осорҙоң тарихи атмосфераһын сағылдырҙы. Массалар мәнфәғәте, киләсәктең йәшәүе, дауам ителеүе өсөн геройҙың үҙен ҡорбан итеүе образды героик характерлы итте.

Төп ыңғай геройҙың характерындағы романтик һыҙаттар ҙа осор шарттары менән бәйле яңы концепцияға нигеҙләнде. Шәреҡ әҙәбиәтендә нигеҙҙә мөхәббәт темаһы менән билдәләнгән әҙәби образдың романтик характеры социаль йөкмәткеле булды. Утыҙынсы йылдар башҡорт әҙәбиәте романтиканың революцион характерҙағыһын үҙ итте. Был осор әҙәбиәттәге замандаш образы бөтөнләй “ҡатып ҡалған” характер түгел. Халыҡ тормошон



үҙгәртеүгә һәләтле булыуы менән бергә, үҙе лә камиллыҡҡа ынтылған, эҙләнеүсән характер. Уның артабан үҫеүе өсөн алдында ҙур-ҙур перспективалар асылыуы, яңы тормош уның характерына яңы һыҙаттар алып инеүе һүрәтләнде. А.Таһировтың “Машиналар ҡаны”, Һ.Дәүләтшинаның “Айбикә” повестарындағы Кинйәғол Уралбаев, Айбикә, С.Мифтаховтың дилогия-драмаларындағы Айһылыу һ.б. бик күп геройҙар шундайҙар.

Утыҙынсы йылдар әҙәбиәте ҡатын-ҡыҙҙар образдарында ла осорҙоң типик яҡтарын бирҙе. Тәнҡитле реализм әҙәбиәте биргән хоҡуҡһыҙ мосолман ҡатын-ҡыҙҙары типтарын яңы йәмғиәттә алдынғы ҡарашлы, актив эшмәкәр ҡатын-ҡыҙҙар образдары алыштырҙы. Ҡатын-ҡыҙ рухи яҡтан күпкә юғары, яңы техниканы буйһондороусы һәм йәмәғәт эштәрендә актив ҡатнашыусы ғына түгел, ойоштороусы ла булып күҙ алдына баҫты. Шәхси һәм ижтимағи эштәрҙе органик берлегендә алып барырға һәләтле героиня булып һүрәтләнде. (Айһылыу С.Мифтахов “Дуҫлыҡ һәм мөхәббәт”, Фатима (Ғ.Хәйри “Ҡатын”) һ.б.

Осор башында геройҙың характерын социаль төҙөү әҫәр конфликтының да күп осраҡта синфи-социаль проблемаларға ғына ҡоролоуына алып килһә лә, һуңынан геройҙың ҡылыҡтарын социаль-психологик анализлауға күберәк иғтибар бүленә башланы. Геройҙың тирә-яҡ мөхит, халыҡ менән бәйләнешенең сәбәптәренә, күңел торошона, рухи донъяһындағы үҙгәрештәргә баҫым яһалды. Герой ошо социалистик йәмғиәт төҙөү барышында коллективтың ҙур көс булыуына ышанды. Коллектив менән берҙәм булыу төшөнсәләренә тоғро ҡалыу кеүек һыҙаттар менән байыны. Инициатор, ойоштороусы, новатор булып сығыш яһаны. Ул үҙен ижади хеҙмәттә лә тапты. Хеҙмәткә яуаплы ҡараш, хеҙмәттең күңел талабына әүерелеүе кеүек һыҙаттарында асылды. Социаль-ижтимағи геройҙың тынғыһыҙ характерын, актив эшмәкәрлегенең психологик нигеҙҙәрен асып бирергә лә ынтылыштар яһалды (С.Агиш “Эш самауырҙа түгел”).

Утыҙынсы йылдарҙа яҙыусыларҙың иғтибарын замандаш характерының тәрән сығанаҡтары, тамырҙары, сыныфыу һәм формалашыу этаптары йәлеп итте, халыҡтың революция

көндәрендәге һәм совет власы, яңы тормош өсөн граждандар һуғышы йылдарындағы көрәше, тарих төпкөлөндәге милли-азатлыҡ хәрәкәттәре геройҙарының яҙмышында һәм характерында заманға ауаздаш һыҙаттары ҡыҙыҡһындырҙы. Замандаштың монументаллеге һәм киң масштаблылығы, уның ҙур ижтимағи аренаға сығыуы үҙенән-үҙе тарихи үткәндәрен сағылдырыуҙы талап итте. Д.Юлтыйҙың “Ҡан” романында Булат, Байғужа, Буранбай, М.Ғафуриҙың “Тормош баҫҡыстары” повесында Вәхит Йәғфәров, Һ.Дәүләтшинаның “Айбикә” повесында Айбикә образында һ.б. шундай бик күптәрҙә геройҙың революция алды яҙмышы һәм революцияға килеү юлы асыҡ сағылды.

Б.Бикбайҙың “Ҡарлуғас”, Ҡ.Даяндың “Таңсулпан”, М.Буранғоловтың “Башҡорт туйы”, “Ҡараһаҡал”, А.Хайбуллиндың “Сурағол” һ.б. тарих төпкөлдәрен сағылдырған әҫәр геройҙарының характерындағы героика, романтика, халыҡ азатлығы өсөн көрәшкә, яҙмышын халыҡ яҙмышы менән бәйләүгә һәр ваҡыт әҙер булыуы йыш ҡына идеаль образ итеп бирелеүе уларҙы заман геройы менән яҡын итә. Заман геройының эштәре тарихи әҫәр геройҙары эштәренең дауамы, үҫтерелеше, күсәгилешлеге, диалектик законлы күренеш булып ҡабул ителә. Геройҙың тарих төпкөлөнән алып шул осорға тиклемге көрәш юлын барлау ул - уның тарихтың актив ижадсыһы булыуын, халыҡ яҙмышы менән берлегендә характерҙың монументаллеген, массалар араһынан күтәрелгән индивидтың мәнфәғәттәре массалар мәнфәғәте булыуын иҫбат итеү ине.

Яҙыусы төп герой характерына һалған донъяға эстетик ҡараштарын башҡа геройҙар менән бәйләнештә генә аса ала. Йәки әҙәбиәттең төп “ыңғай геройы”на һалған концепцияһы әле тормошто төрлө яҡлы биреүҙең бер яғы ғына.

Тормош ҡаршылыҡтарһыҙ булмай. Һәр бер ыңғайға уның антиподы була. Һәр дәүерҙең үҙгәрештәре ҡаршылыҡтар тыуҙыра. Яҙыусы уларҙы ситләтеп үтә алмаған кеүек, беҙ ҙә ул характерҙарҙы урап үтә алмайбыҙ. Сөнки улар ҙа заман һыҙаттарын күҙ алдына баҫтырыусы, билдәле бер концепциянан сығып, әҙәби әҫәргә индерелгән.

Осор башында заман ҡаршылыҡтары,



коллективлаштырыу ваҡиғалары һәм идеологияла үҙгәрештәр коммунистик идеология ҡараштарынан сығып, бер яҡлы, ҡара буяуҙарҙа ғына һүрәтләнде. Уларҙы сатирик, карикатур планда биреү фашлауҙың отошло алымдары булды.

Бындай типтар артабан йәшәүгә хоҡуғын юғалтҡан, халыҡтың тормошон яҡшыртыуға аяҡ салыусы тиҫкәре күренештәр булараҡ һүрәтләнде. Кулактар, дин әһелдәре, муллалар, Зәки Вәлиди етәкселегендәге милли автономия хәрәкәте вәкилдәре лә революция һәм унан һуңғы йылдарҙағы ваҡиғаларҙы сағылдырған әҫәрҙәргә кире типтар булып инеп киттеләр. Уларға ҡарата ҡырҡа инҡар итеү концепцияһынан сығып һүрәтләү өҫтөнлөк итте. И.Насыриҙың “Күҙәй”, А.Таһировтың “Ҡыҙылгвардеецтар”, “Ҡыҙылармеецтар” романдарынан Зәки Вәлидиҙәрҙең милләт, дин тип янып йөрөүҙәре лә фашлау алымы булды. Бөгөнгө уҡыусыға И.Насыриҙың “Күҙәй” әҫәренән Ҡарабаш тибындағы “милләтселәрҙең” телмәрҙәре, маҡсаттары, киреһенсә, халыҡтың меңәр йыллыҡ милли традицияларын юғалтмаҫ өсөн көрәше итеп, милли-азатлыҡ көрәштәренең дауамы итеп ҡабул ителә. Ҡарабаш кеүектәр революцияны башҡорт ерлеге өсөн милләтте, дини традицияларҙы һаҡлап ҡалыу өсөн көрәш тип аңлайҙар. Милли хәрәкәттең лидерҙары яҙмышында һәм хәрәкәттең үҙендә революция һәм егермense йылдарҙағы ижтимағи-сәйәси хәрәкәттең ҡатмарлылығы күҙ алдына баҫты. Шул уҡ ваҡытта замандың был һыҙаттары тоталитар ҡоролоштоң милли үҙенсәлектәрҙе юйыуға алып килеүе лә күренде.

Заман үҙгәрештәре тыуҙырған ҡаршылыҡтарҙы дөйөмләштереп биреү кире геройҙар итеп инҡар итеү концепцияһы аша һүрәтләүгә генә ҡайтып ҡалманы. Осор атмосфераһын тәрәнерәк өйрәнеү геройҙар яҙмышын революцион һәм социалистик үҙгәртеп ҡороуҙар һәм кеше яҙмыштары кеүек яңы концептуаль күҙлектән һүрәтләүгә лә килтерҙе.

Яңы үҙгәрештәрҙең массалар психологияһындағы ҡаршылыҡтарға осрауы Шәрәфи, Сибай (И.Насыри “Еңелгән ятыу”, “Сибай”) һ.б. ҡатмарлы характерлы геройҙарҙы тыуҙырҙы.

Утыҙынсы йылдар әҙәбиәте үҙ геройының яңылыҡ көрәшсеһе булыуын раҫлау менән бергә, ул дәүерҙең яңы кеше

өсөн дә көрәш булыуын осор аҙағына табан йыш ҡына әҫәр үҙәгенә ҡуйҙы. Ҡатмарлы характерлы, тормошсан герой концепцияһы алғы планға сыҡты. Шәхес өсөн көрәш осорҙоң һыҙаттарына бәйле төрлө-төрлө аспекттарҙа асылды. Геройҙың яңы тормошҡа килеүе урау-урау юлдарҙан тороуы, психологик барьерҙы еңеүҙең тура юлдан ғына бармауы һүрәтләнде. И.Насыриҙың "Сибай" әҫәрендәге Сибай, "Еңелгән ятыу" повесындағы Шәрәфи, С.Ҡудаштың "Ҡушҡайын" романындағы Нурулла, "Хат" поэмаһындағы Ишми, Һ.Дәүләтшинаның "Айбикә" повесындағы Юлдыбай, "Башаҡтар тулҡыны" әҫәрендәге Шакир, Ғ.Сәләмдең "Шоңҡар" поэмаһындағы Әхмәт һ.б. шундай геройҙарҙы айырып күрһәтергә мөмкин.

Был осор әҙәбиәте замандаштың әхлаҡи юғарылығы, камил шәхес булыуы өсөн көрәште лә һүрәтләнә. Кешеләрҙең күңелендәге ҡаршылыҡтар уның рухи үҫеүен тотҡарлаусы, йәмғиәттең алға барыуына ҡамасаулаусы кәртәләр булыуы сағылды. Д.Юлтыйҙың "Әпәш" поэмаһында Әпәш образында, К.Мәргәндең "Майгөл әбей" хикәйәһендә Майгөл әбейҙә, "Ҡорҙаштар" әҫәрендә Хөсәйен һәм Илмырҙала, И.Насыриҙың "Курортта", С.Агиштың "Ялағай" әҫәрҙәрендә Ташбулатов һәм Сабировта һәм башҡа бик күп заман геройҙарында ялҡаулыҡ, һаранлыҡ, ялағайлыҡ, шартына килтереп йәшәү, бюрократлыҡ, материаль байлыҡҡа ынтылып, рухи ярлыланыу кеүек һыҙаттар дөйөмләштерелде, тәнҡит ителде. Бындай геройҙарҙы һүрәтләгәндә идеологик һәм синфи-социаль типтарҙы биргәндәге кеүек тик ҡара буяуҙар менән генә эш итеү юҡ, ә шул характерҙы әкренләп аса барыу, уны үҙ ҡылыҡтары аша фаш итеү бар. Идеологик ҡаршылыҡтарҙы фаш итеүҙә яҙыусылар сатира менән генә эш итә тип бер яҡлы ғына раҫлап булмай. Мәҫәлән: А.Карнайҙың "Беҙ ҡайтырбыҙ" повесынан Әхмәдулла мулланың, С.Агиштың "Шартына килһен" әҫәренән Саяфтың һәм башҡа шундай геройҙарҙың характерын тормоштағыса итеп биреү, оҫта тактика менән эш итеүҙәрен сағылдырыу хас. Ундай типтар төп ыңғай ижтимағи геройҙарға ҡарағанда характер булараҡ оҫта асылып, уҡыусы күңелендә нығыраҡ иҫтә ҡалды.

Утыҙынсы йылдар әҫәрҙәренең заман геройы артабанғы башҡорт әҙәбиәтенең геройы формалашыуҙа "уның социаль-



әхлаҡи, тормош һәм граждандлыҡ позицияларын конкретлаштырыуҙа ҙур роль уйнаны"[133]. Был осор әҙәбиәте әле шул осорҙа уҡ совет ҡоролошоноң төп проблемаларын, ҡаршылыҡлы тенденцияларын билдәләп китеүгә өлгәшкән ине.

Утыҙынсы йылдар геройы совет ҡоролошо әҙәбиәтенең артабанғы үҫеш этаптарындағы үҙәк проблемаларын билдәләүгә лә нигеҙ һалды. Шәрәфи (И.Насыри "Еңелгән ятыу"), Ишми, Нурулла (С.Ҡудаш "Хат", "Ҡушҡайын") кеүек типтар аша күтәрелгән боролоштар һәм шәхес яҙмышы концепцияһына утыҙынсы йылдарҙан һуңғы башҡорт әҙәбиәте ҡайтанан әйләнеп ҡайтты.

Юлай образында бирелгән (С.Мифтахов "Дуҫлыҡ һәм мөхәббәт") етәксе һәм масса, ауыл хужалығы менән етәкселек итеү кеүек проблемалар артабан М.Кәримдең "Яңғыҙ ҡайын", Д.Исламовтың "Йомарт ер" һәм башҡа әҫәрҙәр үҙәгендә булды.

Шулай итеп, тормоштоң бай ижтимағи яҡтары, мөнәсәбәттәре киң эпик характерҙың тыуыуына алып килде: утыҙынсы йылдар геройы халыҡ яҙмышы менән дә, тыуған иленең үткәндәре менән дә, үҙе йәшәгән формацияның кире күренештәре менән көрәштә лә, ҡыҫҡаһы, яңы кеше күп яҡлы тарихи процесҡа ҡушылып китеүендә, характерының формалашыуы һәм үҫеүендә сағылды.

Тормоштоң киң планлылығы һәм масштаблылығы утыҙынсы йылдар әҙәбиәтенең күп геройлығына алып килде. Бер әҫәр рамкаһында ғына ла тормоштоң төрлө типтарын табырға мөмкин ине. Утыҙынсы йылдар аҙағына табан заман геройы асыҡ һыҙатланыш ала, киңәйә төштө.

**Осор буйынса курс эше темалары:**

1. Утыҙынсы йылдар башҡорт шиғриәтендә жанр формалары.
2. Утыҙынсы йылдар башҡорт прозаһында очерк жанры.
3. А.Таһировтың "Һалдаттар", "Ҡыҙылгвардеецтар",

---

[133] Баимов Р. Судьба жанра. -Уфа: Башк. книжное издательство, 1984. –С.50.

"Ҡыҙылармеецтар" романдарында һалдат образы.

4. И.Насыриҙың "Күҙәй" романынының конфликт һәм жанр үҙенсәлектәре.

5. Д.Юлтыйҙың "Ҡан" романында империалистик һуғыш сағылышы.

6. Утыҙынсы йылдар башҡорт драматургияһында заман темаһы.

7. Утыҙынсы йылдар тарихи драмаларында төп ыңғай герой концепцияһы.

8. Сабит Суфияновтың (Әбүс) утыҙынсы йылдар шиғриәтенең тематик үҙенсәлектәре.

9. Ғ.Шафиҡовтың "И совесть и жертвы эпохи" китабында репрессияланған башҡорт яҙыусылары образдары.

10. А.Карнайҙың "Беҙ ҡайтырбыҙ" повесының конфликты һәм характерҙар бирелеше.

11. С.Мифтахов драмаларында заман проблемалары һәм заман геройы сағылышы.

12. Ғ.Сәләм поэмаларында психологизм.

13. Утыҙынсы йылдар башҡорт әҙәбиәтендә әхлаҡи-этик проблемалар.

14. С.Агиш хикәйәләрендә характерҙар бирелеше.

15. Ғ.Ғүмәр сатирик һәм юмористик хикәйәләрендә заман сағылышы.

16. С.Агиштың утыҙынсы йылдар повестарының идея-тематик һәм конфликт үҙенсәлектәре.

17. И.Насыриҙың повестарында йәмғиәт һәм шәхес проблемаларының сағылышы.

18. Утыҙынсы йылдарҙа әҙәби тәнҡит.

19. Ғ.Сәләм балладаларының жанр үҙенсәлектәре.

20. Д.Юлтыйҙың әҙәби тәнҡит өлкәһендәге эшмәкәрлеге.

## ӘҘӘБИӘТ

### ҒИЛМИ ӘҘӘБИӘТ:


1. Абрамович Г.Л. Введение в литературоведение. -М.: Просвещение, 1965. - 365 с.





2. Агаев А.Г. Социалистическая национальная культура. -М.: Политиздат, 1974. -136 с.

3. Андреев Ю.А. Русский советский исторический роман. 20-30-е годы. -М. -Л.: Изд-ство АН СССР, 1962. -167 с.

4. Андреев Ю.А. Революция и литература. Октябрь и гражданская война в русской советской литературе и становление социалистического реализма (20-30-е годы). 3-е изд. -М.: Художественная литература, 1987. - 397 с.

5. Апухтина В.А. Современная советская проза: 60-70-е годы: Учебное пособие для вузов. 2-е изд., переработанное и дополненное. -М.: Высшая школа, 1984. - 272 с.

6. Атылған йондоҙ Амантай /Төҙөүсеһе: Б.Байымов. -Өфө: Китап, 1998. -176 бит.

7. Баимов Р.Н. Шаг в зрелость. -Уфа: Башкирское книжное издательство, 1975. -190 с.

8. Баимов Р.Н. Поискам нет конца. -М.: Современник, 1980. -205 с.

9. Баимов Р.Н. Башкирский историко-революционный роман. -Уфа: Башкирский государственный университет, 1980. -80 с.

10. Баимов Р.Н. Судьба жанра. -Уфа: Башкирское книжное издательство, 1984. -320 с.

11. Баимов Р.Н. Истоки и устья. Заметки о башкирской литературе. -Уфа: Китап, 1993. -348 с.

12. Байымов Р.Н. Кем ул беҙҙең әҙәбиәттең бөгөнгө геройы? //Ағиҙел. -1972. -№ 5. -106-108-се биттәр.

13. Байымов Р.Н. Заман үҙгәрҙе. Әҙәбиәт ҡайтанан баһалауҙы талап итәме? //Башҡортостан уҡытыусыһы, 1993, № 2. -19-24-се биттәр.

14. Баскаков В. Коммунисты, вперед. Образы коммунистов в поэзии Твардовского //Молодой коммунист, 1961. №9. -С.149-178.

15. Башҡорт совет әҙәбиәте: тәнҡит-библиографик күҙәтеүҙәр //К.Мәргән менән Ә.Харисов редакцияһында. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1966. -272 бит.

16. Башҡорт совет әҙәбиәте тарихы. Программа //Р.Н.Байымов редакцияһында; Төҙөүселәре: Р.Н.Байымов,

М.Ф.Ғәйнуллин, Т.Ә.Килмөхәмәтов, М.Х.Иҙелбаев, Ф.Т.Күзбәков, Ә.М.Сөләймәнов. -Өфө: Башҡорт дәүләт университеты, 1984.-52 бит.

17. Башҡорт теленең һүҙлеге: Ике томда: 1-се том //Рәсәй ФА, Башҡортостан ғилми үҙәге, Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты. -М.: Русский язык, 1993. - 862 бит.

18. Башҡорт әҙәбиәтендә метод һәм стиль мәсьәләләре //Яуаплы ред.: Ғ.Б.Хөсәйенов. -Өфө: СССР ФА БФ, Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты, 1982. -123 бит.

19. Башҡорт әҙәбиәте мәсьәләләре (Әҙәбиәт. Фольклор. Әҙәби мираҫ) //Редколлегия: Р.Н.Байымов, М.Х.Иҙелбаев, Ғ.С.Ҡунафин, Ә.М.Сөләймәнов; Төҙ. һәм яуаплы ред.: Ғ.С.Ҡунафин. -Өфө: Башҡорт дәүләт университеты, 1990. -120 бит.

20. Башҡорт әҙәбиәте тарихы (1917-1930) Программа. /Төҙөүсеһе: ф.ф.к., доц. Шарипова З.Я. -Өфө: Башҡорт дәүләт университеты, 1994. - 39 бит.

21. Башҡорт әҙәбиәте тарихы: Очерктар. -Өфө: Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты, 1967. - 708 бит.

22. Башҡорт әҙәбиәте тарихы: 6 томда: 3-сө том //Редколлегия: С.Сафуанов, Р.Н.Байымов; Яуаплы ред.: С.Сафуанов. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1991. -544 бит.

23. Башҡорт әҙәбиәте тарихы: 6 томда: 4-се том (1941-1955) //Томдың редколлегияһы: Р.З.Шәкүров, З.Нурғәлин, Т.Килмөхәмәтов; Яуап.ред.: Р.З.Шәкүров. -Өфө: Китап, 1993. -446 бит.

24. Башҡорт әҙәбиәте тарихы: 6 томда: 5-се том (1956-1965). //Томдың редколлегияһы: Р.Бикбаев, С.Сафуанов, Ғ.Рамазанов; Яуаплы ред.: Р.Бикбаев. -Өфө: Китап, 1993. -598 бит.

25. Башҡорт әҙәбиәте тарихы: 6 томда: 6-сы том (1966-1994). //Томдың редколлегияһы: Р.Н.Байымов, Д.Бүләков, Р.Бикбаев; Яуаплы ред.: Р.Н.Байымов. -Өфө: Китап, 1996. -710 бит.

26. Башҡорт әҙәби тәнҡитенең формалашыуы һәм үҫеш этаптары. Программа //Төҙ. Р.Н.Байымов. Яуаплы ред.: Ә.Кирәев.



-Өфө: Башҡорт дәүләт университеты, 1981. -16 бит.

27. Башҡорт әҙәбиәтендә жанрҙар проблемаһы. //Яуаплы ред.: Ғ.Б.Хөсәйенов. -Өфө: СССР ФА БФ, Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты, 1973. -332 бит.

28. Баязит Бикбай тураһында иҫтәлектәр. //Яуаплы ред.: Ғ.Рамазанов. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1978. -160 бит.

29. Башҡортостан яҙыусылары //Төҙөүсеһе: Р.Х.Тимерғәлина. -Өфө: Башҡ. китап нәшриәте, 1968. -498 бит.

30. Большая советская энциклопедия. 3-е изд. 13-й том //Гл.ред.: А.М.Прохоров. -М.:Советская энциклопедия, 1973. -608 с.

31. Большая советская энциклопедия. 2-ое изд. //Гл.ред.: Б.А. Введенский. -М.: Большая советская энциклопедия, 1955. -648 с.

32. Бритиков А.Ф. Старое и новое в трактовке трагедии Григория Мелехова. //Русская литература, 1968. -№ 4. -С.131-148.

33. Булякова Г.М. Проблема героя в современной башкирской прозе для детей //Автореф. дисс. на соиск.уч.ст. к.ф.н. -Уфа: РИЦ БашГУ, 1990. -18 с.

34. Вахитов А.Х. Башкирский советский роман. -М.: Наука, 1978. -160 с.

35. Вахитов А.Х. Жанр и стиль в башкирской прозе. -Уфа: Башкирское книжное издательство, 1982. -346 с.

36. Вахитов Ә.Х. Эпик киңлектәрҙә. Әҙәби-тәнҡит мәҡәләләре. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1968. -120 бит.

37. Вахитов Ә.Х. Таланттың асылы. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1972. -280 бит.

38. Вахитов Ә.Х. Офоҡтар киңәйгәндә. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1979. -292 бит.

39. Вахитов Ә.Х. Шиғриәт шоңҡары. (Ғ.Сәләм. Тормошо һәм ижады). -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1984. -160 бит.

40. Гайнуллин М.Ф. Драматургия С.Мифтахова. -Уфа: Башкирское книжное издательство, 1959. -132 с.

41. Герой современной литературы. Статьи //Сост.-ред.: Н.Губко. -М. -Л.: Художественная литература, 1963. -400 с.

42. Гинзбург Л.Я. О литературном герое. -Л.: Советский

писатель, Ленинградское отделение, 1979. -222 с.
43. Головенченко Ф.М. Введение в литературоведение. -М.: Высшая школа, 1954. -318 с.
44. Горанов, Крыстю. Художественный образ и его историческая жизнь //Предисловие В.Ф.Асмуса. -М.: Искусство, 1970. -519 с.
45. Горький А.М. Сборник критических статей о нем. //Сост.: П.Е.Будков, Н.К.Пиксанов. -М. -Л.: Госиздат, 1928. -184 с.
46. Горький и его эпоха. Материалы и исследования Рос. Ак.инс.мировой литературы. -М.: Наследие, 1995. -262 с.
47. Горький и вопросы советской литературы. Сборник статей. -Л.: Советский писатель, 1956. -484 с.
48. Горький А.М. О литературе. Литературно-критические статьи. -М.: Советский писатель, 1955. -903 с.
49. Ғималова М. Мәктәптә Б.Бикбай ижадын өйрәнеү. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1964. -148 бит.
50. Ғәйнуллин М.Ф., Хөсәйенов Ғ.Б. Башҡорт совет яҙыусылары. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1964. -464 бит.
51. Ғәйнуллин М.Ф. Ысынбарлыҡ. Конфликт. Характер. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1974. -440 бит.
52. Ғәйнуллин М.Ф. Башҡорт совет драматургияһының үҫеү юлдары. 2-се баҫма, тулыландырылған. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1985. -328 бит.
53. Ғәлимов Сәләм тураһында иҫтәлектәр //Төҙ.: Л.Ғәлимов, Н.К.Әхмәҙиев. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1987. -240 бит.
54. Дауыт Юлтый тураһында иҫтәлектәр. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1980. -200 бит.
55. Дремов А.К. Образ нашего современника в советской литературе. -М.: Гослитиздат, 1963. -159 с.
56. Дремов А.К. Идеал и герой. -М.: Искусство, 1969. -200 с.
57. Дремов А. Художественный образ. 2-е изд., доп., -М.: Советский писатель, 1961. -406 с.
57. Ершов Л.Ф. Советская сатирическая проза 20-х годов.



-М. -Л.: Издательство АН СССР, 1960. -283 с.
58. Зарипов Н.Т. Тәүге гвардеецтарҙың береһе. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1968. -160 бит.
59. Зарипов Н.Т. Әҙәбиәттең граждандыҡ пафосы. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1978. -160 бит.
60. Зарипов Н.Т. И.Насыри. Тормошо һәм ижады. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1983. -248 бит.
61. Зиннәтуллина Х. Заман. Образ. Характер. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1977. -184 бит.
62. Из истории советской литературы 1920-1930 г. -М.: Наука, 1983. -759 с.
63. История башкирской советской литературы. Очерки. ч.I. (1917-1941) //Под ред. Л.Г.Барага, Х.Ш.Зиннатуллиной, А.И.Чанышева; Отв.ред.: Л.Г.Бараг. -Уфа: БГУ, 1963. -496 с.
64. История башкирской советской литературы. Очерки. ч.II. (1941-1964) //Под ред. Л.Г.Барага, Х.Ш.Зиннатуллиной, А.И.Чанышева; Отв.ред.: Л.Г.Бараг. -Уфа: Башкирское книжное издательство, 1966. -422 с.
65. История башкирской советской литературы. //Отв. ред.: Л.И. Залесская, Г.Б.Хусаинов. -М.: Наука, 1977. -528 с.
66. История русской советской литературы (1917-1965). В 4-х томах. 2-ое изд., перераб. дополн. //Отв.ред.: А.Г.Дементьев. -М.: Наука, 1967. -.666 с.
67. История русской советской литературы:в 3-х томах: 1-й том: (1917-1929) //Отв.ред. А.Г.Дементьев. -М.: Издательство АН СССР, 1958. -723 с.
68. Кедрина З.С. Главное - человек. Некоторые черты современного реализма. -М.: Советский писатель, 1972. -406 с.
69. Килмөхәмәтов Т.Ә. Халыҡсанлыҡ көсө. -Өфө: Китап, 1998. -464 бит.
70. Ковалев В.А. Реализм Леонова. -Л.: Наука, 1969. -175 с.
71. Козьмин М.Б. Путь к человеку. -М.: Современник, 1984. -239 с.
72. Колобаева Л.А. Концепция личности в русской литературе рубежа XIX-XX вв. -М.: Издательство МГУ, 1990. -333 с.

73. Концепция человека в эстетике социалистического реализма. //Редколлегия: Л.Г.Якименко, В.В.Новиков, Е.Ю.Сидоров. -М.: Мысль, 1977. -264 с.
74. Концепция человека в эстетике социалистического реализма. С.М.Петров, Л.Г.Якименко, Е.Ю.Сидоров. -М.: Мысль, 1977. -261 с.
75. Концепция личности в литературе развитого социализма: Сборник статей //Отв.ред.: С.М.Хитарова, А.П.Григорян. -М.: Издательство АН Арм.ССР, 1990. -371 с.
76. Кулинич А.В. Русская советская поэзия 30-х годов. -Киев: Издательство Киевского университета, 1962. -167 с.
77. Леонов Л. Барсуки. -М.:Современник, 1989. -318 с.
78. Литературный энциклопедический словарь //Подготовили: Е.И.Бонч-Бруевич; Под общ.ред.: В.М.Кожевникова, П.А.Николаева. -М.: Советская энциклопедия, 1987. -750 с.
79. Литвинов В.М. Трагедия Григория Мелехова (“Тихий Дон” М.Шолохова). 2-ое изд. -М.: Художественная литература, 1966. -133 с.
80. Луначарский А.В. Статьи о литературе: в 2-х томах: 2-й том. -М.: Художественная литература, 1988. -492 с.
81. Макаренко А.С. Против шаблона /Литературная газета, 1938, 30 июля.
82. Метченко А.И. Маяковский М. Очерк творчества. -М.: Художественная литература, 1964. -500 с.
83. Минһажетдинов М.Х. Замандаштың яңы образы //Ағиҙел. -1972. -№5. -100-106-сы биттәр.
84. Минһажетдинов М.Х. Ҡәләмендә ҡөҙрәт бар: Монография, әҙәби тәнҡит һәм башҡорт фольклористикаһына арналған хеҙмәттәр. -Өфө: Китап, 1995. -256 бит.
85. Нурғәлин З.Ә. Идея берҙәмлеге юлында. Башҡорт совет әҙәбиәтенең ҡайһы бер мәсьәләләре. 1920-1930 йылдар. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1979. -288 бит.
86. Нурғәлин З.Ә. Билдәлелек яҡтыһында: Әҙәби-тәнҡит мәҡәләләр. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1992. -280 бит.
87. Нурғәлин З.Ә. Заман һәм герой. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1975. -144 бит.

88. Нурғәлин З.Ә. Замандарҙан замандарға. -Өфө: Китап, 1999. -224 бит.
89. Овчаренко А.И. Эпоха. Человек. Искусство. -М.: Советская Россия, 1967. -376 с.
90. Овчаренко А.И. О положительном герое в творчестве М.Горького. Статьи. -М.: Советский писатель, 1956. -585 с.
91. Овчаренко А.И. Новые герои - новые пути. От М.Горького до В.Шукшина. -М.: Современник, 1977. -479 с.
92. Овчаренко А.И. Социалистический реализм и современный литературный процесс. -М.: Советский писатель, 1968. -316 с.
93. Овчаренко А.И. М.Горький и литературные искания XX столетия. 2-е изд., доп. -М.: Советский писатель, 1978. -510 с.
94. Озеров В.М. Образ коммуниста в советской литературе. 2-е изд., испр. доп. - М.: Гослитиздат, 1959. -375 с.
95. Озеров В.М. Некоторые вопросы социалистического реализма. -М.: Знание, 1958. -31 с.
96. Озеров В.М. Коммунист наших дней в жизни и в литературе. -М.: Художественная литература, 1984. -330 с.
97. Окорокова В.Б. Пути и проблемы развития прозы в литературах народов Якутии: жанрово-стилевые процессы (якутская, юкагирская, эвенская, эвенкийская проза XX века) //Автореф. дисс. на соиск. уч. ст. д-ра фил.наук. -Уфа: Башкирский государственный университет, 1999. -42 с.
98. Османова З.Г. Художественная концепция личности в литературах Советского Востока (Традиции и современность). -М.: Наука, 1972. -266 с.
99. Перцов В.О. Писатель и новая действительность. 2-е изд., доп. -М.: Советский писатель, 1961. -626 с.
100. Петров С.М. Реализм. -М.: Просвещение, 1964. -490 с.
101. Поспелов Г.Н. Теория литературы.: Учебник для филол. спец. ин-ов. -М.: Высшая школа, 1978. -351 с.
102. Программы педагогических институтов. Сборник. -М.: Просвещение, 1980. -148 с.
103. Рамазанов Ғ. Башҡорт поэзияһында совет кешеһе образы. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1956. -134 бит.

104. Рамазанов Ғ. М.Ғафури ижады. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1965. -448 бит.
105. Рамазанов Ғ. Ҡатмарлы, оло характерҙар хаҡында уйланыу //Ағиҙел. -1972. -№ 5. -113-114-се биттәр.
106. Рамазанов Ғ. Әҙәбиәт офоҡтары: Тикшеренеүҙәр һәм әҙәби-тәнҡит мәҡәләләре. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1978. -192 бит.
107. Рамазанов Ғ. М.Ғафури ижады. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1991. -224 бит.
108. Ревякин А.И. Проблема типического в художественной литературе: Пособие для учителей. -М.: Государственное учебно-педагогическое издательство Министерства просвещения РСФСР, 1959. -368 с.
109. Ревякин А.И. О типическом в реалистической художественной литературе. -М.: Знание, 1957. - 48 с.
110. Русская советская литература 30-х годов: Учебное пособие для филол. спец. ун-ов и педвузов /Л.Ф.Ершов, Е.А.Никулина, Г.В.Филиппов. -М.: Высшая школа, 1978. -232 с.
111. Русская советская повесть 20-30-х годов. /Н.П.Утехин, Н.А.Грознова, В.В.Бузник и др; под.ред. В.А.Ковалева. -Л.: Наука, 1976. -254 с.
112. Рюриков Б.С. О богатстве искусства. Эстетический идеал и вопрос о положительном герое. -М.: Советский писатель, 1956. - 340 с.
113. Сафуанов С. А.Карнай. Тормош һәм ижад юлы. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1960. - 160 бит.
114. Сафуанов С. Дуҫлыҡ, туғанлыҡ сәхифәләре. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1976. -320 бит.
115. Сафуанов С. Хаҡлыҡ әҙәбиәте, дуҫлыҡ әҙәбиәте. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1981. -288 бит.
116. Сафуанов С. Ғ.Хәйри. Тормошо һәм ижады. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1983. -224 бит.
117. Сафуанов С. Башҡорт балалар әҙәбиәтенең үҫеш проблемалары -Өфө: Башҡ. китап нәшриәте, 1988. -216 бит.
119. Сказительское и литературное творчество М.Бурангулова: Сб. статей. -Уфа: БНЦ УРО РАН, 1992. -121 с.
120. Смирнов Р.Л. Советский человек. Формирование

социалистического типа личности. -М.: Издательство политической литературы, 1971. -376с .
121. Сәйфи Ҡудаш ижады. Мәҡәләләр йыйынтығы. //Төҙөүсеһе: С.Сафуанов. -Өфө: СССР ФА БФ, 1986. -122 бит.
122. Талант, отданный народу: Статьи, речи о М.Гафури. //Редколлегия: С.Сафуанов, Г.Б.Хусаинов, А.Мирзагитов. -Уфа: Башкирское книжное издательство, 1982. -224 с.
123. Татар совет әҙәбиәте: 10-сы баҫма: 10-сы класс өсөн дәреслек. //Авторҙары: Г.М.Хәмитов, И.З.Нуруллин, Х.Ф.Хәйруллин һ.б. -Ҡазан: Тат. китап нәшриәте, 1981. -240 бит.
124. Творчество М.Шолохова. //Под ред.: В.А.Ковалева, А.И.Хватова. -Л.: Наука, 1975. -328 с.
125. Тимофеева Л.И. Пути художественного исследования личности. -Л.: Наука, 1975. -191 с .
126. Тимофеев Л.И., Тураев С.В. Словарь литературоведческих терминов. -М.: Просвещение, 1978. -228 с.
127. Федин К. Писатель. Искусство. Время. -М.: Советский писатель, 1957. -523 с.
128. Храпченко М.Б. Горизонты художественного образа. 2-е изд., доп. -М.: Художественная лит-ра, 1986. -438 с.
129. Хөсәйенов Ғ.Б. С.Ҡудаш ижады. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1959. -224 бит.
130. Хөсәйенов Ғ.Б. Халых шағиры Ниғмәти. Тәнкит-биографик очерк. -Өфө: Башҡ. китап нәшриәте, 1960. -256 бит.
131. Хөсәйенов Ғ.Б. Д.Юлтый. Тормошо һәм ижады. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1963. -222 бит.
132. Хөсәйенов Ғ.Б. Заман һәм поэзия. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1964. -176 бит.
133. Хөсәйенов Ғ.Б. Башҡорт совет поэзияһының үҫеү юлдары. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1968. -402 бит.
134. Хөсәйенов Ғ.Б. Шағирҙар.-Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1981. -240 бит.
135. Хусаинов Г.Б. Башкирская советская поэзия (1917-1980). -М.: Наука, 1983. -304 с.
136. Хусаинов Г.Б. Даут Юлтый. Жизнь и творчество. //Перевод А.Вильданова. -Уфа: Китап, 1993. -240 с.
137. Хәмиҙуллина М. Б.Бикбай ижады. Монография.

Башҡортостан китап нәшриәте, 1987. -192 бит.
138. Хәкимов Ә. Әҙәбиәт һәм заман. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1967. -184 бит.
139. Шафиков Г.Г. И совесть и жертвы эпохи. -Уфа: Башкирское книжное издательство, 1991. -224 с.
140. Шәрҡи З. Һайланма әҫәрҙәр. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1959. -212 бит.
141. Щедрина Н.М. Концепция личности в современном историко-революционном романе. Учебное пособие. -Уфа: Башкирский государственный университет, 1988. -72 с.
142. Эвентов И.С. Сатира в творчестве М.Горького. -М. - Л.: Советский писатель, 1962. -285 с.
143. Әбсәләмова Ғ. С.Агиш ижады. Тәнҡит-биографик очерк. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1964. - 104 бит.
144. Әбсәләмова Ғ. А.Таһиров ижадында заман темаһы, заман геройы. //Ағиҙел. -1964. -№ 8. -76-81-се биттәр.
145. Әхмәтйәнов К.Ә. Башҡорт поэмаларының композиция мәсьәләләре. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1964. -180 бит.
146. Әхмәтйәнов К.Ә. Әҙәбиәт ғилеме һүҙлеге. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1965. -258 бит.
147. Әхмәтйәнов К.Ә. Әҙәбиәт теорияһы. Икенсе баҫма. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1985. -344 бит.
148. Әхмәтйәнов К.Ә. Ғ.Сәләм. Тормошо һәм ижады. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1980. -192 бит.
149. Якименко Л.Г. Творчество М.Шолохова. Монография. -М.: Советский писатель, 1977. -678 с.
150. Яновская Л.М. Почему вы пишете смешно? Об И.Ильфе и Е.Т.Петрове. Их жизни и их юморе. 2 издание. доп. - М.: Наука, 1969. -216 с.
151. Яңырыу юлында: -Өфө: Китап, 1994. - 272 бит.

**НӘФИС ӘҘӘБИӘТ:**

1. Агиш С. Әҫәрҙәр: 4 томда: 1-се том. Хикәйәләр. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1980. -496 бит.
2. Агиш С. Һайланма әҫәрҙәр: 2 томда: 2-се том. -Өфө:



Башҡортостан китап нәшриәте, 1975. -580 бит.
3. Агиш С. Әҫәрҙәр: 4 томда: 4-се том. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1980. -496 бит.
4. Амантай Ғ. Һайланма әҫәрҙәр. //Төҙөүсеһе: М.Тажи. - Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1960. -180 бит.
5. Бикбай Б. Һайланма әҫәрҙәр: Биш томда: 1-се том. - Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1969. -304 бит.
6. Бикбай Б. Һайланма әҫәрҙәр: Биш томда: 4-се том. - Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1972. -390 бит.
7. Бикбай Б. Һайланма әҫәрҙәр: Биш томда: 5-се том: Пьесалар, хикәйәләр, мәҡәләләр һәм хаттар. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1973. -312 бит.
8. Буранғолов М.А. Таштуғай: Пьесалар. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1994. -148 бит.
9. Вәли Ә. Һайланма әҫәрҙәр. Ике томда: 1-се том. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1958. -462 бит.
10. Вәли Ә. Мин Алыҫ Көнсығыштан. Хикәйәләр. -Өфө: Башгосиздат, 1940. -80 бит.
11. Ғафури М. Һайланма әҫәрҙәр. //Төҙ.: А.Ҡудаш, Б.Еникеев. -Өфө: Башгосиздат, 1950. - 590 бит.
12. Ғафури М. Әҫәрҙәр. 4-се том. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1955. -400 бит.
13. Ғүмәр Ғ. Һайланма әҫәрҙәр: 1 томда. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1961. - 498 бит.
14. Ғүмәр Ғ. Һайланма әҫәрҙәр. (1919-1949). -Өфө: Башгосиздат, 1951. - 256 бит.
15. Ғүмәр Ғ. Мин кәләш алғанда. Юмористик хикәйәләр. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1991. -240 бит.
16. Даян Ҡ. Шиғырҙар, поэмалар, йырҙар һәм пьеса: Бер томда. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1960. -642 бит.
17. Дәүләтшин Ғ. Һайланма әҫәрҙәр. //Төҙөүсеһе: С.Дәүләтшин. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1963. -210 бит.
18. Дәүләтшина Һ. Айбикә: Повестар һәм хикәйәләр. - Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1987. -184 бит.
19. Дүрт моң. Башҡорт халыҡ шағирҙары. //Төҙөүсеһе: Ғ.Байбурин. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1976. -431 бит.

20. Ишемғол Б. Һайланма әҫәрҙәр. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1959. - 310 бит.
21. Йәнәби Т. Һайланма шиғырҙар. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1969. - 128 бит.
22. Йәнәби Т. Һайланма әҫәрҙәр. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1958. - 416 бит.
23. Карнай А. Беҙ ҡайтырбыҙ. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1975. -128 бит.
24. Карнай А. Һайланма әҫәрҙәр. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1956. -452 бит.
25. Кирәй Мәргән. Һайланма әҫәрҙәр: 2 томда: 1-се том. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1962. - 446 бит.
26. Кулибай С. Һайланма әҫәрҙәр: 1 томда. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1960. - 554 бит.
27. Ҡудаш С. Һайланма әҫәрҙәр: 3 томда: 1-се том. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1965. -521 бит.
28. Ҡудаш С. Һайланма әҫәрҙәр. 3 томда. 2-се том. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1966. -358 бит.
29. Ҡудаш С. Ҡушҡайын. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1959. - 250 бит.
30. Кәрим Х. Һайланма әҫәрҙәр. Бер томда. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1960. - 564 бит.
31. Кәрип Н. Һайланма әҫәрҙәр. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1956. - 172 бит.
32. Мифтахов С. Пьесалар. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1956. -364 бит.
33. Мохтар Х. Дауыл алдынан. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1981. -368 бит.
34. Насыри И. Әҫәрҙәр: Ике томда: 1-се том. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1957. -426 бит.
35. Насыри И. Әҫәрҙәр: Ике томда: 2-се том. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1957. - 458 бит.
36. Насыри И. Әҫәрҙәр: Өсөнсө, өҫтәлмә том. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1968. - 328 бит.
37. Ниғмәти Р. Әҫәрҙәр: 2 томда: 1-се том. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1982. - 448 бит.
38. Ниғмәти Р. Әҫәрҙәр: 2 томда: 2-се том. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1959. -420 бит.
39. Ниғмәти Р. Әҫәрҙәр. 3-сө том. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1964. - 312 бит.
40. Сәләм Ғ. Һайланма әҫәрҙәр. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1962. - 376 бит.
41. Тажи М. Һайланма шиғырҙар, поэмалар. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1956. - 158 бит.
42. Таһиров А. Һайланма әҫәрҙәр: өс томда: 1-се том. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1958. -550 бит.
43. Таһиров А. Һайланма әҫәрҙәр: өс томда: 2-се том. “Һалдаттар” романы. -Өфө: Башҡ. китап нәшриәте, 1958. -474 бит.
44. Таһиров А. Һайланма әҫәрҙәр: өс томда: 3-сө том. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1959. -594 бит.
45. Таһиров А. Ҡыҙылгвардеецтар. Ҡыҙылармеецтар. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1989. -512 бит.
46. Твардовский А.Т. Страна Муравия. Поэма. -М.: Детгиз, 1955. -95 с.
47. Фадеев А.А. Ҡыйралыш: Роман //Тәржемәсеһе: Р.Байбулатов. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1987. -176 бит.
48. Хайбуллин А. Сурағол. -Өфө: Башҡортостан дәүләт нәшриәте, 1935. -252 бит.
49. Хәй М. Һайланма әҫәрҙәр. //Төҙөүсеһе Ғ.Рамазанов. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1954. -164 бит.
50. Хәйри Ғ. Һайланма әҫәрҙәр. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1953. -210 бит.
51. Хәйри Ғ. Өсәүҙең тарихы. -Өфө: Башкортостан китап нәшриәте, 1990. -272 бит.
52. Хәкимов Ә. Өйөрмә: Роман. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1992. -240 бит.
53. Хәсән Б. Һайланма әҫәрҙәр. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1959. -152 бит.
54. Чаныш Ә. Тауҙар, үҙәндәр. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1971. -174 бит.
55. Шолохов М. Тихий Дон: Роман: В 4 кн.: 1-2 кн. -М.: Художественная литература, 1991. -605 с.

56. Шолохов М. Тихий Дон: Роман: В 4 кн.: 3-4 кн.: -М.: Художественная литература, 1991. -716 с.

57. Шолохов М. Поднятая целина: Роман: -М.: Современник, 1980. -703 с.

58. Әмири Ғ. Хикәйәләр. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1953. -252 бит.

59. Әмири Ғ. Һайланма әҫәрҙәр. 2 томда: 1-се том. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1961. -492 бит.

60. Юлтый Д. Ҡан. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1970. -348 бит.

61. Юлтый Д. Һайланма әҫәрҙәр: Ике томда: 1-се том. -436 бит.

62. Юлтый Д. Һайланма әҫәрҙәр. Ике томда: 2-се том. Хикәйәләр, пьесалар. “Ҡан” романы. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1957. -452 бит.

63. Юлтый Д. Хикәйәләр, пьесалар, мәҡәләләр. -Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1984. -352 бит.